✓ *Атайҙарығыҙ тәнегеҙҙе тәрбиәләп үҫтергән кеүек, остаздарығыҙ йәндәрегеҙҙе тәрбиәләп үҫтерә. Шунын өсөн остаздарығыҙ - бөйөк атайығыҙҙыр. Һеҙ быны ысын күңелдән ҡабул итегеҙ. Нәсихәттәрен тыңлағыҙ, ауырыуығыҙҙы табипҡа тапшырған кеүек, бөтә ихтыярығыҙҙы уларға тапшырығыҙ, уларҙың морат-теләктәренә ҡаршы килмәгеҙ.*

*РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

7 - 13 НОЯБРЬ (ҠЫРПЫҒАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№45 (359)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Социаль карта...** тиҙ ҙә, уңайлы ла



5

**Бында Рәми рухы йәшәй,** йәки Шағирға иш ҡанат булған интернатҡа - 65 йыл



6

**“Беҙҙең зекер, намаҙҙар...** фашистарҙы еңергә ярҙам итте”, - ти ине олатай



8-9

**Оҙаҡ йәшәүҙең сере -** интеллектуаль һәм физик хеҙмәт, имеш



12

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Илебеҙҙә инҡилаб-түңкәрелештәр булмаһын өсөн ниндәй шарттар мотлаҡ?

*Харис СОЛТАНОВ, тарих фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*

Иң элек ил етәкселегенең халыҡ мәнфәғәттәренә даими өҫтөнлөк биреп, унын көндәлек ихтыяж-хәстәрҙәренә иғтибарлы булыуы фарыз. Һүҙҙе күп һөйләп кенә тормошобоҙҙо яҡшыртып булмай. Етеш йәшәй алмаған, көнитмеше насар булған кешеләрҙең күңеле төшә, уларҙың власҡа ышанысы кәмей. Үҙ тормошо менән риза булмағандар күбәйә барған һайын, илдә ҡапма-ҡаршылыҡтар ҙа арта барасаҡ.

Халҡыбыҙҙың оло быуын вәкилдәре үҙ ваҡытында илйорт өсөн бар көсөн һалып эшләп, тиңдәшһеҙ фиҙакәрлек өлгөһөн күрһәтте. Бөгөн уларҙың барыһын да һәйбәт йәшәй, тип әйтеп булмай. Ниндәйҙер ҙур идеялар менән мауығып, ветерандарыбыҙға матди яҡтан ярҙам итеү менән бергә, даими ихтирам һәм хөрмәт күрһәтә белеү хаҡында ла онотмаһын ине хәҙерге етәкселәребеҙ. Оло быуынға мөнәсәбәт шулай уҡ илдең мәҙәнилеген белдерә. Мәҙәниәтле илдә инҡилабҡа урын юҡ.

Бына хәҙер килешеп йәшәүгә, халыҡ берҙәмлегенә бағышланған байрам да бар. Элек ундай байрам булманы, әммә халыҡтарыбыҙ берҙәм һәм дуҫ йәшәй алды. Ул саҡта киләсәгебеҙҙе уйлап йәшәй инек, милләт-ара ышаныс та ныҡ булғас, ыҙғыштарға юл ҡуйылманы. Һуңғы ваҡытта илебеҙҙә етем балалар күбәйеүенә ғәжәпләнәбеҙ. Иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ арҡаһында эшһеҙҙәр күбәйә, эскегә бирелеүселәр арта, ғаиләләр тарҡала. Ил киләсәгенең һәр ғаиләнең етеш тормошта йәшәй алыуы менән бермә-бер бәйле икәнен онотмаһаҡ ине. Үҙең теләгән эш, йәшәр өсөн торлаҡ, һәйбәт эш хаҡы, әхлаҡлы мөнәсәбәттәр айырым ғаиләнең генә түгел, тотош йәмғиәттең дә тотороҡлоғон тәьмин итә, һәм бындай илгә инҡилаб хәүефе янамаясаҡ.

*Ғималетдин ЯРУЛЛИН, журналист:*

Ниндәй генә инҡилаб тураһында һүҙ бармаһын, унын төп сәбәптәренең береһе - социаль ғәҙелһеҙлек. Иҡтисади яҡтан артта ҡалған дәүләттәрҙә тап ошо ерлектә бер ил гражданлары араһындағы тигеҙһеҙлек уғата көсәйеп китеп, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы хәл иткеһеҙ сиккә еткерә. Хәйерселек сигенә еткән халыҡ байыраҡ ҡатламдар ҡулындағы власҡа ҡаршы күтәрелә. Тимәк, инҡилаб-фәлән ҡупмаһын, тиһәк, ил иҡтисадын тотороҡло итә алыу фарыз.

Минеңсә, Рәсәй иҡтисадын тотороҡһоҙ иткән төп факторҙарҙың береһе - ауыл хужалығының көрсөккә төшөүе. Ғөмүмән, Рәсәй крәҫтиәндәренең быуаттар буйына хоҡуҡһыҙ синыф булып, үҙ хужалыҡтарын ирекле һәм демократик шарттарҙа ҡора алмауы ла ауыл хужалығының һөҙөмтәлелегенә тоткарлыҡ тыуҙыра. Крәҫтиәндәр совет осоронда ла баҫым аҫтында йәшәне, хәҙер ҙә үҙ хоҡуҡтары менән тейешле кимәлдә ҡуллана алмай әле. Юридик яҡтан ҡараһаң, барыһы ла етерлек кеүек: ауыл хужалығы ерҙәрен файҙаланыу буйынса яңы закондар ҡабул ителде, ер пайҙары бүлеп бирелде, аграр өлкәлә милли проект сиктәрендә саралар күрелә. Әммә барыбер тотош ил буйынса ауыл хужалығын етерлек кимәлдә финанслау мәсьәләһе хәл ителмәгән. Дәүләт ярҙамынан башҡа беҙҙең крәҫтиәндәр бар халыҡҡа етерлек ауыл хужалығы продукцияһы етештерә алмаясаҡ. Шуға күрә аҙыҡ-түлектең байтаҡ өлөшө сит илдәрҙән индерелә. Әгәр финанс-иҡтисад өлкәһендә үтә киҫкен донъя көрсөгө була ҡалһа, илебеҙҙең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеп булмаясаҡ. Ә был үҙе үк илдә сәйәси тотороҡһоҙлоҡ тыуҙырыуы мөмкин. Рәсәйҙә XX быуат башындағы инҡилабтарҙың иҡтисади көрсөк һәм халыҡ көнитмешенең үтә насарайыуы менән бәйле булыуын оноторға ярамаҫ ине.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

## ҒАИЛӘ ГӘЗИТЕ

**Беҙ ғаиләбеҙ менән башҡорт гәзиттәрен даими алдырабыҙ һәм уҡып барабыҙ. Уларҙы бер-береһе менән сағыштырғанда, "Киске Өфө"бөҙ күңелгә ятышлыраҡ тойола. Бында кешенең эске тойғоларын, ғаиләгә, хеҙмәткә, ғөмүмән, тормошҡа ҡараштарын сағылдырған, уларҙы байытыуға, үҫтереүгә йүнәлтелгән әхлаҡи темаларға өҫтөнлөк бирелә. Бигерәк тә башҡорт халҡынын үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге, милләтебеҙҙең, Ватаныбыҙҙың яҙмышы менән туранан-тура бәйле мәҡәләләр һәр беребеҙ өсөн фәһемле. Ғаиләмә лә, туғандарыма ла гәзиттең күп йүнәлешле булыуы оҡшай, шуға беҙ "Киске Өфө"нө ғаилә гәзите, тип атар инек. Донъя кимәлендә танылған шәхестәрҙең төрлө хәл-ваҡиғаларға, тормош күренештәренә бағышланған фекерҙәре уҡымлы. Бөйөк ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхретдинов нәсихәттәрен ҡалдырмай уҡыйбыҙ, ейәндәребеҙгә лә аңлатып бирергә тырышабыҙ. Таһир Ишкининдың оригиналь стилле мәҡәләләрен уҡып барһаң, халыҡ-ара ҡатмарлы хәлдәр тураһында белеп-аңлап тораһың. Ғөмүмән, гәзитебеҙҙең башҡа авторҙарының да талантлы һүҙ оҫталары булыуына инанғанбыҙ.**

**Гәзитебеҙ аҙнаға бер генә сыға, шуға унын тәүге битендә үк бер аҙна эсендә донъяла, илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа булған иң мөһим ваҡиғалар тураһында ҡыҫҡа ғына мәғлүмәттәр бирелһә, бик урынлы булыр ине.**

**Әйҙәгеҙ, милләттәштәр, "Киске Өфө"гә яҙылайыҡ, таратайыҡ, уны белмәгән, уҡымаған башҡорт ҡалмаһын!**

**Нияз МӘЖИТОВ, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, тарих фәндәре докторы, профессор, БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре.**



Белорет ҡалаһынын башҡорт теле уҡытыусылары.

*✓ Әйҙәгеҙ, мөғжизәләр исемлеген артабан тулыландырайыҡ. Ошо йәһәттән беҙҙең район, ҡала гәзиттәрендә эшләүсе коллегаларыбыҙға ла тәҡдимебеҙ бар: ниңә ошо акцияны һәр районда үткәрмәҫкә?*



ШАҢДАУ

**Бына беҙҙең йортобоҙ янындағы урамға, ниһайәт, асфальт түшәнеләр. Халыҡ бик ҡыуанды. Тик бер-ике ай тирәһе ваҡыт үттеме-юҡмы, бер бригада эшселәре килеп етте лә, ул асфальтты ҡуптарып алып ташлап, тәрән оҙон соҡор ҡаҙыны. Оҙайлы ямғырҙар яуып, ул соҡорға һыу тулды. Бер-ике аҙнанан яңы бригада килеп, насос-ҡачалкалар ҡуйып, ул болғансыҡ ямғыр һыуын күрше урамдарға ағыҙҙы. Тағы бер бригада эшселәре килеп, ул соҡорҙарға торбалар йәйҙе, икенселәре килеп торбаларҙы күмеп ҡуйҙы. Бер айҙан тағы ла асфальт түшәнеләр. Бер аҙҙан тағы ла ул асфальтты емерҙеләр ҙә тағы ла соҡор ҡаҙҙылар...**

# БАРЫҺЫ ЛА ЭШЛӘЙ,

## ә эшһеҙлек ҡайҙан?

1 сентябрҙә күршем, беҙҙә ошолай эшләйҙәр, тип көлә-көлә, тағы ла ошоға оҡшаш хәлде һөйләне: "Кисә, 31 августа, иртән иртүк йоҡонан тороп, балаларыма барырға йыйындым. Ғәҙәтем буйынса, һауа торошон белер өсөн тәҙрәмдән урамға күҙ һалдым. Шул саҡ урамда бер төркөм ирҙәр йыйылышып баҫып тороуын күрҙем. Кейгән кейемдәренә ҡарағанда, бик ҙур түрәләргә оҡшаттым. Араларында милиция, янғын һүндереү ойошмаһы вәкиле лә бар. "Әллә берәй хәүефле хәл-ваҡиға бармы?" - тип борсолдом. Ул төркөм таралғас, сәй эсергә ултырҙым. Көләшеү тауыштары ишетеп, тағы ла тәҙрәмдән урамға ҡараным. Ҡыҙғылт-һары эш кейеме кейгән урам һеперәүселәр, үңлы-һуллы һелтәнеп, ярты ҡапсыҡ көҙгә япраҡтарҙы йыя-йыя үтеп киттеләр. Һыуынған сәйемде ҡабат йылытып, бер-ике генә ҡапҡылағайным, ҡаты гөрһөлдәү ишетеп, тағы ла тәҙрәмә ҡапландым. Бәҡтиһән, "импортный" урам һеперәү машинаһы беҙҙең урамдан ашыҡмай ғына үтеп бара. "Былай булғас, беҙҙең урам көҙгәләй ялтырап ҡалыр инде", - тип хыялланып, ҡабат сәйемде эсә башланым. Машина геүләүе тынғайны, көләү, шау-шыу ишетеп, тағы ла тәҙрәм аша ҡараһам, икенсе төркөм урам һеперәүселәр бригадаһы килеп, шул уҡ урамды өсөнсөгә һеперә башланы. Ә мин үҙ алдыма ҡыҫҡырып көләп ебәрҙем. Урам һеперәүселәрҙең береһе көрәге менән бер көн элек көн буйы яуған ямғыр менән газондарҙан ағып төшкән ҙур батҡаҡ өйөмөнә бер-ике төрткөләне лә китеп барҙы. Инде тындылар, тиһәм, юҡ, был бригада артынан ҙур тимер щеткалы урам һеперәү машинаһы тағы ла беҙҙең урамды бер яҡлап ҡына һеперепер үтеп китте. Балаларыма барырға сыҡҡас: "Ниңә беҙҙең урамды бөтәһе лә һеперә?" - тип, был хәлде күҙәтеп ултырыусы оло йәштәрҙәге апайҙан һорашмай булдыра алманым. "Иртәгә 1 сентябрь бит. Ә урам аша урынлашҡан мәктәпкә ҙур түрәләр килә", - тине ул.

Балаларыма барып, кисен әйләнеп ҡайтһам, беҙҙең урамда теге ҡатҡан батҡаҡ өйөмө күҙемә салынды. Күпме кеше һеперепер үтте. Ә батҡаҡ өйөмө, күҙгә сүп һымаҡ булып, урынында ғорур ята бирә. "Дә-ә-ә", былай булғас, беҙҙең илдә эшһеҙлек булмаҫҡа тейеш тә инде...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ 777... МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ҺАҠЛАНЫП ҠАЛАБЫҘ, ТИҺӘК,

## хазиналарыбыҙҙы һаҡлайыҡ

**Быйыл йыл башында иғлан иткәйнек "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" исемле конкурсты. Ике аҙна элек халыҡ тәҡдим иткәндәргә, шунан сығып яһалған һығымталарға таянып, үҙебеҙҙең тойомлауҙарҙы, рухиәт, тарих тураһындағы белемебеҙҙе лә эшкә егеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" акцияһына йомғаҡ яһаныҡ. Ярҙамға аҡһаҡалдарыбыҙ Рәшит Шәкүр менән Ғайса Хөсәйеновты, шулай уҡ тарихыбыҙҙы яҡшы белгән Спартак Ильясов, Зәкирйән Әминевты, рухи ҡомартҡыларыбыҙ тураһында ғәйәт күп мәғлүмәткә эйә Юлай Ғәйнетдиновты саҡырғайныҡ.**

Бер тауыштан яһалған һығымта шундай булды: "Мөғжизәләр теҙелеп киткән бик ҙур был исемлекте халҡыбыҙ өсөн иң-иң мөһимдәре башлап ебәрә, улар: башҡорт халҡы, Уралтау, "Урал батыр" эпосы, ҡурай, башҡорт халыҡ йыры, башҡорт бал ҡорто, Шүлгәнташ мәмерйәһе".

Был исемлекте тулыландырыуҙы, мөғжизәләр тураһында һөйләүҙе дауам итәбеҙ. Яңы рубриканы "Башҡортостандың 777... мөғжизәһе" тип атарға булдыҡ. Уның девизы:"Башҡортостаныбыҙҙы һәм халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалабыҙ, тиһәк, ошо мөғжизәләребеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ". Башҡортостан һәм башҡорт халҡы бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсәләр. Уларҙың береһен һаҡлау, яҡлау икенсеһен яҡлауға һәм һаҡлауға тин. Был - аксиома. Спартак Ильясов әйткәнсә, әгәр ҙә башҡорт халҡы ошо мөғжизәләр илен һаҡлар өсөн оло фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ күрһәтмәһә, ҡорбандар бирмәһә, беҙ бөгөн ошо мөғжизәләргә ҡарап һоҡлана алыр инекме ни? Һәр хәлдә, башҡорт халҡы ошо ерҙе тыуҙырмаһа ла, йәне ошо ерҙә яралғандан алып Уралтауына тоғро булып, уға ҡалҡан булып йәшәгән һәм йәшәй икән, ошо күренеш үҙе генә лә мөғжизә бит.

Әйҙәгеҙ, мөғжизәләр исемлеген артабан тулыландырайыҡ. Ошо йәһәттән беҙҙең район, ҡала гәзиттәрендә эшләүсе коллегаларыбыҙға ла тәҡдимебеҙ бар: ниңә ошо акцияны һәр районда үткәрмәҫкә? Мәҫәлән, "Торатау" гәзитендә "Ишембайҙың ете мөғжизәһе" тигән рубрика асҡанда, районда йәшәүселәр үҙ ауылы янындағы мөғжизә-хазиналарға, ҡиммәттәргә өр-яңы күҙлектән баҡыр, уларҙы ҡәҙерләргә өйрәнер, уларҙа тыуған яҡ тарихына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяныр ине. Беҙ был акцияның ошондай тәрбиәүи әһәмиәткә эйә икәнен үҙебеҙҙең тәжрибәлә күрҙек инде. Гәзит биттәрендә уҡыған һәр мәҡәләнән, телевизорҙан ҡараған һәр тапшырыуҙан һуң кемдер: "Кара, Башҡортостан мөғжизәләр иле икән дәбаһа!" тип һоҡланыу белдергән икән, тимәк, беҙҙең акция күңелдәрҙә эҙһеҙ үтмәгән.

Шулай итеп, мөғжизәләр тураһында яҙыуҙы дауам итәбеҙ. Хаттар, сығыштар көтәбеҙ. Һеҙҙең үҙегеҙҙең ниндәй тәҡдимдәрегеҙ булыр, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**● 2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара, тип иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**

**● Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.**

**● "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, тыуған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.**

**● Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.**




НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Мәғлүмәттәр буйынса, быйыл һигеҙ айҙа Рәсәйҙә 16 йәшкә тиклемге балалар ҡатнашлығында 13366 юл-транспорт ваҡиғаһы булған. Уларҙа 587 бала һәләк булған, 12779-ы төрлө йәрәхәт алған. Башҡортостанда 271 аварияла 15 бала үлгән, 267- һе зыян күргән. БР Хөкүмәтенең Бәлиғ булмағандар һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау эше буйынса комиссия ултырышында ошо мәғлүмәттәр телгә алынды.

✓ Беренсе тапҡыр уҙғарылған Бөтә Рәсәй "Арена" милли конкурсы һөҙөмтәләре буйынса Өфөнөң "Биатлон" һәм Әбйәлил районы Аҫҡар ауылындағы "Батыр" спорт комплекстары Рәсәйҙең спорт һәм ял өсөн иң өлгөлө ҡоролмалары, тип танылды. Был конкурста Рәсәйҙең 27 төбәгенән 70-тән ашыу спорт объекты ҡатнашҡан.

✓ Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы янындағы Үҙәк музыка мәктәбендә "Балалар сәнғәт мәктәбенең иң яҡшы уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәрҙе ҡотлау тантанаһы булып үтте. Конкурста Рәсәй Федерацияһының төрлө төбәктәренән 50 уҡытыусы еңеүсе тип танылған. Улар араһында Башҡортостандан Н. Сабитов исемендәге 1-се Балалар музыка мәктәбе уҡытыусыһы Лариса Ежова һәм Мәләүеҙҙең 1-се Балалар музыка мәктәбе уҡытыусыһы Тәлғәт Нуриев та бар. Тәлғәт Нуриев утыҙ йыл инде балаларҙы ҡурайҙа уйнарға өйрәтә. Мәскәүҙә үткән тантанала ул ҡурайҙа уйнап күрһәтә һәм РФ мәҙәниәт министрлыгы ҡурай бүләк итә.

✓ Быйылдан башлап республикала аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләргә торлаҡ алыу өсөн социаль түләүҙәр биреү ҡаралған. Шундай саралар сиктәрендә быйыл 25 күп балалы ғаиләгә 49,4 миллион һумлыҡ торлаҡ сертификаты тапшырылған да инде. Ғөмүмән, күп балалы ғаиләләр беҙҙә айырым иғтибар үҙәгендә. Республика законы буйынса ундай ғаиләләрҙәге балалар түләүһеҙ мәктәп формаһы, түләүһеҙ туҡланыу менән тәьмин ителә, ҡала транспортында түләүһеҙ йөрөй.

✓ Башҡортостан Милли музейында сәхнәләштерелгән экскурсиялар ойоштороло башлаясаҡ. Тәүге тамаша-сәйәхәт балаларға тәғәйенләнгән һәм ул Ҡыш бабай хаҡында буласаҡ.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# СТЕНАЛАРҘЫ КЕМ ЕМЕРӘ...

## Һәм кем төҙөй?

**Оҙонлоғо 155 саҡрым. Шул иҫәптән, ҡала сиктәрендә 43 саҡрым. 106 саҡрым бетон стена, өҫтәмә рәүештә 66,5 саҡрымлыҡ тимер селтәр тарттырылған, 127,5 саҡрым электр уты аҫтында. Тағы ла 105,5 саҡрымлыҡ тәрән урҙар ҡаҙылған. Бейеклеге - уртаса 3,6 метр. 302 ҡарауыл вышкаһы. Һәм ни бары өс сик буйы тикшереү-үткәреү посы.**

Был Берлин стенаһы. 1961 йылдың 13 августынан 1989 йылдың 9 ноябренә тиклем Көнсығыш һәм Көнбайыш Берлинды айырып торған диуар. Бөйөк Ҡытай стенаһына етмәй, әлбиттә. Шулай ҙа бик мөһабәт ҡоролма. Быйыл уның емерелеүенә теүәл егерме йыл тулды. Ә төҙөлөүенә... 48 йыл да булып киткән икән. Ошо көндәрҙә бөтә Германия Стенаны емереү юбилейын тантаналы рәүештә билдәләй. Германия ғынамы? Бар донъя байрам итә. Аныҡлап үтәйек, бар цивилизациялы донъя. Йәғни, Көнбайыш Европа, Америка Ҡушма Штаттары һәм уларҙың сәйәсәтен ҡабул иткән ҡайһы бер илдәр. Берлин стенаһы Германия баш ҡалаһын һәм уның халҡын ике өлөшкә айырып торған ябай ғына ҡоролма булманы. Ул донъяны икегә бүлде. Бер яҡтан - Советтар Союзы һәм социалистик дәүләттәр системаһы. Икенсе яҡтан - Америка Ҡушма Штаттары, Англия, Франция, ғөмүмән, капитализм донъяһы. Ул - ике система, ике идеология осрашҡан, бәрелешкән урын булды. 1989 йылдың 9 ноябрендә Стена ғына түгел, ә коммунизм төҙөү - кешелек өсөн берҙән-бер һәм иң дөрөҫ юл тип иҫбатланған идеология юҡҡа сыкты. Бәктиһәң, айырым кешегә ҡасандыр яуланасаҡ Азатлыҡ, Тигеҙлек һәм Туғанлыҡ кәрәк түгел икән. Уға бөгөн һәм ошонда үҙе, ғаиләһе һәм яҡындары өсөн муллыҡ, именлек һәм етеш тормош мөһимерәк. Ваҡытында таныштарымдың береһе: "Һәр бер кеше үҙе һәм ғаиләһе өсөн коммунизм төҙөһә, бөтә Ер шарында коммунизм буласаҡ", - тигәйне. Бәктиһәң, бына нисек яңғырай икән коммунизмдың формулаһы!

Әйтергә кәрәк, 1961 йылда Берлин стенаһы капиталистарҙан бигерәк, коммунистарға кәрәк булып сыҡты. Йәғни, Көнбайыш үҙ халҡының коммунизм идеялары менән зарарланыуынан ҡурҡманы. Киреһенсә, социалистик система кешеләрҙе көнбайыш йоғонтоһонан һаҡларға маташты.

Германия Демократик Республикаһының 1960 йылдарҙағы етәксеһе Вальтер Ульбрихт Мәскәүҙә үткән Варшава Килешеүендә ҡатнашыусы илдәр кәңәшмәһендә Көнсығыш һәм Көнбайыш Берлин араһындағы сикте ябып ҡуйырға һәм быны өсөн стена төҙөргә тәҡдим итә. Уның был фекере яҡлау һәм хуплау таба. 1961 йылдың 13 августында сиктәр ябыла. Стена төҙөлә башлай. ГДР етәкселегенең Стенаны төҙөү идеяһы буш урында тыумай. Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланғас, союздаш дәүләттәр тарафынан Германия секторҙарға бүленә. Шул иҫәптән, Берлинда ла көнбайыш һәм көнсығыш секторҙары барлыҡҡа килә. Көнсығыш Германияла Советтар Союзы үҙ тәртибен урынлаштыра - бында коммунистик партия тибы буйынса эшселәрҙең социалистик фирҡәһе булдырыла, коллективлаштырыу ойошторола. Яңы тәртип менән ҡәнәғәт булмаусылар эҙәрлекләнә. Германия Демократик Республикаһы Көнбайыш илдәре халҡы өсөн "социализм системаһының өҫтөнлөктәрен сағылдырыусы "көҙгө" булырға тейеш", тигән фекер өҫтөнлөк итә. Әммә көнсығыш немецтары был "көҙгөнән" ҡаса башлай. Күпләп ҡаса. 1961 йыл эсендә генә көнсығыштан көнбайышҡа 207 меңдән ашыу кеше ҡасып сыға. Ә 1961 йылдың июлендә генә 30 мең йәш немец капитализмды коммунистик системанан өҫтөн күрә. Көн һайын бер мең кеше социализм "ожмах"ы урынына (ә Германияны бер ваҡыт шулайтып та атап йөрөнөләр) капитализм "тамуғын" һайлай икән, был бит бушҡа түгел!

Әйтергә кәрәк, Берлин стенаһы капиталистик дәүләттәр өсөн дә бик уңайлы булды. 1919 йылда уҡ Франция премьер-министры Жорж Клемансо Париж солох конференцияһында: "Беҙ большевизм тирәләй уға цивилизациялы Европаны емерергә ҡамасаулаған тимер шаршау ҡорорға теләйбеҙ" - тип белдерә. Уның был һүҙҙәре 1961 йылда ысын мәғәнәлә тормошҡа аша. Тик был "шаршау"ҙы социализм системаһы үҙенә-үҙе ҡорған булып сыға. Ошо "шаршау" һуңынан социалистик идеологияның ерләүсеһе була ла инде.

Бөгөн бер кем өсөн дә сер түгел: Көнбайыш дәүләттәренең Бөйөк Ватан һуғышынан һуң үткәргән тышҡы сәйәсәтенең төп йүнәлеше - Советтар Союзын һәм, ғөмүмән, социалистик системаны юҡҡа сығарыу ине. Улар быға өлгәште. Әлбиттә, үҙҙәре генә түгел. Берлин стенаһының емерелеүенә 20 йыл тулыу айҡанлы тантаналарҙа Германияла һәм Берлинда иң хөрмәтле, иң арҙаҡлы, көтөп алынған ҡунаҡтар араһында Михаил Сергеевич Горбачев та булды. Эйе, эйе, хәтерләйһегеҙҙер, Советтар Союзының беренсе һәм һуңғы Президенты. Берлин стенаһын ғына түгел, ғөмүмән, бөтә донъя коммунистик системаһы нигеҙен емереүсе тип атайҙар уны. Ә ҡайһы берәүҙәр хатта "хыянатсы" тип ебәрә. Ҡыҙыҡ, Михаил Сергеевич 80-се йылдар уртаһында асыҡлыҡ һәм үҙгәртеп ҡороу иғлан иткәндә уның ошо идеялары һәм эшмәкәрлеге бөгөнгө һөҙөмтәләргә килтерер, тип уйланымы икән?

Берлин стенаһы инде егерме йыл юҡ. Әммә Көнбайыш һәм Көнсығыш араһында дуҫтарса мөнәсәбәт, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара аңлашып, килешеп эш итеү булдырылдымы? Әллә һаман да Рәсәй көнбайыш дәүләттәре өсөн, ә Америка Ҡушма Штаттары һәм Көнбайыш Европа илдәре Рәсәй өсөн дошман булып ҡаламы? Дошман, тип үк асыҡтан-асыҡ әйтеп булмайҙыр, әммә дуҫ тип тә әйтерлек түгел. Стена емерелеү менән ике аралағы дәғүәләр кәмемәне, артты ғына. Стена юҡҡа сығыу менән көнбайышҡа Рәсәйҙән күпләп "аҡыл" (йәғни, ғалимдар, юғары квалификациялы белгестәр) ҡасты, ә беҙгә иһә... нимә генә ағылманы беҙгә. Яҡшыһы ла, яманы ла. Ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, яманы күберәк булды. Эш унда ла түгел. Хәҙер тәү ҡарашҡа Рәсәй менән көнбайыш илдәре араһында (һәр хәлдә, идеология йәһәтенән) ҡапма-ҡаршылыҡтар юҡ кеүек. Беҙ ҙә улар кеүек үк капитализм төҙөйбеҙ. Завод-фабрикаларҙы эшҡыуарҙарға таратып бирҙек (икенсерәк әйткәндә, "хосусилаштырыу" була инде), әле сиратта - ер. Күп кенә партиялар булдырҙыҡ. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ Көнбайышҡа бер нисек тә яҡынлаша алмайбыҙ. дөрөҫөрәге, ул беҙҙе бер генә лә яҡынайтҡыһы килмәй. Үҙенән алыҫтараҡ тотоуҙы уңай күрә.

Киреһенсә, Советтар Союзы заманындағы Берлин стенаһына алмашҡа яңы "диуар" килде. Уны тиҙ генә емерерлек түгел. Ул "стена"ның кирбестәре - тотош дәүләттәр. Көнсығыш Европаның элекке социалистик илдәре һәм Советтар Союзының элекке республикалары. Ә ул "стена"ны төҙөүселәр - Америка Ҡушма Штаттары һәм Көнбайыш Европа дәүләттәре. Көнбайыш Европа менән Рәсәй араһында хәҙер бер түгел, ике һыҙаттан торған "санитар кордоны" булдырылды. Беҙгә яҡынырағы - Украина, Грузия, Балтик буйы дәүләттәренән ғибәрәт. Алыҫырағы иһә - Польша, элекке Югославия республикалары. Әйткәндәй, ябай стенанан айырмалы рәүештә, был "кордон" ҡайһы бер нәмәләрҙе ҡаршылыҡһыҙ "үткәрә". Мәҫәлән, "суҫҡа кизеүе" Рәсәйгә бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ үтеп инә. Наркотиктар индереүгә лә бер нисек тә ҡаршы тормай был "стена". Киреһенсә, булышлыҡ ҡына итә кеүек тойола. Европаға һәм Америка Ҡушма Штаттарына яҡшы тормош артынан киткән "аҡылдар" ҙа был "стена" аша еңел генә үтеп китә. Сит илдәрҙән көнкүреш кәрәк-яраҡтары, төрлө аппаратура индереп була, ә, мәҫәлән, яңы технологияларҙы - юҡ.

Беҙҙән Европаға нефть һәм газ гөҙләп кенә ағыла. Илебеҙҙән капиталын сығарырға теләүселәр ҙа уны бик еңел генә эшләй ала. Стена юҡ та һымаҡ. Ә Рәсәй тауарҙары Европаға үтмәй. Ғәжәп бит. Беҙҙең етәкселәргә тегеләй йәки был сәбәп менән ярамаған олигархтар ҙа Европаға тиҙ генә сығып китә. Әммә уларҙы кире ҡайтартыу өсөн бик күп көс түгергә тура килә. Әле быға тиклем Көнбайыш Европаға ҡасҡан "березовский"ҙарҙың береһе лә Рәсәйгә кире ҡайта алманы. Әллә үҙҙәре теләмәй, әллә "стена" үткәрмәй инде?

Бөгөн илебеҙ яңы янауҙар алдында тора. "Суҫҡа кизеүе" хаҡында әйтмәйем инде. Уны нисек тә булһа ауыҙлыҡларҙар әле. Рәсәйҙең именлегенә, уның бөтөнлөгөнә, берҙәмлегенә янаусылар бихисап. Берҙән-бер сара - яңынан Стена төҙөү. Ял итеүселәрҙе сик буйынан бороп ҡайтарыуҙан башлаһаҡ, аҡса һәм "аҡыл"дарҙы ситкә сығыуҙан туҡтатһаҡ, Бөтә донъя селтәренең ситкә һуҙылған ептәрен "ҡырҡып" ташлаһаҡ, рәхәтләнеп капитализм төҙөргә була. Сит илдәрҙә беҙгә ҡаршы боҫоҡлоҡ уйлап ултырған олигархтарҙы онотҡанмын икән. Уларҙы берәмшәрәм урлап алып ҡайтып хөкөм итергә була. Быны шул ваҡытта инде беҙгә йөшәргә бер кем дә ҡамасауламаясаҡ.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Композитор Айрат Ғайсин Башҡортостан Республикаһы Композиторҙар союзы рәйесе итеп һайланды.

✓Быйыл Башҡортостандан 200 кеше хаж сәфәренә юлланасаҡ, тип көтөлә. Мәккәгә беҙҙең илдән бөтәһе 20 меңдән ашыу мосолман барасаҡ.

✓Башҡортостанда, бөтә Рәсәйҙәге кеүек үк, яман шеш сире менән ауырыусылар күбәйә бара. Республикала онкологик ауырыуҙар кимәле 100 мең кешегә 277,9 булһа, Рәсәй буйынса был күрһәткес - 345,3. Онкологик сирҙәр буйынса беренсе урында - үпкә, икенсе урында - һөт биҙҙәре, өсөнсө урында тире яман шеше теркәлгән. Республикала ҡатын-ҡыҙҙарҙың һөт биҙҙәре шешен иҫкәртеү маҡсатында күсмә маммография кабинеты эшләй. Ошо кабинетта 2009 йылдың тәүге 6 айында районда ҙа йөшәүсе 2,5 мең ҡатын-ҡыҙ ҡаралыу үткән.

✓Республика Роспотребнадзоры белдереүенсә, Башҡортостанда талпан энцефалиты менән сирләү биш тапҡырға күбәйгән. Былтыр талпандан 14 кеше зыян күрһә, быйыл ошо сиргә дусар булғандар һаны 75-кә етеп, бер кешенең үлем осрағы теркәлгән. Бындай хәлдә булдырмаҫ өсөн Роспотребнадзор вакцинация эшләү планын арттырасаҡ.

✓Башҡортостанда 90 мең кешенең күҙ катарактаһы арҡаһында күреү һәләте түбәнәйә. Бер аҙна эсендә Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында 200 кешегә һаләма күҙ яҫмығы ҡуйыу операцияһы эшләнә. Мотлаҡ медицина страховкаһы фонды һәм институт араһында төҙөлгән килешеүгә ярашлы, бынан ары 4 мең һум торған сит ил линзалары өсөн сығымдарҙы ошо фонд ҡаплаясаҡ, катаракта сиренә дусар булғандарға операция бушлай эшләнәсәк.

✓Йәш ғалимдарҙан һәм фәнни коллективтарҙан 2009 йылға Башҡортостан Республикаһы грантарына ғаризалар ҡабул итеү дауам итә. Конкурста 35 йәшкә тиклемге ғалимдар, аспиранттар, белгестәр ҡатнаша ала. Ғаризалар 1 декабргә тиклем БР Фәндәр академияһында Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 15 адресы буйынса ҡабул ителә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# НАРКОМАНДЫ...
## үҙ мәлендә асыҡла

**Былтыр сентябрҙән декабргә тиклем баш ҡала мәктәптәренең өлкән синиф уҡыусылары үҙ теләктәре менән наркотиктарға һәм психотроп матдәләргә тикшереләү өсөн тест үткәйне. Яҡынраҡ Өфө ҡала округы хакимиәтендә ойошторолған матбуғат конференцияһы ошо мәсьәләгә арналды.**

Был тикшереүҙә Өфө ҡалаһының 141 мәктәбе ҡатнашҡан, тест үткәреү өсөн 1-се Республика наркология диспансерынан 76 хеҙмәткәр, белем биреү учреждениеларынан 1686 педагог, 193 социаль педагог, 132 психолог йәлеп ителгән. Тест үткәрелгән мәлдә ата-әсәләр ҙә ҡатнаша алды, ә 15 йәше тулмаған, әммә экспресс-диагностика үтергә теләүсе уҡыусылар тестҡа тик ата-әсәнең рөхсәте һәм уларҙың береһенең ҡатнашлығында ғына үтә алды. Бындай уҡыусылар һаны 145-кә етте. Дөйөм алғанда, бөтәһе 16841 уҡыусы теста ҡатнашты, был өлкән синиф уҡыусыларының 92 процентын тәшкил итә. Тикшереү һөҙөмтәһендә наркотик һәм көслө тәьҫир итеүсе матдәләр ҡулланыусы 43 кеше асыҡланды, уларҙың 20-һе наркотик, ә 23-ө төрлө дарыуҙар составында булған наркотик матдәләр ҡулланған.

Бындай сараны 2009-2010 уҡыу йылында ла үткәреү ҡаралған. Ағымдағы йылдың июнь айында йыйылған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 9-11 синыфтарҙа белем алыусыларҙың һаны - 22438. Тестҡа быйыл 9-сы синыфҡа күскән, 15 йәше тулған уҡыусылар һәм төрлө сәбәптәр менән былтырғы уҡыу йылында тест үтмәгән балалар йәлеп ителәсәк. Ҡалала өлкән синиф уҡыусылары һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн "ышаныс телефоны" ла эшләйәсәк, унда психолог кәңәше лә алырға мөмкин буласаҡ.

# УҠЫУ ЙОРТО ЛА,
## директоры ла шәп

**Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы урта махсус уҡыу йорто" номинацияһында "Европа сифаты" Алтын миҙалына лайыҡ булды.**

Бындай миҙал менән белгестәр әҙерләүҙә, инновацион эшмәкәрлектә һәм төбәктә социаль проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән иң алдынғы урта һөнәри белем биреүсе учреждениелар бүләкләнә. Бөтә Рәсәй "Европа сифаты" Алтын миҙалы" конкурсы РФ Хөкүмәте, РФ Дәүләт Думаһы, РФ Федерацияһы Советы һәм Рәсәй урта һөнәри белем биреүсе учреждениелар директорҙары Союзы ҡатнашлығында үткәрелә. 30 октябрҙән 2 ноябргә тиклем Санкт-Петербургта конкурстың һөҙөмтәләре яһалды. Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү машиналары колледжы конкурстың лауреаты исеменә лайыҡ булһа, уҡыу йортоноң директоры Ҡунысбаев Сәйфетдин Зәйнетдин улы "Йыл директоры - 2009" билдәһе менән бүләкләнде.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Туҡһанынсы йылдар аҙағынан башлап вуздар тик олимпиада еңеүселәрен уҡырға алырға тырыша, сөнки олимпиада абитуриенттың юғары интеллектуаль кимәле тураһында һөйләй.**

# ОЛИМПИАДАЛАРҘА ҠАТНАШ -
## был юғары уҡыу йортона тура юл



Был юҫыҡта ике йыл элек тағы ла етди үҙгәрештәр булды: Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы менән Рәсәй ректорҙары берлеге дөйөм белем биреүсе фәндәр буйынса мәктәп олмпиадалары контролгә алды һәм Рәсәй Мәктәп олимпиадалары советы барлыҡҡа килде, уның рәйесе итеп ректорҙар берлеге рәйесе, МДУ ректоры Виктор Садовничий һайланды.

Был олимпиадаларҙы 4 этаптан торған Бөтә Рәсәй олимпиадалары менән бутарға ярамай. Хәҙерге ваҡытта вуз олимпиадалары, мәҫәлән, "Киләсәккә аҙым", "Воробьев тауҙарын яула", "Физтех", "Ломоносов исемендәге турнир" һәм Бөтә Рәсәй аэрокосмик олимпиада тап ошо совет ҡарамағында йыл һайын 1 сентябрҙән 15 майға тиклем үтә. Быйыл аэрокосмик олимпиаданы Өфө дәүләт авиация-техник университеты уҙғарҙы. Бөтә олимпиадаларҙың һуңғы этабында еңеүселәр билдәләнә, 1-се дәрәжәләге дипломға лайыҡ булған уҡыусылар - еңеүсе тип, ә 2-се һәм 3-сө дәрәжәләге дипломға эйә булыусылар олимпиада бүләкләнеүсеһе (призер) тип атала. Бындай уҡыусылар һаны һуңғы этапта ҡатнашыусыларҙың 45 процентынан артмаҫҡа тейеш.

Былтырғы уҡыу йылында беренсе тапҡыр Рәсәйҙә уҙғарылған бындай олимпиадалар һаны 120-гә етте, унда барлығы 423 мең 604 уҡыусы ҡатнашты, еңеүсе һәм бүләкләнеүсе тип табылғандар иҫәбе 20 мең 663 ине. Мәғариф министрлығы ҡарарына ярашлы, тап ошо еңеүсе һәм бүләкләнеүселәр вузға уҡырға ингәндә өҫтөнлөк менән файҙалана ла инде, льготаның яраҡлылыҡ ваҡыты - 1 йыл. Льгота өс төрлө була ала, вуздың нисек хәл итеүенә ҡарап, еңеүселәр һәм бүләкләнеүселәр БДИ-нан предмет буйынса максималь балл йыйыусылар, профилле, ижади йәки һөнәри йүнәлеш буйынса өҫтәмә ҡабул итеү имтихандарын үтеүселәр менән тиңләшә, имтихандарһыҙ уҡырға ҡабул ителә ала. Мәҫәлән, беҙҙең Башҡорт республика лицей-интернатының сығарылыш уҡыусылары математика буйынса Бөтә Рәсәй аэрокосмик олимпиадала ҡатнашты һәм улар араһынан 3 уҡыусы: Бәхтийәр Биксәйев, Азамат Мәхмүтов һәм Дамир Ғәниев еңеүсе тип табылды. Был уҡыусылар лицейҙы тамамлағансы уҡ ӨДАТУ һәм олимпиаданы ойоштороусы башҡа вуздарҙың студенттары булғайны инде. 10 бүләкләнеүсе математика буйынса максималь балл алды һәм ӨДАТУ-ның иң престижлы техник факультеттарына уҡырға инеү мөмкинлегенә эйә булды. Шуны ла әйтергә кәрәк: Санкт-Петербург дәүләт университеты үткәргән физика буйынса олимпиада еңеүсеһе һәм бүләкләнеүсеһе дипломы беҙҙең уҡыусыларға ӨДАТУ һәм СПбДУ-ға уҡырға ингәндә 100 балл йыйырға ярҙам итте. Сентябрь айында билдәле булыуынса, илдең вуздарына ҡабул ителгән беренсе курс студенттарының ҙур өлөшөн март аҙағы - апрель башында үткән "Киләсәккә аҙым" тип аталған фәнни ярыш еңеүселәре тәшкил иткән.

Бөгөнгө көндә мәғлүмәтле булыу ҙур өҫтөнлөк бирә икәнен оноторға ярамай. Олимпиадалар, уларҙың үткәрелеү урыны һәм ваҡыты, мәсьәлә өлгөләре менән www.rsr-olymp.ru сайтында танышырға була. Теге йәки был вузға уҡырға инеү өсөн документтар тапшырғанда ҡабул итеү ҡағиҙәләрен һәм олимпиада дипломы иҫәпкә алыныу-алынмауын асыҡларға кәрәк.

Был олимпиадалар бөтә Рәсәй буйлап ижади фекерләүсе уҡыусыларҙы йыйыу буйынса ғәйәт ҙур эш башҡара, сөнки уҡыусы бер типтағы тест һорауҙарына яуап бирә алмауы бар, әммә ул анализлай, фекерләй белә һәм мәсьәләне хәл итеү өсөн ғәҙәти булмаған юлдар тәҡдим итә. Олимпиадалар тап ошо юҫыҡта БДИ-ның етешһеҙлектәрен төҙәтергә һәм юғары уҡыу йортона уҡырға инергә мөмкинлек бирә лә инде.

Яңы уҡыу йылы башында Рәсәй олимпиада советына 175 проект тәҡдим ителгәйне, улар араһында Физика буйынса Башҡорт дәүләт университетының асыҡ олимпиадаһы бар. Әлеге ваҡытта был исемлек РФ Мәғариф министрлығында раҫлана. Күҙаллауҙар буйынса, был 175 олимпиадала еңеүселәр һаны - 6,3 мең, ә бүләкләнеүселәр 19,8 мең буласаҡ, йәғни был һан 2010 йылдың абитуриенттарының 4 процентын тәшкил итәсәк.

Олимпиадалар хәрәкәте тиҙҙән тағы ла үҫәсәк һәм киңәйәсәк, күберәк төбәктәрҙә үҙ эсенә аласаҡ. Шуға ла Башҡортостан уҡыусыларын ошондай типтағы олимпиадаларҙа ҡатнашыуға әҙерләү буйынса эште бөгөн үк башларға кәрәк. Быны конкурентлыҡҡа һәләтле интеллектуаль элитаны асыҡлау һәм әҙерләү тип аңларға ла була, сөнки шундай кешеләргә республика алдына ҡуйылған мәсьәләләрҙе хәл итергә тура киләсәк.

**Илдар ҠАҘНАБАЕВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Әле Өфөлә барлығы 220 балалар баҡсаһы, 7 башланғыс мәктәп-баҡса эшләй. Уларҙа 37 мең бала, йәғни мәктәпкәсә йәштәге бөтә балаларҙың 67 проценты йөрөй. Бынан тыш, ата-әсәләр ҡыҫҡа ваҡытлы балалар баҡсаһы төркөмө хеҙмәтенән дә файҙалана һәм балаларын бер нисә сәғәткә ҡалдырып китә ала. Шундай 40 төркөм бар баш ҡалала. Ләкин былар барыбер етерлек түгел. Әле балалар баҡсаһынан урын алыр өсөн 8 мең бала сиратта тора. Шуға ла яҡындағы өс йылда Өфөлә тағы ла 13 балалар баҡсаһы төҙөләсәк. Ошо туралағы мәғлүмәт менән сығыш яһаны Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов Өфө ҡала округы Советы сессияһында.

✓ Халҡы 250 мең кешенән ашыу булған 58 ҡала ҡатнашҡан һәм баҙар торошо, төҙөлөш, сауҙа, халыҡтың тормош кимәле һәм именлеге иҫәпкә алынған Рәсәй ҡалалары рейтингында Өфө инвестициялар йәлеп итеүселәр исемлегендә өсөнсө урынды биләй. Беренсе баҫҡыста - Екатеринбург, икенсеlә - Краснодар.

✓ "2010 йылға Өфө ҡала округы бюджеты тураһында" закон ҡабул итеү алдынан 17 ноябрҙә 15 сәғәттә Ҡала мәҙәниәт һарайында Асыҡ тыңлауҙар үткәрелә, әле шул сараға әҙерлек сиктәрендә халыҡтан яҙма тәҡдимдәр ҡабул ителә.

✓ Баш ҡала опекун, патронат һәм тәрбиәгә бала алған ғаиләләр араһындағы конкурстың икенсе этабы башланды. Урындарҙа ойошторолған тәүге турҙа еңеп сыҡҡан 38 ғаилә был юлы баһалама ағзаларына ижади һәм спорт һәләттәрен күрһәтәсәк. Икенсе этап ноябрь уртаһына тиклем бара, унан һуң республика конкурсының һәр номинацияһында ҡатнашыусылар исемлеге төҙөләсәк.

✓ Башҡорт дәүләт педагогия университетының спорт залында ике көн буйы Өфөнөң йәш кикбоксинг оҫталары көс һынашты. 90-лап кеше ҡатнашҡан асыҡ чемпионаттың финалына 18 пар кикбоксер сыҡты.

ОҺО, ЯҠШЫ ХӘБӘР!

# СОЦИАЛЬ КАРТА...

## тиҙ ҙә, уңайлы ла

**Былтыр Башҡортостан халкын тиҙҙән улар тормошона килеп инәсәк автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһына эйә социаль карталар менән файҙаланыуға әҙерләй башлағайнылар. 2009 йыл дауамында Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан бөтә документтар, шулай уҡ ошо проектта ҡаралғанса, министрлыктарҙың эш тәртибен билдәләүсе социаль карта тураһында положение әҙерләнде. БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев тарафынан ҡул ҡуйылған "Башҡортостандың социаль картаһы" проектын эшкә ҡушыу буйынса саралар планы эшләнде.**




Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы буйынса һәр төрлө льготалар төрҙәренә хоҡуҡлы пенсионерҙар, инвалидтар, "кыҙыу нөктәләр"ҙәге хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар бөтәһе 800 меңләп кеше иҫәпләнә. Йыл аҙағына тиклем 150 мең социаль карта таратыласаҡ, ҡалған 650 мең кеше карталарҙы 2010 йылда аласаҡ.

Социаль картаның ете ҡушымтаһы - транспорт, медицина, һалым, пенсия, банк, дисконт һәм социаль төрҙәре эшләй.

**Транспорт ҡушымтаһы.** Ул республика территорияһында йәмәғәт транспортында йөрөгәндә тейешле бөтә льготаларҙы иҫәпкә алырға мөмкинлек бирә. "Башавтотранс" һәм бөтә муниципаль транспорт предприятиелары транспорт терминалдары менән йыһазландырылған, улар социаль карталар менән эшләргә әҙер.

**Медицина ҡушымтаһы.** Был программа буйынса Өфө ҡалаһының өс поликлиникаһы төүге тәжрибәләр туплай. Был ҡушымта поликлиникалар хеҙмәте менән файҙаланыуҙы еңеләйтергә, федераль һәм республика программалары буйынса бушлай бүленеүсе дарыуҙар биреүҙе иҫәпкә алырға булышлыҡ итәсәк. Хәҙер хатта республиканың алыҫ районында да теге йәки был врач һәм айырым белгестәргә алдан яҙылырға, аҙаҡ оҙон-оҙаҡ сират көтмәйенсә тәғәйенләнгән көнөсәғәтенә килергә була. Ауырыу һәм өлкәндәр өсөн был айырыуса мөһим.

Хәҙер медицина хеҙмәтләндереүе эше, уның сифаты тураһында БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ғына түгел, хатта Хөкүмәттә лә хәбәрҙар була алалар.

**Һалым ҡушымтаһы.** Был программа буйынса он-лайн режимында һеҙ күпме сумма-ла һалым түләргә тейешле икәнегеҙҙе алдан белә алаһығыҙ. Хәҙер инде былтыр уҡ һатып ебәргән машинағыҙ өсөн һеҙҙән "елкәлә" һаман булһа ярайһы ғына бурыс суммаһы тағылып тороуын ҡапыл асыҡлап, ҡотоғоҙ алынмаҫ.

**Пенсия ҡушымтаһы.** Был ҡушымтаны файҙаланып, һеҙ мотлаҡ пенсия страховкалау системаһында үҙегеҙҙең шәхси лицевой иҫәбегеҙҙе, идара итеүсе компания һайлау, әсәлек капиталы буйынса түләүҙәр тураһында, берҙәм аҡсалата түләүҙәр хаҡында белә алаһығыҙ. Быйыл Башҡортостан Хөкүмәте менән РФ Пенсия фонды араһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Хәҙер беҙҙең төбәк картаһы бер үк ваҡытта дөйөм Рәсәй картаһы ла булып иҫәпләнә. Илебеҙҙең теләһә ҡайһы төбәгенән дә һәр кем үҙенең пенсия туплаһыуҙары хаҡында хәбәрҙар була ала.

**Банк ҡушымтаһы.** Был ҡушымтаны файҙаланыусылар аҡсаларын банк иҫәбендә һаҡларға, ҡулаҡсаһыҙ иҫәп-хисап башҡарырға, банкоматтарҙан йәки проектта ҡатнашкан банк бүлексәләренән аҡса алырға хоҡуҡлы. Социаль һәм пенсия түләүҙәрҙе лә банк иҫәбенә күсерергә була. Банкта һаҡланған суммаға проценттар иҫәпләнә. Аҡсағыҙ иҫәпкә күсерелгән өсөн генә лә - 4 процент йыллыҡ өҫтәмә, ә инде аҡсаны ашығыс вкладка күсереү тураһында ғариза яҙған осраҡта 14-15 процент иҫәпләнә.

**Дисконт ҡушымтаһы.** Социаль карта эйәһе халыҡты социаль яҡлау программаһында ҡатнашыусы сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәтләндереүе предприятиеларында билдәле бер ташламалар һәм бонустар алырға мөмкин.

**Социаль ҡушымта.** Уның төп мәғәнәһе шунда - ниндәйҙер ведомстволарға бармайынса, мәғлүмәт ресурстары аша үҙегеҙгә ниндәй социаль льготалар тейешлеге, уны алыр өсөн ҡайҙа, кемгә мөрәжәғәт итергә кәрәклеге тураһында мәғлүмәт алыу.

Социаль картаны алыу өсөн ни эшләргә кәрәклеге хаҡында проектта ҡатнашыусы банк хеҙмәткәре Олег Романов беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Социаль карта таратыуҙары хаҡында ишетһәгеҙ бер ҡайҙа ла сығып йөрөргә, ығы-зығы тыуҙырырға кәрәкмәй. Льготаға хоҡуҡы булған һәр кешене урындағы социаль яҡлау органына саҡырасаҡтар: йә телефон аша, йә хат аша. Унда барғанда, үҙең менән шәхесеңде һәм льготаға хоҡуҡыңды раҫлаусы документтарҙы алырға онотмағыҙ. Бындай яңы һәм киң ҡоласлы проекттың тормошҡа ашырыу мәлен һәр төрлө йылғыр һәм алдаҡсы әҙәмдәр бик оҫта файҙалана. Улар: "500 һум бирһәгеҙ, социаль карта ҡулығыҙҙа булыр!" - тип фатирҙар буйлап йөрөүҙәре лә бик ихтимал, ундайҙарға ышанмағыҙ, һис ишек асмағыҙ! Шунда уҡ милицияға йәки урындағы социаль яҡлау органына шылтыратып, хәбәр итегеҙ. Иң яҡшыһы: саҡырыу алғас та, унда хәбәр ителгән көн һәм сәғәттә социаль яҡлау бүлегенә килегеҙ, ғариза яҙығыҙ, унда һеҙҙе шулай уҡ фотоға төшөрөрҙәр. Был процедуралар ни бары 15-20 минут ваҡытты аласаҡ. Аҙаҡ, 20 көндән һуң һеҙгә тағы ла ошонда килеп, әҙер социаль картағыҙҙы алырға ғына кәрәк буласаҡ".

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

**Электрон документ әйләнеше күсемһеҙ милек менән шөғөлләнгәндә эште күпкә ябайлаштырырға булышлыҡ итәсәк. "Башҡортостан Республикаһының социаль картаһы" - пенсия иҫәбенең торошо, алдан табипҡа яҙылыу, социаль льготалар алыу кеүек эштәрҙең электрон аҫкысы ул.**

**БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Федераль теркәү хеҙмәте етәксеһе Сергей Васильев менән яңыраҡ булып үткән осрашыуында билдәләүенсә, "теркәү мәсьәләһе" - әлеге социаль картаның һигеҙенсе ҡушымтаһы була ала. Уның ярҙамында теләгән кеше үҙенә кәрәкле бөтә мәғлүмәтте Теркәү палатаһына барып, сират тормайынса ғына ла, өйөндә интернет аша алыу мөмкинлегенә эйә була. Был, берҙән, ваҡытты әрәм итмәҫкә, икенсенән, реестрҙан күсермәләр алыуҙы тиҙләтергә булышлыҡ итһә, өсөнсөнән, палата бүлексәләрендә ҡайһы саҡ күҙәтелгән коррупция осраҡтарын сикләргә мөмкинлек бирә.**

**Быларҙан тыш, Раил Сарбаев билдәләүенсә, электрон хеҙмәтләндереү индереү халыҡҡа уның исемендәге милекте һәм ер участкаһын финанс инструменты сифатында (кредит алғанда, һатып алыу-һатыу мәлендә залог рәүешендә) файҙаланырға мөмкинлек бирә.**

**Әйткәндәй, Мәскәү ҡунағы был эшлекле осрашыуҙа әлеге реестрҙы булдырыуҙа Башҡортостан тәжрибәһен юғары баһаланы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

### Ағаһынан - алимент

**Бәләкәй ейәнемдең атаһы төрмәлә үлде, әсәһе - минең ҡыҙым - бер ерҙә лә эшләмәй, эсә, уны һәр ваҡыт милиция эҙләтә. Тиҙҙән уны ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итеү мәсьәләһе ҡараласаҡ. Ейәнем йәл, уны үҙем тәрбиәләгем килә, ләкин пенсиям бәләкәй, аҡса етмәй. Өлкән ейән дә бар минең, тик ул ҡайҙалыр Себер яғына сығып киткән, беҙҙең менән аралашмай, туғанын тәрбиәләгәс, мин уның ярҙамына өмөт итә аламмы, закон нимә ти икән?**

- РФ Ғаилә кодексының 93-сө статьяһына ярашлы, граждандар үҙҙәренең бәлиғ булмаған һәм бәлиғ булһа ла, хеҙмәткә яраҡһыҙ бер туған яҡындарын хәстәрләргә бурыслы. Караусыһыҙ ҡалған бала өсөн уның үҙ ата-әсәһенән ярҙамға өмөт итеү мөмкин булмаған хәлдә, бындай баланың ярҙам итерлек хәле булған хеҙмәткә яраҡлы бәлиғ йәштәге туғандарынан (ағаһы, апаһы, ҡустыһы, һеңлеһе) суд тәртибендә алимент юллау хоҡуғы бар.

### Ҡатыны декретта булһа...

**Ирем менән ярты йыл йәшәнек, әле мин декретка йыйынам. Ирем һис көтмәгәндә айырылышырға ниәтен белдерҙе. Ҡатыны риза булмаһа, суд был мәсьәләне нисек хәл итә ала?**

РФ Ғаилә кодексына ярашлы, ир менән ҡатындың береһе вафат булған осраҡта уларҙың никах мөнәсәбәттәре туктатыла. Никах шулай уҡ ир йә ҡатындың ғаризаһы йәки уларҙың береһе суд тарафынан юридик хоҡуҡһыҙ тип танылған хәлдә опекундары биргән ғариза буйынса ғәмәлдән туктатыла. Ошо уҡ Кодекстың 17-се статьяһы буйынса ҡатыны ауырлы булған хәлдә, бала тыуып, йыл үткәнсе, ире, ҡатыны иркенән тыш, айырылышыу тураһында эш ҡуҙғата алмай.

### Кооператив фатир хужаһы

**Ике бүлмәле кооператив фатирымда 1963 йылдан бирле үҙем генә теркәлгәнмен. Үлеп-нитеп китһәм, фатирым граждандар никахында торған иремә (башҡа варисҭарым юҡ) закон буйынса мираҫҡа ҡаламы? Ирем фатирҙа теркәлмәнә лә (никахыбыҙ ҙа ҡағыҙҙа теркәлмәгән) 1998 йылдан бирле минең аҫырауҙа йәшәй.**

- Кооператив фатирығыҙ өсөн тулыһынса иҫәпләшеп бөтөүегеҙ тураһында белешмәгеҙ булһа, һеҙ торлаҡ өсөн аҡсаны түләп бөткән көндән алып ул һеҙҙең милек иҫәпләнә һәм уны хосусилаштырыу мотлаҡ түгел. РФ Граждандар кодексының 142-се статьяһына ярашлы, балалар, ире (йә ҡатыны) һәм ата-әсәләр закон буйынса варисҭар исемлегенә инә. Шуға күрә граждандар никахы менән йәшәгән ирегеҙ варисығыҙ була алмай. Нотариуска барып, рәсми рәүештә васыят яҙһағыҙ, фатир ирегеҙ исеменә ошо васыят буйынса ҡалдырыласаҡ. Васыят булмаған хәлдә фатир дәүләт ҡарамағына күсә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ҡыҙыл шәкәр

Ҡайһы кеше, бигерәк тә бала-саға, сөгөлдөр ашарға яратмай. Шуға күрә, шәкәр сиробы яһарға һәм 1 стакан сей сөгөлдөр һутын ҡушып, 20-30 минут ҡайнатырға. Өлгөргәнлеген белеү өсөн бер ҡалаҡ сиропты һыуытып ҡарарға, ҡатһа, өлгөргән була. Төрлө формаларға ҡойоп ҡатыраһың, сәйгә ҡушып эсәһең, шул көйө ашайһың.

### Һоло һыуы

Хәлһеҙләнгәндә, бөйөр ауыртҡанда, ҡаты сирләгәндә 1 стакан ҡабыҡлы һолоно таҙартырға, йыуырға һәм 4-5 стакан һалҡын һыу ҡойоп, яртылаш ҡалғансы талғын утта һайнатырға, һөҙөргә һәм шул күләмдә һөт өҫтәп, 2-3 минут ҡайнатырға. 3-4 балғалаҡ бал өҫтәгәс, тағы 2-3 минут ҡайнатырға. Көн һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә.

### Һөҙмә - киҙеүгә ҡаршы көс

Ҡорот эшләүгә оҙаҡ ваҡыт кәрәк. Уның урынына һөҙмә эшләргә була. Һөттө ҡайнатып ойотаһың, һыуынғас, әскелтем итеп тоҙ ҡушып болғайһың һәм һарҡытырға тоҡҡа һалаһың. Һыуы һарҡып бөткәс, кәрәгенсә борос, һөҙмәнең күләменә ҡарап, 1-2 баш һарымһаҡты иҙеп, ҡушып баҫаһың. Әҙер һөҙмәне эмаль йә быяла һауыттарға тултырып, һалҡын урынға ҡуяһың. Тымау, киҙеү тойолһа, кискеһен май ҡушып, ҡайнар һыу менән шыйыҡлап, бер стакан итеп эсеп ятаһың. Бик килешә.

### Йүтәлдән кәбеҫтә

Баҡсаларҙа үҫкән кәбеҫтәне йыйып алдыҡ, хәҙер ашарға ла, дауаланырға ла ярай. Йүтәлләгәндә эре итеп туралған кәбеҫтәне эмаль кәстрүлгә тултырып, өҫтөнә ҡайнап торған һыу ҡойоп,ябып, бер аҙ төнәтәһең дә, көнө буйы эсә алғансы эсәһең. Ашҡаҙанға ла шифалы.

### Үпкә сире

10 лимонды ит турағыстан үткәреп, 10 сей йомортҡа, 10 бешкән йомортҡа ҡабығын онтаҡлап ҡушып болғарға һәм 12 көн ҡараңғыла тоторға. 12 көндән һуң бер шешә коньяк ҡойоп болғатырға ла, марля аша һөҙөргә, тағы ике көнгә ҡараңғыға ҡуйырға. Көнөнә өс тапҡыр берәр ҡалаҡ эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Беҙ һәләтле балаларҙы ғына түгел, ғаиләләре тарҡалған, етем ҡалған балаларҙы әле лә ҡабул итәбеҙ һәм үҫтерәбеҙ. Бында килгән мәлдәрендә улар тупаҫ булһа, бер аҙ ваҡыт үткәс, йөҙҙәре асылып, мөләйемләнеп китә.*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЫНДА РӘМИ РУХЫ ЙӘШӘЙ,

## йәки Шағирға иш ҡанат булған интернатҡа - 65 йыл



**Быйыл Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты үҙенең 65 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Гимназия-интернат балаларҙың һәләттәрен үҫтереүгә, республикабыҙ өсөн милли кадрҙар әҙерләүгә тос өлөш индергән иң абруйлы уҡыу йорттарының береһе булып тора. Гимназияның тарихы, бөгөнгө хәле, маҡсаттары тураһындағы әңгәмәбеҙҙә уның директоры ҒАЙСИН Әлфир Сулпан улы менән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ШАҺИЕВА Гөлсирә Фәрит ҡыҙы ҡатнашты.**

● **Республикабыҙҙа иң алдынғы уҡыу йорттарынан һаналған гимназияның барлыҡҡа килеү тарихы тураһында иҫкә төшөрөп үҙайыҡ әле.**

**Гөлсирә ШАҺИЕВА:** 1944 йылда Өфө ҡалаһында атайҙары һуғышта үлеп ҡалған етем балаларҙы тәрбиәләү, республикабыҙға милли кадрҙар әҙерләү маҡсатында мәктәп-интернат асыла. Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа һуңынан гимназия статусын алған интернат тарихының тәүге биттәре яҙыла. Әлбиттә, ул замандарҙан бирле гимназия-интернат төрлө үҙгәрештәр кисерә, һәр осорҙа ла уҡытыу-тәрбиә эшен мәғариф өлкәһендә ҡуйылған иң юғары талаптарға ярашлы алып бара. Шулай ҙа элекке төп маҡсатыбыҙға: райондарҙан, ауылдарҙан килгән уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү, уларға тейешле йүнәлеш биреп, юғары уҡыу йорттарына әҙерләүгә бөгөн дә тоғро ҡалабыҙ. Мәктәп-интернат асылған ваҡытта һалынған традициялар, маҡсаттар, ынтылыштар элеккесә һаҡланып килгәнгә, күсәгилешлек юғалмағанға гимназияның абруйы ла һаҡланалыр ул. Тағы ла быға нимә бик мөһим: беҙҙең уҡыу йортона республика етәкселеге яғынан бер ваҡытта ла иғтибар кәмемәне. Ҙур рәхмәт уларға!

**Әлфир ҒАЙСИН:** Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бындай интернаттар күп милли республикаларҙа барлыҡҡа килгән. Әммә үҙ ваҡытындағы бурысын үтәгәс, улар башҡа республикаларҙа ҡәҙимге мәктәпкә әйләнгән. Милли-мәҙәни асылын әлеге көнгә тиклем һаҡлап ҡала алған бындай уҡыу йорто тик беҙҙең республикала ғына эшләп килә. Был үҙе үк уникаль күренеш. Ошо милли мәктәбебеҙҙең бәхетле һәм яҡты яҙмышлы булыуы уның шул тиклем ҙур, изге теләк менән ойошторолған булыуынан киләлер, күрәһең. Мәктәп-интернат асыу тураһындағы ҡарарҙа: "Аталары Бөйөк Ватан һуғышында үлеп ҡалған ерле халыҡ балалары өсөн", - тип яҙылған. Ҡағыҙҙа етем ҡалған башҡорт балаларын дәүләт ҡурсауына алыу тураһында ғына яҙылһа ла, гимназиябыҙ башҡорт рухын һаҡлап ҡалыу тигән изге ниәт менән асылған һәм шул ниәт бөгөнгә тиклем һаҡланып килә. Тәүге көндәре үк гимназияла мәғрифәт культы булдырыу өсөн барыһы ла эшләнә. Ғөмүмән, гимназиябыҙҙа уҡыуға, аң-белемгә ынтылыш ошо ваҡыттарҙан бирле һүнгәне юҡ, был беҙҙең иң аҫыл традициябыҙ, тип әйтһәк тә була. Беҙ һәләтле балаларҙы ғына түгел, ғаиләләре тарҡалған, мохтажлыҡта йәшәгән, етем ҡалған балаларҙы әле лә ҡабул итәбеҙ һәм үҫтерәбеҙ. Бында килгән мәлдәрендә улар тупаҫ, ҡырыҫыраҡ булһа, бер аҙ ваҡыт үткәс, йөҙҙәре асылып, мөләйемләнеп китә. Ысынлап та, интернат мөхите һәр уҡыусыға ыңғай тәьҫир итә. Беҙҙә уҡыусылар шәхес булараҡ тиҙ үҫешә башлай.

Ветеран уҡытыусылар менән араларҙы өҙмәй, аралашып, кәңәшләшеп торабыҙ. Һәр яңылыҡ онотолоп ҡалған иҫке фекерҙәргә нигеҙләнә, тиҙәр. Бәхтиһәң, гимназия тарихында уҡыусыларҙы хәҙерге заман талап иткәнсә уҡытыу тәжрибәһе лә булған икән. Элегерәк уҡыусыларҙың шәхси һәләттәрен үҫтереү өсөн бик һөҙөмтәле алымдар ҡулланылған, беҙ әле лә өлкән быуын уҡытыусылары тәжрибәһенә таянып эш алып барабыҙ. Мәҫәлән, беҙҙә профилле уҡытыуға күсеү бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Үҫер, камиллашыр өсөн алға ғына ҡарарға кәрәкмәй, артҡа, тарихҡа ла әйләнеп күҙ һалыу мөһим икән. Беҙгә ветерандарыбыҙ бик ҡәҙерле, сөнки улар уҡытыу-тәрбиә өлкәһендә үҙҙәре тере тәжрибә сығанағы булып хеҙмәт итә.

● **Гимназияла Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов белем алған. Гимназия хәҙер уның исемен йөрөтә. Был уҡыу йортонда Рәми рухы бөгөн дә йәшәйме?**

**Гөлсирә ШАҺИЕВА:** Ғөмүмән, беҙҙең интернаттан әҙәбиәтебеҙҙә, сәнғәтебеҙҙә, мәҙәниәтебеҙҙә, техник өлкәлә хеҙмәт иткән, милли рух менән һуғарылған кешеләр күп сыҡҡан. Уларҙың бөтәһен дә һанап бөтөү мөмкин түгел. Ә бөйөк шәхесебеҙ Рәми Ғариповтың исемен телгә алмау ҙур хилафлыҡ булыр ине. Уның да атаһы һуғышта үлеп ҡалған. Етем ҡалған ауыл балаһы, уҡыйым, белем алам, тип, иҫке-моҫҡо кейеп, вагон баштарында Өфө ҡалаһына килеп төшкән. Рәми рухы - ул халҡыбыҙ рухы. Был рух йәшәмәһә, беҙҙең гимназия үҫеүҙән туҡтар ине. Уҡыусыларыбыҙҙың күңеленә Рәми ағайҙың рухын, милли рухыбыҙҙы, асылыбыҙҙы һеңдереү - беҙҙең көндәлек эшебеҙ. Һәр уҡытыусы, һәр тәрбиәсе халҡыбыҙҙа тоғролоҡ, милләтебеҙгә хас матур сифаттарҙы һаҡлап ҡалыу тураһында ҡайғырта. Тырышыуыбыҙ эҙһеҙ ҡалмаҫ, гимназиябыҙҙан артабан да көслө рухлы шәхестәр үҫеп сығыр, тип ышанабыҙ.

● **Башҡортостандың һәр төбәгенән, төрлө ғаиләләрҙән йыйылған балаларҙы бер ҡорға туплауҙа ауырлыҡтар бармы? Үҙегеҙҙең уҡыу йортона ғына хас булған ниндәй йолалар бар?**

**Әлфир ҒАЙСИН:** Төрлө төбәктәрҙән йыйылған, төрлө ғаиләләрҙә үҫкән төрлө холоҡло балалар интернатта бергә туплана, бер ғаилә булып йәшәй башлай. Интернат тормошона күнегеүе уларға ҡыйын түгел. Беҙҙә бер-береңде кәмһетеү юҡ, элек килгәндәр яңы килгәндәргә мыҫҡыл итеп ҡарамай. Интернаттыҡылар бер туған кеүек: быуындар бәйләнеше лә өҙөлмәй, ҡайҙа ғына булмаһын, һәр ваҡыт бер-береһенә терәк-таяныс булып торалар. Яңы килгән уҡыусыларҙың белем сифаты нисек күтәрелә барыуын иғтибарға алабыҙ. Килгән ыңғайы һәр нәмәгә ҡурҡыбыраҡ ҡараған, ҡыйыуһыҙ ғына булған бала бер-ике йылдан һуң шул тиклем сая, дәртле, рухлы булып китә. Беҙ уларҙың һәләттәрен мөмкин тиклем асырға, үҫтерергә, камиллаштырырға тырышабыҙ. Гимназия уҡыусыларында киләсәктә әүҙем йәмғиәт ағзаһына хас булған кеше алдында үҙеңде тота белеү, идара итә белеү кеүек сифаттар үҫешә.

Гимназиябыҙҙың матди базаһы, заманса уҡытыу йыһаздары уҡыусыларыбыҙ өсөн бик күп яңы мөмкинлектәр булдыра, ә интернатта йәшәү шарттарының яҡшырыуы уларға дәүләт иғтибарын даими тойоу, яуаплылыҡ хисен булдыра. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән ҡунаҡтар заманса төҙөлгән яңы бинабыҙға ҡарап, бындай уҡыу бинаһы һәм уҡытыу шарттары башҡа бер ерҙә лә юҡ, тип һоҡланып ҡайталар.

**Гөлсирә ШАҺИЕВА:** Гимназиябыҙҙы "Бәләкәй Башҡортостан" тип йөрөтөүҙәре юҡҡа ғына түгелдер, сөнки төплө белем алыу маҡсаты менән республикабыҙҙың һәр төбәгенән уҡыусылар килә бында. Бөгөнгө көндә гимназияла бөтәһе 682 бала белем ала. Шуларҙың 27-һе Рәсәй төбәктәренән килгән. Уҡытыусылар уҡыусыларҙың һәр береһенең исем-фамилияһын, мөмкинлектәрен, етешһеҙлектәрен белеп тора. Уҡыусылар менән шәхси эш яҡшы ҡуйылған, кәрәк саҡта өҫтәмә дәрестәр уҙғарыла. Беренсе сиректә, әлбиттә, ауырлыҡтар күп була. Күбеһенә башта юғары уҡыу талаптарына күнегеп китеүе ҡыйыныраҡ була.

Ситтән ҡарағанда, гимназия тормошо умарта күсендәге кеүек: һәр мөйөштә, һәр ерҙә эш ҡайнай. Гимназиябыҙҙа әленән- әле төрлө саралар уҙғарылып тора. "Аҡйондоҙ" бейеү ансамбле, "Сулпан" балалар театры, милли көрәш һәм башҡа түңәрәктәр эшләй. Йылына бер нисә тапҡыр фәнни-ғәмәли конференция уҙғарыла. Яҙыусылар, шағирҙар, мәғариф өлкәһе кешеләре менән йыш осрашып торабыҙ.

Барса көс-һәләттәребеҙҙе һалып үҫтергән уҡыусыларыбыҙ гимназияны тамамлап, ҙур тормош юлына сығып киткәс, уларҙы бик һағынып, юҡһынып иҫкә алабыҙ. Улар ҙа беҙҙе онотмай, форсат килеп сығыу менән, йүгереп килеп етә.

● **Ябай мәктәпкә ҡарағанда, интернат балаларын тәрбиәләүҙең үҙ ауырлыҡтары бар. Һеҙҙең уҡытыусылар белем генә түгел, тәрбиә лә бирә. Интернат уҡытыусыһы ниндәй булырға тейеш?**

**Әлфир ҒАЙСИН:** Бер яҡтан, баланың тулыһынса беҙҙең күҙ алдында булыуы уңайлыраҡ та ул. Юғиһә, ҡайһы саҡта ата-әсә менән уҡытыусының фекере тап килмәй, һәм бала кемде тыңларға белмәй икеләнә. Ә бында уҡыусыларҙың тормошо тулыһынса билдәле бер системаға һалынған. Балалар менән даими рәүештә бергә булғас, уҡытыусыларға, тәрбиәселәргә баланың кисерештәрен дә, ҡыуаныстарын да, ҡайғыларын да уртаҡлашырға тура килә. Беҙ улар өсөн тулыһынса яуаплы. Шулай ҙа тәрбиәләнеүселәребеҙҙе тормош проблемаларынан нисек кенә һаҡларға тырышмайыҡ, ғаилә хәлдәре уларға барыбер ҙур йоғонто яһай. Туғандарын һағынып йәшәгәнгә күрә, улар һәр төрлө ауыр һыҙҙе йөрәгенә яҡын ала. Ауыр психологик хәлдә ҡалыусы уҡыусыларға ҡарата айырыуса шәфҡәтле булыу мотлаҡ. Атаәсәләренең даими эсеүен дә, ғаиләләре тарҡалыуын да балалар ауыр кисерә. Быша шундай ғаилә проблемалары килеп сыҡһа, яҡшы уҡып йөрөгән бала ҡапыл һүнә, төшөнкөлөккә бирелә. Шуның өсөн гимназия-интернат уҡытыусыһына һиҙгер һәм бала күңелен яҡшы аңлай алыусы психолог булыу ҙа фарыз.

**Гөлсирә ШАҺИЕВА:** Ҡайһы берәүҙәрҙән шундай фекер ҙә ишеткәнебеҙ бар: "Әлбиттә, һеҙгә һайлап алынған уҡыусылар менән эшләүе еңел, һөҙөмтәләргә лә тиҙерәк өлгәшергә була". Ләкин гимназияла уҡытыуҙың да үҙ ауырлыҡтары бар. Һәләтле балалар менән эшләгәндә күберәк әҙерләнергә, эҙләнергә, үҙеңә лә ҡыҙыҡһыныусанраҡ булырға тура килә. Гимназия уҡытыусыһы беренсе сиратта кешелекле, бала күңелен, фекерен аңлай белгән, тәрән белемле кеше булырға тейеш. Шундай уҡытыусылар уҡыусылар араһында абруй ҡаҙана ла инде.

**Әлфир ҒАЙСИН:** Һәләтле уҡыусыларҙың шул тиклем мәғлүмәтле, хатта киң ҡарашлы, үҙ аллы булыуы һоҡландыра. Дәрестәрҙә улар шундай ҡатмарлы һорау биреп, йә фекер әйтеп ҡуя, быны улар ҡайҙан белә икән, тип аптырабыраҡ ҡуяһың ҡай саҡта. Элекке осорҙоң бөйөк педагогтары әйткәнсә килеп сыға инде: "Баланы үҫтерәм тигән педагог тәрбиәләнеүсеһе менән бергә үҙе лә үҫеш кисерә".

Әлеге ваҡытта беҙҙә 58 уҡытыусы, 34 тәрбиәсе эшләй. Уларҙың күбеһе юғары квалификациялы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы исеменә лайыҡ булыусылар ҙа бар. Коллектив татыу, уҡытыусылар үҙ-ара кәңәшләшеп, бергәләшеп эшләргә ынтыла. Мин гимназиябыҙҙа эшләгән һәр уҡытыусыны ғорурлыҡ менән телгә алып үтер инем. Уларҙың һәр ҡайһыһының уҡытыу-тәрбиә эшенә, гимназиябыҙҙың матур традицияларын дауам итеүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, халҡыбыҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүсе меңәрләгән шәхестәр үҫтереүсе мәктәп булараҡ, үҙенең данлы исеме һәм ҡабатланмаҫ тарихы менән танылыу яулап, хәҙер ҙә милли мәғарифыбыҙҙың алдынғы сафында бара. Рәми рухына тоғро ҡалып, ошо белем һәм милли мәҙәниәт усағы киләсәктә лә беренсе булып ҡалһын ине, тибеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА әңгәмәләште.**

*✓ Быға тиклем дә башҡортта эш ҡоралдары етештереү яҡшы үҫешкән булған. Тимер менән ҡоршаулы арба тәгәрмәстәре, көрәк, кәйлә, бысҡы, балта, сөй, балға һәм башҡа төр кәрәк-яраҡ башҡорттарҙың үҙҙәренеке булған.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

Шул ерҙә, яҙмаларыма ҡеүәт булһын өсөн, 1838-1902 йылдарҙа йәшәгән урыҫ яҙыусыһы Филипп Диомидович Нефедовтың "Башкирская старина" исемле хикәйәһенән алынған һәм тарих фәндәре докторы А. З. Әсфәндийәровтың "Башкирия после вхождения в состав России" китабына индерелгән өҙөктө килтереү урынлы булыр:

"Возникновением и развитием своим горная промышленность России обязана здесь башкирам... Во все это время шла в Башкирии колонизация... В 18 столетии башкиры первые показали русским промышленникам "чудские копи" - места своих старинных рудных разработок, первые всегда отыскивали новые рудники и первые же являлись работниками у русских заводчиков, ордами налетевших с разных сторон на прекрасную Башкирию... И с этих пор началась горнозаводская промышленность".

Алтынтамаҡта төҙөлгән Златоуст заводының үҙәге, ҡеүәт биреүсеһе булып, уның быуаһы тора. Быуа ҡоролмаһын үҙҙәренең аттарында, арбаларында йөҙйәшәр ҡарағастарҙы ҡырҡып, таш балсыкты тейәп, башҡорт эшселәре эшләгән. Йыраҡтан йыуан бүрәнәләрҙе, таш-ҡомдо ташыу өсөн көслө ир, ҡарыулы, көр ат, тимер менән ҡоршалған тәгәрмәсле ныҡ арба, ҡалын ҡайыштан тегелгән ҡолаҡбау, ҡамыт һәм башҡа әпсен-төпсөн булмайынса, билдәле, бер эш тә эшләп булмаған. Ә яҡын-тирәлә бер кисәк тимер алыу өсөн әлегә бер "урыҫ зауыты" ла булмаған бит. Тимәк, быға тиклем дә башҡортта эш ҡоралдары етештереү ярайһы уҡ яҡшы үҫешкән булған. Тимер менән ҡоршаулы арба тәгәрмәстәре, көрәк, кәйлә, бысҡы, балта, сөй, балға, күн-ҡайыш эшкәртеү һәм башҡа төр кәрәк-яраҡ башҡорттарҙың үҙҙәренеке булған. Әлбиттә, йөҙәрләгән ылауҙы эш ҡоралы менән тәьмин итер өсөн Мәскәү янындағы Уржумканан килгән крепостнойҙар эш ҡоралдары алып килә алмаған.

Әй менән Таҫма йылғаһына арҡыры ҡоролған быуа оҙонлоғо нигеҙендә 98 ҡуҡай, өҫкө яғы - 125 һәм киңлеге нигеҙҙә - 18, өҫкө яғы - 15 һәм бейеклеге 4 ҡуҡай була. Былдай ҡеүәтле төҙөлөштө Уралда әле берәүҙең дә күргәне булмай. Быны башҡорт эшләй. Килгән крепостнойҙар нигеҙҙә тик еңел эштә ҡулланыла. Ташҡындарҙа һыу ағыҙыр өсөн улаҡтар ҙа яһала. Быуаның түңәрәкләп оҙонлоғо - биш саҡырым, ә киңлеге саҡрым ярымға етә. Заводтың киләсәген етәксеһе П. П. Аносов тирә-яҡтағы тәбиғәт тураһында былай яҙа: "Урал в грозном величии. Природа в сих местах дика и угрюма. Величественные леса мало еще истребленные, прозрачные струи вод, с шумом бегущие по своим крутокаменистым руслам; уединенно лежащие озера; раскинутые юрты полуоседлых башкиров; их невозделанные поля и, наконец, дикие, перпендикулярно вздымающиеся сопки Юрмы, Таганая, Урала, Иселя, Яман-Тюбе, то совершенно голые, то покрытые лесом, дают истинное понятие о характере и красотах здешней природы".

**"Златоуст ҡалаһында металлург Аносовҡа һәйкәл ҡуйылған. Ысынында, был урында ҡорос иретеүсе һәм тимерсе Булат исемле башҡортҡа һәйкәл ҡуйылырға тейеш ине. Булат ҡоросон уйлап тапҡан кеше - ул бит! Ысын булат ҡоросо серен Булат үҙе менән теге донъяға алып китте. Уның сере берәй ваҡыт асылырмы, белеүе ҡыйын. Был - тарихи факт", - шулай тип һөйләне миңә боронғо ҡыпсаҡ нәҫелле Иван Кочубей.**

1766 йылда Златоуст заводы 8972 бот (143 тонна 552 килограмм) тимер, 1955 бот (31 тонна 280 килограмм) баҡыр бирә. Салауатҡа ул саҡта ун дүрт йәш була, әгәр уны 1752 йылғы тип иҫәпләһәк.

Максим Мосолов 1768 йылда үлгәс, улы Василий Златоуст заводын 85 мең һумға Тула кузнецы Ларион Иван улы Лугининға һата. 1773 йылдың көҙөнән Исәт провинцияһында Е. Пугачев ихтилалы башлана. Ул Златоуст заводына ла килә, унда халыҡтың завод хужаһына ҡаршы күтәрелеүе көтөлә. Пугачев полковнигы Иван Грязнов, Златоусҡа килеп, Пугачевтың саҡырыуын уҡый. "...Компанейщики (заводчики) завели премножество заводов и так народ работою утрудили, что и в ссылках того никогда не бывало, да и нет", - тиелә унда. Башҡорттар мәғдән сыҡҡан, күмер һүндергән ерҙәрҙе ҡыйрата.

Яйыҡ башындағы мәғдән рудниктары ла Златоуст заводына мәғдән биргән. Тарихсы А. И. Андрущенко үҙенең "Крестьянская война 1773-1775 гг." ("Наука", 1969) тигән китабында былай тип яҙа: "С осени 1773 года Златоустовский, Саткинские заводы начали испытывать влияние крестьянской войны. Неоднократные набеги башкир на рудники и угольные курени были первыми вестниками расширяющегося народного восстания. Так, в декабре 1773 года бунтующие башкирцы во многолюдстве ... забрали из медных рудников Кинзекеевского, Кирябинского и Шартымского всякие инструменты и припасы, а горного смотрителя Долбежина и штейгера Шершнева изрубили".

Өстамаҡ (Троицк), Күңгәрәү янындағы һуғыштарҙан һуң Пугачев май аҙаҡтарында Златоуст ҡалаһына керә. Волга, Кама ягына китер алдынан ул заводты емертергә ҡуша.

Барлыҡ ҡорамалдар яндырыла. Завод хужаһы Лугинин күптәнән инде Тула яғына ҡасҡан була. Ихтилал баҫтырылғас, Лугинин заводты янынан тергеҙер өсөн ҡаҙнанан 102 мең һум аҡса ала. Ул ваҡыт өсөн ҙур аҡса була был. Ларион Лугинин 1772 йылда был ваҡыттарҙа ул ерҙәргә хужа булған Ҡара Табын ырыуының Шәйем ейәндәренән тархан Таймас Шаимовтың бармағын һары ҡағыҙға баҫтырып, хәҙерге Мейәс ҡалаһының ерен килешеү буйынса һатып ала.

Ул Берг-коллегиянан баҡыр иретеү заводы төҙөү өсөн рөхсәт һәм аҡса һорай. Берг-коллегия уға ошо туралағы указды 1773 йылдың 7 ноябрендә яҙа. Һуғыш, ихтилал башланып китеү сәбәпле, Мейәс баҡыр иретеү заводы төҙөлмәй ҡала. Уны төҙөү эше һуғыштан һуң, Ларион Лугинин Тулаға ҡасҡан еренән кире килгәс кенә башлана. Мейәс ҡалаһына керер алдынан ҡуйылған стелалағы "Мейәс ҡалаһына 1773 йылда нигеҙ һалынған" тигән яҙыу дөрөҫлөккә тап килмәй.

Завод төҙөү, уны ҡеүәт менән тәьмин итеү өсөн быуа кәрәк була. Мейәс быуаһы 1776 йылда урындағы Барын-Табын, Ҡара Табын кешеләренең көсө менән төҙөлә башлай. Эшсе көсө етмәгәс, Лугинин һәр төрлө ҡасаҡтарҙы, башҡиҫәрҙәрҙе, икенсе заводтарҙан ҡасҡандарҙы йәшереп, үҙенә эшкә ҡуша. Лугининдың йәшерен кешеләре араһында һәр ауылда темеҫкенеп, ихтилалда ҡатнашҡан кешеләрҙе эҙләп йөрөгән йәлләдтәрҙән ҡасып, икенсе исем-шәриф менән йөрөүсе башҡорттар бихисап була. Крәҫтиән һуғышы бөтөрбөтмәҫтән, 1775 йылдың көҙөндә Лугинин Ҡыуаҡан ырыуының барындарҙан ваҡытлыса һорап алған Күңгәрәү йорто ерҙәрен талап ала. Бының өсөн ялған "Купчая крепость" яҙыла. Ҡыуаҡандарҙың бер нисә ултырағы, ә ул саҡта хәҙерге ваҡыт төшөнсәһе буйынса, бер нисә ауылды тәшкил иткән шул ерҙәр еп-еңел генә Лугининға күсә. Ҡыуаҡандар табын конфедерацияһына ингәндән һуң ҡара табындар, барын-табындар һәм әйләләр менән сиктәш йәшәй. Ерҙәренең тау-урман араһында булыуы, тоҙ етешмәүе, Урал тауҙары араһында арпа, тары сәсеп булмауы уларҙы ялан яҡҡа сығырға мәжбүр итә. Ә иң мөһиме: әле 1773 йылға тиклем үк башҡорт ихтилалдарында әүҙем ҡатнашҡан ҡыуаҡандарҙың Өрәңгә, Ялауҙы, Ҡараташ, Аҡтау, Нөргөш, Еләкле, Ирәмәл армыттары арьяғындағы һәм Әй йылғаһы буйындағы ауылдары урыҫ карателдәре тарафынан тулыһынса яндырыла. Ямаҙы, Ялауҙы, Үргә Әй, Түбәнге Әй, Аҡташ (хәҙер - Веселовка), Этләң, Берәҙәк, Нөргөш, Төләк һәм башҡа бик күп ауылдары юҡ ителә, халҡы һөрөлә. Быны шул замандарҙан ҡыуаҡандарҙың Ҡуңғырат йорто, Ҡуңғырат ырыуы Барын туғандарының еренә, Бикәләр түпһәле менән Сәскәлә тауы һыртының көнсығышына, Өйәл (Увелка) йылғаһының башына ултырған була. Хәҙер ул ауыл Башҡортостандың сигендә, Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл районында урыҫ ауылы Кундравы тип атала. "Бунтовщичьи земли" тип аталған ерҙәрҙе талап алыу осоро ҡыҙыу дауам итә.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

(Дауамы бар).

*ӘЙТӘГҮР!*

**Ғаиләлә лә, мәктәбебеҙҙә лә ололарҙы ололағыҙ, кеселәрҙе кеселәгеҙ, тип, бик яҡшы тәрбиә биреп үҫтерҙеләр. Урамда бөтәһенә лә һаулыҡ һорашыу, ололарҙың ауыр сумкаларын күтәрергә ярҙам итеү, уларға урын биреү кеүек ҡағиҙәләрҙе белеп кенә түгел, ә үтәп тә үҫтек. Һуңғы ваҡытта ҡала транспортында йөрөгән ваҡытта шуға иғтибар иттем: баҡтиһәң, күп йәштәр ололарға урын бирергә ашыҡмай. Йәп-йәш егеттәр рәхәтләнеп ултыра, эргәһендә автобус сайҡалғанда ҡолап китмәҫ өсөн сат йәбешеп ҡарт әбей, йә тығылышта төкөп ҡуйыуҙарынан ҡурҡҡан йөклө ҡатын баҫып тора. Ә йәштәр уларға әйләнеп тә ҡарамай: ҡолаҡта "наушник", донъя түңәрәк... Шуға оҡшаш хәлдәрҙе күҙәткәндән һуң, үҙебеҙ аралашып йөрөгән башҡорт йәштәренән: "Ололарға урын бирәһегеҙме? Урын бирмәгән йәштәргә нисек ҡарайһығыҙ?" тигән һорауҙарға яуап алырға булдым.**

# ОЛОЛАРҘЫ ОЛОЛА...

## кеселәрҙе кеселә

**Гөлфиә ЮЛАМАНОВА:** Ҡала эсендә йәмәғәт транспортында йөрөгән саҡта ололарға урын бирмәй ҡалғаным юҡ. Беҙҙе был тәртипкә атайым өйрәтте: "Бөгөн һин оло кешеләргә урын бирмәһәң, ҡартайған көнөңдә атайың менән әсәйеңә кем урын бирер", - тиер ине ул. Атайым менән автобусҡа йөрөргә тура килгәндә, ул үҙе гел генә оло йәштәгеләргә урын бирә торғайны. Шуға күрә лә минең дә күңелемдә ололарға ихтирам уйылып ҡалған. Ололарға ихтирам иң беренсе ғаиләлә тәрбиәләнә, бала ата-әсәгә ҡарап, донъяға беренсе аҙымын яһай. Ҡайһы бер осраҡтарҙа йәштәргә: "Ололарға урын бирегеҙ", - тип әйтергә тура килгәне бар. Ошоға тиклем минең үтенесте берәү ҙә кире ҡаҡҡаны юҡ, һис тә ҡарышмайҙар, тынлайҙар, тороп урын бирәләр, шуға ҡыуанам. Былары ауыл йәштәренә ҡағыла. Ә бына ҡаланыҡылар был ҡағиҙәне үтәргә ашығып бармай...

**Әлфиә ХАЗИЕВА:** Йәмәғәт транспортында йөрөгән ваҡытымда эргәмдә оло кеше торһа, бер ваҡытта ла ултырмайым. Бик ныҡ арыған булһам да, тороп баҫам. Бер саҡ автобуста ҡайтып барғанда, салонға балалы ҡатын килеп инде. Балаһын күтәреп, эй, баҫып тора, эй, баҫып тора, берәһе лә урын биреү тураһында уйлап та ҡарамай. Бара торғас, тамам арыны был, пассажирҙарға ҡарап: "Урын бирегеҙ әле, зинһар өсөн, арыным", - тине. Шул тиклем иҫем китте шунда: йәп-йәш егеттәр, ҡыҙҙар ҡымшанманылар ҙа хатта. Бер әбей шул ҡатынға тороп урын бирҙе. Йәштәр өсөн үҙем оялдым...

**Рәмил МОРАТОВ:** Эргәлә оло кеше баҫып торһа, әлбиттә, тороп урын бирергә кәрәк. Урын бирмәгән йәштәргә кире ҡараштамын. Миңә уҡыу йортона барғансы, дөрөҫөн әйткәндә, бөтөн Өфө ҡалаһын үтергә кәрәк, сөнки һуңғы туҡталышта йәшәйем, ә уҡыу йорто ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан. Халыҡ күп, бигерәк тә иртәнсәк, тығылыш, тынсыу, етмәһә, йоҡо килә. Сәғәт ярым алдан сығып китмәһәң, өлгөрөп тә булмай. Бер ваҡыт дуҫым менән "Нефаз" автобусына ултырғайныҡ, был иң алға йүгерә. Мин: "Ниңә улай иң алға ултырҙайың?" - тип һорайым. "Бында, ғәҙәттә, ололар булмай, тороп урын бирергә лә кәрәкмәй", - ти. Хәҙер мин дә шулай итәм. Ысынлап та, ололар был автобустарҙа, ғәҙәттә, уртала урын ала икән. Хәҙер рәхәткә сыҡтым: үҙемдең туҡталыштан университетҡа барып еткәнсе ултырып барам. Төпкө яҡтағы ултырғыста ултырһаң, бигерәк яҡшы. Ара алыҫ булғас, барып еткәнсе йоҡлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙа борон-борондан ололарға хөрмәт, ихтирам тәрбиәләгәндәр. Ә ни өсөн ҡайһы саҡ йәштәребеҙ был ҡағиҙәләрҙе онотоп ҡуя һуң? Кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата йылы мөнәсәбәттәре, иғтибар юғалыуымы, ғәмһеҙлеккә бирелеүме был? Һәр хәлдә, йәштәргә ололарға ҡарата һәр саҡ иғтибарлы булығыҙ, тип өндәшер инем. Беҙ ҙә гел йәш булып ҡалмайбыҙ бит...**

**Нәзирә АБДУЛЛИНА.**

✓ **"Юлығыҙҙа ҡарағас осраһа, уны тотоп булһа ла китегеҙ. Ул бит мәңгелек йәш ағас, күңелегеҙ үҫер. Ҡарағастың һағыҙын сәйнәгеҙ, тешегеҙ ныҡ булыр. Бер ваҡытта ла тешегеҙ һыҙламаҫ", - тип әйтеп өйрәтә торғайны.**



# "БЕҘҘЕҢ ЗЕКЕР, фашистарҙы еңергә ярҙам итте",

**Гөлнур Лоҡманованың Ғабдулла ишан Сәиди - Ғабдулла бин Сәйет әл-Болғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари (Муллаҡай) тураһындағы китабында уның оло ҡатынынан тыуған кесе улы һәм ейәнсәре хаҡында ла мәғлүмәт бар. Мөхәмәтәнүәр Ғабдулла улы атаһының атаҡлы мәҙрәсәһендә белем ала, Ҡөрьән-Хафиз дәрәжәһенә өлгәшә. Кулактарҙы ситкә һөрөү гәрәсәтенә лә эләгә, золом ҡорбаны ла була ул. Һуғыштан һуң тыуған ауылына ҡайтып йәшәп, 1988 йылда 102 йәшендә донъя ҡуя. Ҡыҙы Зәйтүнәнән биш ҡыҙ тыуа. Исемдәре: Мәзүнә, Дилара, Хәмдиә, Гөлназ һәм Гөлсирә. Икенсе ҡыҙҙары Рафиҡова Дилара Мөхитдин ҡыҙы Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу техникумын тамамлаған, хәҙерге көндә Сибай ҡалаһы "Йәштәр үҙәге"ндә "Яугүл" ҡумыҙсылар ансамбле етәксеһе. Унан Ғабдулла ишан Сәиди һәм уның улы Мөхәммәтәнүәр олаталары хаҡында һөйләүен һораныҡ. Шатланып риза булды.**

## Ғабдулла ишан олатайыбыҙ

Мөхәммәтәнүәр олатайыбыҙҙың ҡатыны Фатима өләсәйҙән ун дүрт балаһы булып, әсәйем менән Ғәйшә инәйебеҙ генә иҫән ҡалған. Әсәйебеҙ Зәйтүнәнән беҙ биш ҡыҙ тыуғанбыҙ. Бер ир туғаныбыҙ үлеп ҡалған. Олатай, өләсәй менән йәшәгән мәлебеҙ тормошобоҙҙоң иң бәхетле саҡтары булғандыр. Улар шул тиклем илаһи заттар ине, беҙ шул мөхиттә дингә ғашиҡ булып үҫтек. Ураҙа айҙарын байрам көткәндәй көтөп ала торғайныҡ. Олатайым менән өләсәйем беҙҙе тәртипкә өйрәтте, башҡорт теленә һөйөү уятты. "Әгәр һеҙ башҡорт телен ныҡлап белһәгеҙ, ғәрәп телен дә еңел үҙләштерерһегеҙ, был ике телдең бик күп уртаҡ өндәре бар", тип өйрәтә торғайны олатайыбыҙ. Уның яҫтығының аҫтында һәр ваҡыт Әхмәтзәки Вәлидиҙең фотоһы һәм китабы ята торғайны. Беҙ уға: "Олатай, ниңә ул халыҡ дошманының фотоһы менән китабын һаҡлайһың?"- тигән һорауыбыҙға ул: "Юҡ, балалар, һеҙ дөрөҫ уйламайһығыҙ. Һеҙҙе дөрөҫ уҡытмайҙар. Көнө бөгөн түгел, килер бер көн, ул халыҡ күнелендә киренән күтәрелеп сығасаҡ. Мин ул көндә булмам, һеҙ ул көндә күрерһегеҙ. Ул шундай шәп кеше булды. Әгәр ҙә уның хыялдары тормошҡа ашһа, Башҡорт иле айырым дәүләт булып, гөрләп йәшәп ятҡан булыр инек...", - тип күҙҙәренән йәштәр сығарып һөйләр ине. Атаһы Ғабдулла хәҙрәт Сәиди хаҡында ла һөйләй торғайны. Олатайыбыҙ уға күсер булып йөрөгән. "Атайым күп һөйләшмәне, ҡайҙалыр барыр булһа, "Әйҙә", тип ҡулын ғына һелтәй торғайны",- ти ине. Улар ат менән ташып ятҡан йылғаны ла ат тубығынан ғына кистереп сыға алған, "һә", тигәнсе барыр ерҙәренә етә алған. Бының өсөн хәҙрәттең "Ләбәйкә" тигән һүҙе генә еткән. Ғабдулла ишан олатайыбыҙ ун дүрт телдә уҡый-яҙа алған, улар араһында фарсы телен ныҡлап белеүе менән башҡаларҙан айырылып торған. Урыҫтар килһә лә, улар менән иркенләп һөйләшкән, ниндәй халыҡ вәкиле килһә лә, шуның телен белгән. Килгән кешенең ниндәй уй менән килерен дә белә алған ул. Үҙе бер ваҡытта ла кешегә асыуланып йөрөмәгән.

Ғабдулла хәҙрәт олатайҙың Муллаҡайҙағы мәҙрәсәһендә Манһырҙан Мөжәүир, Таулыҡайҙан Хәлил, Күгәрсен яғынан Шәмиғол хәҙрәттәр бергә уҡыған. Мөжәүир хәҙрәте олатайыбыҙ күп һөйләшмәүе менән Ғабдулла олатайға оҡшатыр ине. Ғабдулла олатай бер мәл шәкерттәренә: "Беҙҙең менән бергә ен-шайтандар ҙа уҡый, уларҙы күргәнегеҙ бармы? Күргегеҙ килһә, ашаған итегеҙҙең һөйәген ташламағыҙ, ҡором менән буяғыҙ ҙа, төнгөләккә биҙәргә һалып ҡуйығыҙ. Иртәнсәк кемдең бите ҡоромға буялһа, ана шул ен булыр", - тип әйтте ти. Иртәнсәк торһаҡ, өс-дүрт шәкерттең ауыҙ-мороно ҡоромға буялғайны, ти. Ғабдулла олатай биттәре ҡоромға ни өсөн буялғанын уларҙың үҙҙәренә әйтмәскә ҡушҡан. Бер сер тотмаҫ шәкерт был хаҡта тегеләргә әйткәс, ул шәкерттәр бер туктауһыҙ илай-илай, үҙҙәренән-үҙҙәре ҡайҙалыр юҡҡа сыҡҡан. Бер мәл Ғабдулла ишан олатай: "Һеҙ енде лә күргәнегеҙ юҡтыр әле, бына мин һеҙгә уны күрһәтәм", - тип, үҙенең елкәһенән алып күрһәткән. Ҡыҫҡаһы, Ғабдулла олатай беҙ күрмәгән параллель донъя заттары менән аралашып йәшәгән. Беҙ бала саҡта бындай хәлдәргә ышанмай, уларҙы әкиәт итеп кенә ҡабул итә торғайныҡ.

Ғабдулла олатайҙың өс ҡатыны булған. Береһе шул тиклем тәрән белемле, икенсеһе аш-һыуға оҫта, өсөнсөһө оҫта тегенсе булған. Беҙҙә сигелгән күлдәге һаҡлана. Олатайҙың өс әбейе бер-береһе менән бик татыу йәшәгән.



***Бер мәл урам һепереп йөрөй инек, олатайыбыҙ: "Балалар, урамды тиҙ генә һепереп бөтөгөҙ, хәҙер күҙе һуҡырайған бер ир затын алып киләләр", - ти. Ысынлап та, ике ир бер ирҙе ҡултыҡлап алып киләләр. Олатайыбыҙ уны ике сәғәттән ашыу өшкөрҙө. Беҙ тышта көтөп торҙоҡ. Бер мәл теге ир килеп сыҡты ла: "Был яҡты донъяны ла күрер көнөм бар икән", - тип, олатайыбыҙҙы ҡосаҡлап иларға тотондо. Олатайыбыҙ уға тыныс ҡына итеп: "Бүтәнсә әңерҙә эш эшләп йөрөмә, күҙеңде ен бәйләгән", - тине. Ысынлап та, ҡыҙыл әңер ен-шайтандарҙың иң ҡыҙған ваҡыты икән. Ул саҡта тышта йөрөргә ярамағанлығын, ниндәйҙер кисектергеһеҙ эш башҡарырға тура килһә, "Бисмилла", тип әйтергә кәрәклеген олатайыбыҙҙан белдек.***

Ғабдулла ишан олатайыбыҙ мәҙрәсәһендә Рәмиевтар ҙа уҡыған. Олатайыбыҙ атаһының Рәмиевтарға нисек итеп ер өҫтөндәге үләндәргә ҡарап, алтын ятҡылығын табыу юлын өйрәтеүе тураһында һөйләй торғайны. Олатайыбыҙ Шәйехзада Бабичты ла күргән. Ғабдулла хәҙрәт олатайыбыҙ шағир менән бик яҡындан аралашҡан. "Бабичтың ҡолаҡтары ҡарпыш, һәр бармағында балдаҡ була торғайны. Шиғыр һөйләгән сағында Бабич хисләнеп китеп, ҡул бармаҡтарын шартлатыр ине. Ныҡ дәртле кеше булды. Мандолинаһын алып уйнап ебәрер ҙә, үҙе ҡушылып йырлар ине", тиер ине.

Муллаҡайға Ғабдулла олатай янына килеп йөрөгән Аҡмулланы ла күреү бәхетенә ирешкән олатай. Аҡмулла Ғабдулла олатайыбыҙға "еҙнәй", тип өндәшкән. "Аҡмулла беҙгә йыш килә торғайны. Һарыраҡ түнәрәк йөҙлә ине ул. Килһә, шиғырҙарын һөйләр ине. Үҙе шаян булды, килеп тороп балаларҙы яратыр ине. Самауыр, арба, ҡамытыңғырсаҡ йүнәтергә лә оҫта булған", тип һөйләр ине олатайыбыҙ Аҡмулла менән Ғабдулла Сәйдиҙең аралашыуы хаҡында иҫләп. Зәйнулла ишан Рәсүлев менән дә бик тығыҙ аралашып йәшәгән Ғабдулла Сәйди. Муллаҡайҙан өйлә намаҙында юлға сыҡһалар, Троицкиға икенде намаҙына барып етер булғандар. Хикмәт менән барып еткәндәрҙер, тип уйлайым.

Мәҙрәсәһен Ғабдулла ишан тулыһынса үҙе тәьмин иткән. Өйөр-өйөр йылҡылары йөрөгән. Шәкерттәренә лә аш-һыуҙы ҙур-ҙур ҡаҙандарҙа үҙе бешерткән. Улар бер ваҡытта ла иттән, картуфтан өҙөлмәгән, ашарға ризыҡ күп булған. Ғабдулла олатай һәр бер шәкертен танып белгән һәм һәр береһе менән айырым шөғөлләнгән, уларҙың һәр ҡайһыһына айырым эш ҡушҡан. Дини һабаҡ ҡына биреп ҡалмаған ул шәкерттәренә, һөнәрселеккә лә өйрәткән. Мөхәммәтәнүәр олатайым һөйләүенсә, улар ат санаһын тимер сөйһөҙ һәм йөйһөҙ тик ағас менән генә яһаған. Нисек итеп сөйһөҙ өй һалырға ла өйрәткән ул шәкерттәренә. Балсыҡтан төрлө төҫтәге буяу яһау серҙәренә лә төшөндөргән. Буяуҙар йәйҙең эҫе көндәрендә лә уңмаған. Ырымбур ҡалаһындағы атаҡлы Каруанһарайҙы биҙәгәндә лә Ғабдулла ишан олатайыбыҙ эшләгән буяуҙар файҙаланылғаны билдәле булды һуңынан.

Мәҙрәсәлә рус теле лә, башҡа донъяуи фәндәр ҙә уҡытылған. География фәнендә, мәсәлән, тәбиғәт менән һөйләшеү, серләшеү серҙәренә төшөндөргән. Тәбиғәткә сыҡҡанда ниндәй доғалар уҡырға икәнлеген дә өйрәткән Ғабдулла олатай. Физика фәнендә дәүмәлдәр менән эш итеү серҙәренә төшөндөргән. Мәҙрәсәлә уҡытҡан китаптарҙың ҡайһы бер остоҡтары миндә һаҡлана, унда төрлө һүрәттәр буяуҙары менән төшөрөлгән. Шәхес культы башланғас, Мөхәммәтәнүәр олатайыбыҙ китаптарҙың күбеһен өй башындағы тупраҡ араһына күмгән булһа ла, барыбер килеп, эҙләп табып яндырғандар.

## Улы Мөхәммәтәнүәр олатайыбыҙ

Мөхәммәтәнүәр олатай бик оҫта ҡурайсы булды, башҡорт халыҡ йырҙарын үҙәккә үткәреп йырлар ине. Ҡулдан эшләнгән ҡыл ҡумыҙы ла булды уның. Ауылыбыҙға әртистәр килһә, унан халыҡ йырҙарының тарихын, башҡарылыш манераһын өйрәнә торғайнылар. Әртистәрҙең үҙҙәрен дә йырлата торғайны олатай, уларҙың хатаһын төҙәтеп, үҙе лә йырлап күрһәтер булды. Олатайыбыҙ мөнәжәттәрҙе күп белде. Шуларҙы яттан һамаҡлай торғайны. Кискеһен беҙ йоҡларға яткас, ҡулына Ҡөрьәнде ала ла, лампа яҡтыһында таңға тиклем уҡыр ине. Үҙе әйтеүенсә, бер төндә Ҡөрьәнде бер тапҡыр уҡып сыға алған ул. Уның күҙҙәрен елпелдәтеп юлдан-юлға тиҙ генә йүгерткәнен, бәләкәй генә һаҡалының елпенеп тороуын юрғандың ситен ҡайырып ҡына күҙәтә инек. Ҡайһы саҡ таңғы дүрттә уянып китеп ҡараһаҡ, ул һаман ултырыр, ә инде иртәнсәк тороп тышҡа сығыуыбыҙға ул китапты уҡып бөтөп, урмандан бер йөк утын йә бесән тейәп алып ҡайтырға ла өлгөрөр ине. Шунан һуң беҙҙең менән бергә ултырып, тамаҡ ялғай ҙа, беҙҙе лә урманға алып китә торғайны. Шулай бер мәл ул беҙҙе бесәнгә алып барҙы. "Уй, олатай, бында бесән күп сабылған, нисек итеп уны йыйыбыҙ инде?"- тинем мин уға. Ул миңә: "Ярар, балам, һин ана еләк ашай тор, мин хәҙер намаҙ уҡып алам да", - ти. Ул намаҙ уҡып ҡына бөткәйне, урман араһынан өс ир кеше килеп сыҡты. Ярты сәғәт тә үтмәгәндер, тегеләр беҙгә бесәнде йыйып, тейәшеп бирҙе.

Олатайыбыҙ бик теремек ине, кәртәһе тулы мал булды. Ул саҡта ауыл тирәһендә иген күп сәселде. Төндә һыйырҙарҙы асып сығарһаҡ, таң атыуға улар ашап туйып, ҡапҡа алдына килеп ята торғайны. "Ошо Әнүәр апаның малдарының да бер хикмәте бар. Малдары игенгә төшмәй", - тип аптырай торғайны объездчик Азамат.

Олатайыбыҙ Магнит ҡалаһында төрмәлә ултыра. Төрмә хужаһының ҡыҙын быума сиренән дауалай, тағы ла бер нисә кешене һауыҡтыра һәм шул арҡала ҡотолоп ҡайта. Һуңынан төрмә хужаһы олатайыбыҙға "ызнакум" булып килеп йөрөй. Бер килгәнендә ул үҙенә олатайыбыҙҙан мосолманса исем дә ҡуштырған.

## Хикмәттәре

Яңы йорт һалырға кейәүе Ибраһим еҙнәйҙе саҡырғайны олатайыбыҙ. Еҙнәбеҙ башҡаларҙың да килеп етеүен көтәйек, тиеүенә, олатайыбыҙ: "Һинең бер үҙеңдең дә көсөң етә ул", - тип, уға эште башлай торорға ҡушты. Ғәжәп булды шул саҡ, еҙнәбеҙ бер үҙе өйҙөң нигеҙ бүрәнәләрен еңел генә күтәреп һала ла башланы. Олатайыбыҙҙың хикмәте ине был. Ғөмүмән, Ибраһим еҙнәбеҙ олатайыбыҙ менән сәфәргә лә күп йөрөй торғайны. Бер мәл сәфәр йөрөгәндәрендә еҙнәбеҙ үҙенең эшенә ике-өс көнгә һуңлағас: "Ҡайным, мин эшемдә булмаһам, мине әрләрҙәр, эшемдән ҡыуырҙар инде", - тигәс, олатайыбыҙ: "Юҡ, һине, киреһенсә, маҡтарҙар, Маҡтау грамотаһы бирерҙәр, тағы ла ике көн ял бирерҙәр", - тип тынысландырҙы. Шулай килеп сыҡты ла.

"Беҙ күргәнде һеҙ күрмәгеҙ инде, балалар. Дин бөттө, тиһәләр ҙә, кире ҡайтасаҡ. Ә бына коммунистар, комсомолдар, пионерҙар бөтәсәк. Сөнки улар Аллаһы Тәғәләне инҡар итә", - ти торғайны олатайыбыҙ. Беҙҙең ул саҡта комсомолда янып эшләп йөрөгән мәлебеҙ ине. 1987 йылда Өфөлә комсомолдың Өлкә комитетында үткән конференцияға мин делегат булып килгәйнем. Олатайым шул саҡта: "Был һеҙҙең иң һуңғы комсомол конференцияғыҙ булыр. Шунда барып ҡайтаһың да, комсомол бөтәсәк", - тине. Шулай булды ла.

✓ **_"Ҡолһуалла" - Ҡөрьәндең атаһы, уны бер ултырғанда мең тапҡыр, һис юғы, көнөнә бер тапҡыр әйтегеҙ, "Фатиха" сүрәһе - Ҡөрьәндең әсәһе, уны уҡығас та Аллаһы Тәғәлә үҙенең фатихаһын бирә", тип әйтә торғайны олатайыбыҙ._**

# НАМАҘҘАР...

## ти ине олатай

Олатайға дауаланырға ҡырҙан кешеләр күп килә торғайны. Бер мәл ул миңә: "Ҡыҙым, миңә әле алыҫтан кешеләр килә ята, һин һыйырҙарыңды көтөүгә ҡыумаҫ борон, самауырыңды ҡуйып сыҡ", - тип йомош ҡушты. Мин олатай шаярталыр, тип уйлап, самауыр ҡуймайынса ғына һыйырҙарҙы көтөүгә ҡыуып киттем. Ҡайтыуыма, олатай үҙе сәй ҡуйып йөрөй ине. "Мин бит һине алдамайым, ҡыҙым, улар бит алыҫ юлдан асығып килә", - тиеүе булды, ысынлап та, ҡапҡанан ике ҡатындың инеп килгәне күренде. Улар Саҡмағош районы кешеләре булып сыҡты. Улар "Өфө-Сибай" поезы менән Сибайға килеп төшөп, шундағы кешеләрҙән Мөхәммәтәнүәр олатайҙың ҡайҙа йәшәүе хаҡында һорашҡан. Шунда кемдер: "Ундай кеше күптән үлеп ҡалды", - тигән хәбәр һалғас, улар кәйефтәре төшөп, кире ҡайтырға йыйынып, вокзалда йоҡлаған. Шунда береһе төш күргән. Төшөнә Мөхәммәтәнүәр олатай инеп: "Бында килеп еткәсегеҙ, мине күрмәй ҡайтмағыҙ. Мин әлегә иҫәнмен", - тип өндәшкән. Улар шул төндә үк Баймаҡҡа килеп йоҡлап, иртәнсәкке автобус менән ауылға килгәндәр.

Күренделәр. Береһен ҡараған ваҡытта икенсеһе тышта илап ултырғас, ни өсөн илауын һорай ҡуйҙым. "Бында килеүемә ирем риза булманы. Шуға күрә күршемдән аҡса алып килгәйнем, шул хаҡта хәҙрәт олатай әйтте лә ҡуйҙы. Мине өшкөргән өсөн аҡса биргәйнем, ул: "Бына был аҡсаны күршеңә ҡайтарып бир, мин һиңә юлыңа аҡсаны үҙем бирәм, тине. Олатай быны ҡайҙан белде икән, тип, шул ҡыуанысымдан илап ултырам", - тине ул ҡатын. Улар ҡайтыр саҡта тағы ла киләсәктәрен белдергәс, олатай: "Икенсе мәртәбә килмәгеҙ, ул саҡта мин, ысынлап та, был донъяла булмаясаҡмын", - тине. Шулай килеп сыҡты ла, оҙаҡламай олатайым мәрхүм булып ҡалды.

Бер мәл урам һепереп йөрөй инек, олатайыбыҙ: "Балалар, урамды тиҙ генә һепереп бөтөгөҙ, хәҙер күҙе һуҡырайған бер ир затын алып киләләр", - ти. Ысынлап та, ике ир бер ирҙе ҡултыҡлап алып килделәр. Олатайыбыҙ уны ике сәғәттән ашыу өшкөрҙө. Беҙ тышта көтөп торҙоҡ. Бер мәл теге ир килеп сыҡты ла: "Был яҡты донъяны ла күрер көнөм бар икән", - тип, олатайыбыҙҙы ҡосаҡлап иларға тотондо. Олатайыбыҙ уға тыныс ҡына итеп: "Бүтәнсә эңерҙә эш эшләп йөрөмә, күҙеңде ен бәйләгән", - тине. Ысынлап та, ҡыҙыл эңер ен-шайтандарҙың иң ҡыҙған ваҡыты икән. Ул саҡта тышта йөрөргә ярамағанлығын, ниндәйҙер кисектергеһеҙ эш башҡарырға тура килһә, "Бисмилла", тип әйтергә кәрәклеген олатайыбыҙҙан белдек.

Баймаҡ районының әлеге имам-мөхтәсибе Хөрмәтулла хәҙрәт Буранбаев өс кенә йәшлек сағында атаһы менән беҙгә килә торғайнылар. Олатайыбыҙ улар килһә: "Һо, беҙҙең Хөрмәтулла хәҙрәт килә ята бит", - тип әйтеп, уның башынан һыйпар ине. Уның хәҙрәт булырын шул саҡта уҡ белгән. Йома ғәйетенән һуң улар төрлө ауылдан килгән муллалар менән көлөшә-көлөшә, мәрәкәләшеп, ауылдың лаҡап һүҙҙәрен һөйләшеп, сәй эсә торғайнылар. Олатайыбыҙ мәжлескә килеүселәрҙең һәр береһенән доға уҡытып, уҡыуын маҡтай торғайны. Хәҙерге көндә кемдәр дин юлында йөрөй - улар шул муллаларҙың йә балалары, йә ейәндәре. Олатай бер ваҡытта ла кешегә көйөп ултырманы, гел ыңғай ҡараште булды. Кешенең етешһеҙ яғы булһа, уны үҙенә тура әйтмәй генә, мәрәкә, кинәйә аша, хәтере ҡалмаҫлыҡ итеп кенә белдерер ине. Урамда берәр үҫмер йә бала кәйефһеҙ генә китеп барһа, янына саҡырып алып, арҡаларынан һөйөп, дәртләндереп, йөҙөнә йылмайыу ҡундырып оҙата торғайны. Афған һуғышында беҙҙең ауылдан бер кем дә унда эләкмәне. Бының сәбәбе олатайҙың егеткә әрмегә китер алдынан яҙып биргән доғаһында икәнен дә бар ауыл белде. Олатайыбыҙ мәрхүм булып ҡалғас, бар ауыл иланы.

### Олатайыбыҙ һабаҡтары

Беҙгә, биш ҡыҙына, һәр беребеҙгә айырып кәңәштәрен бирә торғайны олатай. Өлкән апайыбыҙ Мәзүнәгә бер мәл мәсеткә барып, мөнбәр янында баҫҡыс торамы-юҡмы икәнен ҡарап килергә ҡушты. Апайыбыҙ унда баҫҡыс булмауын, әммә мәсетте көпләп ҡатылған таҡта ярығында аяҡ-ҡулы кешенеке һымаҡ, тик күҙ, ауыҙ, ҡолаҡ урынында һыҙыҡ ҡына, тәне йоп-йомшаҡ булған тере ҡурсаҡҡа оҡшаған йән эйәһен тотоп ҡарауы хаҡында һөйләп аптыратты. Олатайыбыҙ уға: "Тотоп ҡарағасың, бик шәп. Тик был турала бер кемгә лә һөйләмә, ул - ен балаһы. Ваҡыты еткәс, енле кешеләр килһә, һин өшкөрөп ебәрерһең", - тине. Хәмдиә һеңлем һүрәт төшөрөргә, йырларға, бейергә ярата торғайны. Олатайыбыҙ уның киләсәген тап шул йүнәлештә юраны һәм яңылышманы. Хәмдиә дүртенсе кластан Өфөгә художество мәктәбенә уҡырға барҙы. Гөлназ һеңлебеҙ ҙә шул тиклем матур йырлай торғайны. Ауыл хужалығы техникумында зоотехникҡа уҡып йөрөгән сағында Радик Гәрәев концерт менән килгән булған. Ул һеңлебеҙҙең йырлағанын ишеткәс, унан шәп йырсы сығасағын әйтеп, сәнғәт училищеһына уҡырға тәҡдим иткән, ярҙам итәсәген белдергән. "Һинең бит ҡулыңдың име бар, әллә әртис булмай, медицинаға бараһыңмы, балам, һин бит кешеләрҙе дауалай торған кешеһең", - тине уға олатайыбыҙ. Гөлназ аҙаҡ медицина училищеһына уҡырға инде. Хәҙер ул кешеләрҙең тәненә ҡулын ҡуйып ҡарай ҙа, ҡайһы урында сире барлығын әйтә лә ҡуя. Бәләкәй һеңлебеҙ кескәй сағынан шаян булды, кешеләрҙе лә эләкләй ине. Уға ла ҡулының име барлығын әйтте олатай, ул хәҙер шул йүнәлештә белем алып, массажсы булып эшләй. Олатайыбыҙҙың миңә әйткән кәңәштәре лә булды. "Һин, ҡыҙым, дингә шул тиклем бирелгәнһең. 35 йәшеңә тиклем яулыҡ ябынмай йөрөһәң дә, аҙаҡтан үҙең ябына башлаясаҡһың", - тине. Мин намаҙ уҡығас, яулыҡ ябынырға тейеш булыуымды әйттем, шунан ул: "Ярар, зарураттан, тип башығыҙҙы өс тапҡыр һыйпаһағыҙ, шул яулыҡ ябыныуға тиң, аҙаҡ үҙегеҙ ябынаһығыҙ ул", - тип өйрәтте. Олатайым миңә тағы ла: "Һин, ҡыҙым, Сибайҙа йәшәйәсәкһең, эргәңдә генә мәсет буласаҡ. Шул мәсеткә намаҙға йөрө. Бер ваҡытта ла муллаларҙың етешһеҙлеге хаҡында һөйләмә. Һәр бер мулланың килешмәгән бер яғы булыр, уға иғтибар итмә", - тип әйтә торғайны.

Мөхәммәтәнүәр олатайыбыҙ ғүмере буйы ат көттө, бал ҡорто тотто. Бейәнең һөтөн генә эсә торғайны. Бер йылы умартаһындағы бал ҡорттары үлеп бөттө. Олатайыбыҙ борсолмаҫҡа, умарталарҙы таҙартырға ҡушты. Йыуып, таҙалап ултыртҡайныҡ, берике көндән бөтә умарталарға ла бал ҡорто ҡунды. Ниндәй хикмәте булғандыр, олатайыбыҙ үҙе генә белә инде. Бал алған ваҡытта беҙгә бәләкәй һауыттарға бал тултырып биреп, бар ауыл халҡына тараттырыр ине. Яҙ етһә, олатайыбыҙ атын егеп, урманға китер ине. Беҙҙе лә бер арба итеп ултыртып алыр ине. Беҙ урманда балтырған, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, әтнәкәс ашап кинәнә инек. Еләк мәлендә олатайыбыҙ еләкте шул тиклеп шәп йыйыр ине. Беҙ уны күрмәй ҙә ҡалабыҙ, "һә", тигәнсе бер теүәтәй еләк алып килер ине.

Олатайыбыҙ тәбиғәт менән үҙенсә һөйләшә белә торғайны. Уҫаҡ, ҡайын, ҡарағас, ҡарағай, муйыл ағастарының кешегә ниндәй файҙаһы булыуы хаҡында беҙгә һөйләй торғайны. Мәҫәлән, уҫаҡ ағасының янында ултырһаң, ҡан баҫымы яҡшырыуын ул беҙгә аңлатты, тәндәге тимрәү һымаҡ ауырыуҙарҙы уҫаҡ ҡайрыһы ҡайнатмаһы менән йыуып дауаларға өйрәтте. "Юлығыҙҙа ҡарағас осраһа, уны тотоп булһа ла китегеҙ. Ул бит мәңгелек йәш ағас, күңелегеҙ үҫер. Ҡарағастың һағыҙын сәйнәгеҙ, тешегеҙ ныҡ булыр. Бер ваҡытта ла тешегеҙ һыҙламаҫ", - тип әйтеп өйрәтә торғайны. Ҡарағайҙың сайырын сәйнәргә лә ҡушты, ҡайындың туҙынан яһалған һауытта тоҙҙо һаҡлаһаң, кешенең ғүмеренә бәрәкәт килеүе хаҡында ла әйтте. Аяҡтары шешеп, табандары ярылып, аяғына баҫа алмағандарға туҙҙан онтораҡ эшләп, аяҡ кейеменең эсенә һалырға кәрәк, тип кәңәшен бирер ине. Фатима өләсәй беҙҙҙең һәр беребеҙгә йоҙроҡ ҙурлығында туҙ һағыҙҙары ҡайнатып бирә торғайны. Эсте, ҡарынды таҙартыу өсөн муйыл ашарға ҡуша торғайны олатайыбыҙ. Муйылды бер ваҡытта ла һындырып тирмәне ул. Ағасы аҫтына балаҫ, әрмәктәр түшәп, һелкетеп, емештәрен тоҡҡа тултырыр ине.

Олатайыбыҙ мәҡәлдәрҙе, тиҙәйткестәрҙе күп белде. "Күккә менер баҫҡыс юҡ", "Күктән төшөр сынйыр юҡ", "Йомортҡаның йөйө юҡ", "Һыйырҙың ялы юҡ", "Аттың мөгөҙө юҡ", "Таштың тамыры юҡ" һымаҡ һүҙҙәрҙе әйтеп ултыра торғайны. Уға район түрәләре лә кәңәш һорап, доғалыҡ, бетеү яҙҙырып алырға килә торғайны. Түрәләр киләләр ҙә, ҡайтыр алдынан: "Олатай, беҙҙең бында килеүебеҙ тураһында башҡаларға әйтеп кенә ҡуйма инде", - тип иҫкәртәләр ине.

Әсәйебеҙ ҙә дини кеше ине. Атайыбыҙ балалар йортонда тәрбиәләнеп, Силәбе өлкәһенән беҙҙең яҡтарға сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү осоронда килеп сыға. Атайыбыҙ әсәйебеҙгә өйләнер булғас, олатайыбыҙ әсәйебеҙгә шундай нәҙер әйтеп: "Ул бала сағында шул тиклем бәхетһеҙ булған. Ул да Хоҙай бәндәһе. Уға кейәүгә сыҡҡас, уны тәрбиәләргә, дин юлына килтерергә бурыслыһың", - тигән. Әсәйебеҙ олатайыбыҙҙың һүҙен тотто, атайыбыҙҙы дин юлына баҫтырҙы. Әсәйебеҙ мәрхүмә булды, атайыбыҙ хәҙер Муллаҡайҙа олатайымдың нигеҙендә йәшәй.

### "Фатиха" - Ҡөрьәндең әсәһе

Бер мәл клубта ҡумыҙсылар ансамбле сығыш яһарға булғас, миңә ҡумыҙ етмәне. Шул саҡта Сибайҙан әртистәр килеп төшөп, олатайҙың хәлен белергә инделәр. Ҡумыҙҙары ла бар ине. Олатай береһен һатып алды ла, миңә бирҙе. "Ҡыҙым, мин һинең мөғәллимә булыуыңды теләгәйнем. Әртис булмаһаң да, ошо ҡумыҙҙы һаҡла. Ул һиңә киләсәктә кәрәк буласаҡ. Еҙ ҡумыҙҙа уйнаған кешенең тын юлы таҙара", - тине. Уның әйткән һүҙе раҫ булды. Бөгөн мин Сибайҙа ҡумыҙсылар ансамбленең етәксеһемен. Һуңынан Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу техникумына барып уҡып ҡайттым.

Һуғыш башланып, илебеҙ өсөн иң ҡурҡыныс көндәр килгәс, йәғни фашистар Мәскәүгә килеп еткәс, беҙҙең төбәктең дин әһелдәрен Өфөгә Диниә назаратына саҡырып алғандар. Улар Аллаһы Тәғәләнән илебеҙҙең был һуғышта еңеп сығыуын һорап зекер әйткән. Уларҙы саҡырыусылар был турала бер кем дә белергә тейеш түгел тип иҫкәрткән. Ысынмылыр, улар зекер әйткән саҡта фашистарҙың юлын болот төшөп ҡаплаған. "Беҙҙекеләр зекер, намаҙ ярҙамында ғына еңде инде", - тип әйтә торғайны Мөхәммәтәнүәр олатайыбыҙ.

"Ҡолһуалла" - Ҡөрьәндең атаһы, уны бер ултырғанда мең тапҡыр, һис юғы көнөнә бер тапҡыр әйтегеҙ, "Фатиха" сүрәһе - Ҡөрьәндең әсәһе, уны уҡығас та, Аллаһы Тәғәлә үҙенең фатихаһын бирә", - тип әйтә торғайны олатайыбыҙ. Кистәрен ултырып, йә ятҡан килеш зекер әйтер ине. Мин дә зекер әйтәм, зекер әйтһәм, эс бошоуы юҡҡа сыға, күңелдә яңы уйҙар тыуа.

Бер мәл төшөмдә миңә "Әл-Маидә" сүрәһен уҡыттылар. Иртәгеһенә Ҡорбан ғәйете байрамына һалма йәйергә мәсеткә барҙым. Һалма йәйеп торғанда иң аҙаҡҡы йәймәне шылдырам, тиһәм, ҡулымдың көсө етмәне. Ҡулым ҡамыр һымаҡ булды ла ҡуйҙы. Эстән генә зекер әйтергә тотондом, янъыма килгән кешеләрҙең уйын күрә башланым. Тәнем зымбырҙап китте, алдымда йәйелгән һалмаға ҡараһам, унда матур итеп тороп "Аллаһ" һүҙе яҙылған. Янымда хажға барыусылар ҙа бар ине. Барыһы ла был мөғжизәгә илай-илай ҡараны. Һалма йәйергә хәлем ҡалмағас, Аллаһы Тәғәлә быныһын йәйергә ҡушмайҙыр инде, тип ҡалдырҙым. Әғләметдин хәҙрәт тә мәсеттә ине. Ул мөғжизәне мәсеткә килеүселәрҙең барыһына ла күрһәтеп сыҡты.

### Суфыйҙар килер ине...

Олатайыбыҙға төрлө яҡтан бик ныҡ ҡартайған, һәләмә кейемле кешеләр килә торғайны. Беҙ уларҙың барыһын да "Диуана" тип атап йөрөттөк. Олатайыбыҙ беҙгә уларҙы "Диуана", тип атамаҫҡа ҡуша ине. Олатайыбыҙ менән һәр саҡ зекер әйтеүсе, ҡолағында инәүе булған кешенең бик күп тапҡырҙан килеүен беләм. "Концлагерҙа булған, һеҙ унан көлмәгеҙ", - тип әйтер ине уның тураһында олатайыбыҙ. Шәйшәрип тигән кеше лә беҙгә күп тапҡырҙар килде. Тағы ла бер бәләкәй генә буйлы кеше беҙҙә йыш ҡунаҡта булды. Намаҙ уҡыр инеләр ҙә, оҙаҡ ҡына итеп зекер әйтеп, аҙағынан бергәләшеп илар инеләр. Аҙаҡ олатайыбыҙҙан: "Нишләп илай-илай намаҙ уҡыйһығыҙ?" - тип һорағайныҡ, олатайыбыҙ: "Беҙ киләсәк тормош өсөн, милләтебеҙҙең, балаларыбыҙҙың, ейәндәребеҙҙең именлеге өсөн, динебеҙ кире ҡайтһын өсөн Аллаһы Тәғәләнән илап һорайбыҙ", - тип әйтер ине. Улар артабан ҡырға, тау баштарына сығып китеп, намаҙ уҡып, зекер әйтеп ҡайтырҙар ине. Һуңынан ғына белдем: беҙ "Диуана", тип белгән кешеләр барыһы ла ваҡытында Муллаҡай мәҙрәсәһендә һәм башҡа яҡтарҙа уҡып, иҫән ҡалған һуңғы суфыйҙар ине. Мин уларҙың нисек итеп тәһәрәт алғандарын ҡарай торғайным. Устарына һыу алып, терһәктәренә төшөргән саҡта шул һыу ҡояшҡа сағылып, ҡулдарында нур уйнатҡан һымаҡ инеләр. Олатайҙан быбың серен һорағайным: "Тәһәрәт алған һайын Аллаһы Тәғәлә кешене нурландыра, һәр ваҡыт тәһәрәт менән йөрөгөҙ", - тип аңлатты.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ғабдулла ишан Сәиди, уның мәҙрәсәһе, улы Мөхәммәтәнүәр, башҡа нәҫелдәштәре хаҡында китап яҙыу зарурлығы бар. Дилара Мөхитдин ҡыҙы һәм туғандары был эшкә тотонған да инде. Тиҙерәк ул китапты ҡулға алғы килә. Шул уҡ ваҡытта ул китапты яҙыусыларға теләк тә бар: милләтебеҙ диненә йөҙ борған саҡта заманында Зәйнулла, Ғатаулла, Ғабдулла ишандарыбыҙ иң хаҡлы тип тапҡан тәриҡәт юлының әһәмиәте лә Ғабдулла ишан Сәидиҙең эшмәкәрлегенә бәйле сағылһын ине ул хеҙмәттә.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

Урал Мостафин

# Ҡойон ҡойроғо оҙон...

(Повестың гәзит варианты)



Ҡыҙыҡай, күҙҙәре йомола биреп ултырҙы ла, йомшаҡ ҡына йылмайып, һиңә ышанып буламы икән, тигән кеүек, егеттең күҙҙәренә төбәлде. Күҙҙәр нимә әйтешкәндәр, аңлашҡандыр, ҡыҙыҡай аяҡтарын вагон эскәмйәһенә күтәреп йәтешләп ултырҙы ла, курткаһын егеттең тубыҡтарына һалып, алдына ятты ла ҡуйҙы. Иң төптә ултырған малай сығып китмәһә, бөгәрләнеп ятыу ҙа тәтемәҫ ине. Был көтмәгән сәйер яҡынлыҡтан ҡаушанымы, оялдымы, ҡыуандымы, ҡурҡтымы икәнен егет үҙе лә аңламаны, сөнки ошо арала күңелендә ҡупҡан хистәр ғәрәсәтен тойоу һәләтен юғалтты, аңы томаланды, телһеҙ, йәнһеҙ ҡалды. Нисек тыныс ултыраһың, көтмәгәндә алдыңа "тып" итеп бәхетме, бәләме килеп төшкәндә? Тәненең бөтә ағзалары тартышып ҡатып бөрөшкән, аяҡтар үҙенеке түгел. Был көсөргәнешле хәлдән тәне мең киҫәккә шартлар хәлдә. Быға тиклем таныш түгел, ҡапыл килеп баҫҡан хистәрҙе нисек тыйырға? Нисек йәнең ҡаушағанды һиҙҙермәҫкә?

Күпме шулай ҡатып ултырғандыр, башҡа сыҙар хәле ҡалмағас, тәүҙә уң ҡулын күтәреп ҡараны, үҙенеке. Ахыры һул ҡулы ла үҙенеке икәнен һиҙҙе. Әҙәм балаһы, ниндәй генә хәл, күңел кисерештәре әсирлегенә юлыҡһа ла, теләге булһа, барыбер, үҙ хәлен үҙ ҡулына алырға һәләтле йән булып яралған донъяға. Шуға күрә лә ер йөҙөндә иң камил аңлы йән бит ул. Егет тә, ярһыу хистәре шауҡымынан арынып, ҡәҙимге иҫенә килде, хатта, башында тыуған ҡыйыу-ҡыйыу уйҙар йәнен-тәнен ҡоторторға кереште. Ҡулын ҡыбырлатҡан булып, бармаҡ остары менән ҡыҙҙың күлдәгенең ситенә генә тейергә баҙнат итте. Бөтә тәнен зымбырлатып ток һуҡты! Шул зәхмәттән шыр тиргә батты, бахыр. Вагонда тынсыу, шуға тирләйемдер тип үҙен йыуатҡан булды. Эш боҙорға йә урлашырға ниәтләнгән кеше кеүек, тирә-яғына алан-йолан ҡарап алды ла, бер кем шаһит булмауына инанғас, яйлап ҡына алға эйелә башланы, йәнәһе, йоҡоһо килгән дә башы үҙенән-үҙе эйелгән. Тере йәндең бер ҡатлы ғына хәйләһе! Ә уның бүләге егеттең бөтә тәнен, аңын ҡытыҡлаған наҙлы илерткес тәм йәш ҡыҙ тәненең башты әйләндергес ләззәтле тәме. Тура ҡатып ултырғанда уҡ был тәм бөркөләүенән башы әйләнеп, күҙҙәре томаланғайны, тик, яман еңәйәт ҡылған кеше кеүек, үҙенә танырға ла оялды, тойорға ла ҡыйманы. Ә хәҙер?... Уй, Аллам! Ярлыҡа мосафирыңды!

Ал һуң башыңды артҡа! Үҙенә эстән генә бойороп ҡарай ҙа, ләкин аңы ла, тәне лә уны тыңламай. Тағы ла алғараҡ, албырғатҡыс наҙлы тәнгә яҡыныраҡ ынтылырға, тулыраҡ сумырға теләгән йәнде был сихырлы арбалыуҙан тыйып булмай. Тәҡәт юҡ! Ярамай бит, кеше күреп, ҡыҙыҡай һиҙеп ҡалһа, мәсхәрәһенән ер тишегенә инерҙәй. Көс-хәл менән бөтә һәләтен йыйып, башын артҡа иңкәйтә алды ахырҙа.

Уф, Аллам, ниңә миңә был һынауҙарың? Бер кемгә лә теймәй, ипле генә ултыра инем бит. Был сихыр әсирлегенән сығыр әмәл бармы? Ят бер ғүмер йәшәгәндәй булды йәш йөрәк шул арала. Күҙҙәрен йомоп уйға батты, хыялдар донъяһына сумды.

Ҡуй, етәр, әгәр үҙеңде тота алмаһаң, оятҡа ҡалыуың ихтимал.

Һул иңбашында ултырған фәрештәһе һаман ҡоторта:

Яҙа эйелгән булып, сикәңде сикәһенә терә! Йомшаҡ ҡына ярым асыҡ ирендәренә иренеңде тигеҙ!

Ах, яуыз! Етәр ҡотортма мине. Былай ҙа саҡ ултырам!

Бөтә ҡыйыулығыңды йый ҙа сикәһе, ирене, күҙҙәренән үбеп ал! Берәү ҙә күрмәй һине. Ана, хырылдашып йоҡлап киттеләр. Ошо уйҙарынан ул тағы шыр тиргә батты. Йәнен ҡоторткан теләктән ҡото осто. Ысынлап та, уның уй, теләгеме был? Юҡтыр, юҡтыр! Ят, бөтөнләй уға таныш түгел теләк нишләп уныҡы булһын? Аҙғын уйҙар башына килгәне лә юҡ быға хәтлем. Алйып ултыра торғас, иҫенә килеп ҡараһа, уң ҡулының ике бармағы ҡыҙҙың күлдәгенең ситен һаман ебәрмәгән икән. Бармаҡтары үҙҙәренән үҙҙәре (әлбиттә, уның бер ҡыҫылышы ла юҡ!) шул сепрәк осон йыбырлап ҡына иркәләтеп һыйпайҙар ине...

Ҡыҙҙың оҙон үрелгән толомонан ысҡынып сыҡҡан ике бөртөк бөҙрә сәсе, тын алған ыңғайына, бәрҙенең алдында балыҡсы сиңерткә уйнатҡан кеүек, елберҙәп кенә һелкенеп, егеттең бөтә тән-йән иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Әкиәттәрҙәге йыландан арбалған батыр кеүек, егет шул сәс бөртөгө ыңғайына бәүелеп йәшәй башлағанын һиҙҙе. Эйелеп кенә ул сәс бөртөгөнә иренен, сикәһен, керпектәрен тигеҙеп иркәләгеһе килде. Был теләкте үтәү еңел генә кеүек ине: эйел дә иркәлә. Эйе, әйтеүе генә анһат! Ул сәс бөртөгө алдатҡыс бер тылсымлы көс кеүек ылыҡтыра ла, ҡурҡыта ла. Ҡурҡытыуы көслөрәк булмаһа, егет күптән эйелеп тейер ҙә ине...

Юҡ, ҡарамаҫҡа! Күҙҙәрҙе йомоп, онотолоп тик кенә ултырырға кәрәк.

Йәнен ыҙалатҡан хистәренә бирелеп күпме ултырғандыр, үҙен тағы быларҙы ҡырҙан ҡарап торған кеше кеүек күрҙе. Бына ул эйелгән дә ҡыҙҙың битен, күҙҙәрен иркәләй икән. Бына ҡыҙыҡай күҙҙәрен асып уға йылмайып ҡараны ла, йылы ғына ҡулдары менән ҡосаҡлап алды...

Уй, Аллам! Былай-алай ыҙалатмаһаң ни була? Шыр тиргә батып иҫенә килде, күкрәгендә йөрәге поезд тәгәрмәстәренән дә ныҡыраҡ таҡылдап ҡаға, бөтә вагонға яңғырап ишетелә кеүек. Ҡолаҡтары тондо, аңы тунды, үҙенең йөрәге тибеүенән башҡа бер нәмә лә ишетмәне. Күҙҙәрен асһа, ғәжәп, барыһы ла элеккесә! Алдында ятҡан ҡыҙҙың наҙлы, илерткес йылмайыуын күргәс, тынысланып, ипләп кенә тирә яғын байҡаны. Был хыялында ғына "ҡылған аҙғынлығы" ваҡытында тейешле язаһыҙ ҡалғас, бер аңды солғап, йәнде әсир иткән уй-теләк үҙ тоҙағынан ҡорбанын ҡапыл ғына ысҡындырамы һуң инде? Егет бөтә баҙнатын, ҡыйыулығын йыйып, баяғы сәс бөртөгөнә башын эйҙе. Эйәге сәс осона тейеү булды һәләкәт! Тәнен йәшен атты! Көсөргәнештән әлһерәгән тәне йәрәхәтләнде, быуа йырылды! Күҙ алдары ҡараңғыланып, бөтә булмышы менән быға тиклем татымаған рәхәт, ләззәт ҡосағына сумды. Йәшен тулҡыны башынан аяҡ, ҡул, бармаҡ остарына тиклем таралып, бөтә тәнен иҙеп сығып китте. Шартлар хәлгә еткән йөрәккә был ҡағылыш шифалы бәлзәм булғандыр, ул ҡағыуҙан бөтөнләй туҡтаған кеүек ине.

Кешеләр башына һуҡманы. Вагонда ут һүнмәне. Поезд ауманы. Донъя түңкәрелмәне. Йәһәннәм упҡыны үҙен йотманы! Уның хәйләкәр хыянатын үҙенән башҡа бер кем дә һиҙмәне. Танауына баяғы наҙлы тәм бөркөлөп кенә харап итә яҙҙы. Ул ят тәмдең касафатын: сихырлау көсөнән ҡотолоп булмағанын да, йәнде арбау ғына түгел, аңды томалауын да белә.

Колхозда бесән мәлендә ат башында күбә тарттырып йөрөгәндә өлкәнерәк малайҙарҙан ишетеп, үҫә биргәс, тырмала йөрөгәндә үҙ башынан кисереп иҫләй ул тәмдең зәхмәтен, һәләкәтле шауҡымын. Ул тәмде бер тапҡыр ғына булһа ла татып, йәнде, тәнде ҡытыҡлатыр өсөн, кисектергеһеҙ ғәрлекле язаһын алыуыңа ҡарамай, әллә ниндәй еңәйәт эшләргә әҙерһең. Сәйгә туҡтаған мәлдәме, йә аттарҙы ял иттергән арала, күбә күбәләп йөрөгән еңгәйҙәрҙең береһе ағас араһына йүнәлгәндә шәйләгән шуҡ малайҙар йәшенеп кенә артынан эйәрә. Аулаҡта кеше ниндәй йомошон атҡарғанын аҫтыртын күҙәтеү, кеше белеп ҡалһа, оят, хурлыҡ, еңәйәт хатта, ләкин әлеге лә баяғы ләззәтте татыу теләге аңды томалай. Күҙәткәндә күреп ҡалған еңгәй: "Ах, шайтан, кәрәгеңде бирәм хәҙер", - тип баҫтыра. Күп осраҡта ҡаратырыш еңгәйҙәр, барыбер, баҫтырып тота. Гәйебең булғас, шыҡ ҡатып ике ҡулың менән ыштаныңа сат йәбешәһең, сөнки шаталаҡ еңгәйҙәрҙең язаһы бер - баҫтырып тоталар ҙа, бөтә ил алдында ыштаныңды һыпыралар! Бөтә йәмғәт алдында, бар нәмәләрең ялпылдап ыштанһыҙ тороп ҡара! Ғәрсел малайҙар өсөн унан да ҙур мәсхәрә юҡтыр донъяла. Сөнки, улар уйлағанса, үҙҙәренән башҡа бер кем белмәгән, серле сихри көс наҙлы тәмде татыу хисе тәкәтһеҙ тарта, алйыта. Ул сәйер, ят, аңды арбаған еҫтәр гөлләмәһендә үләндәр, сәскәләр, икмәк, һыу, һауа тәмдәре һәм башҡа таныш түгел наҙлы тәмдәр бар. Ул, тәбиғәттән әҙәм йәненә бирелгән тәбиғи изге хис-тойғоно, бәхетле балалар ата-әсәһенә һырынып үҫкәндә үк татый. Еңгәйҙәр баҫтырып тотҡан арала тәненә һылышаһың да, танау япраҡтарың ярылырҙай, тының тонсоғорҙай булып ят тән төменә сумаһың. Ул наҙлы, иҫ китерлек алйытҡыс тәбиғи еҫтән ҡалтыранып бөтә ағзаларың тартыша, тәнең мандолина ҡылы кеүек зымбырлай! Ыштаның һыпырылғанын да тоймай тораһың иҫеңә килгәнсә. Хурға ҡалыуыңдың йыуанысы шул. Йәннәт ләззәтенән арынып, тирә яғыңдағы хәлдәрҙе аңлар дәрәжәгә килеүеңә, бөтә мир һиңә төртөп күрһәтеп тәгәрәп ятып көлгәнен күрәһең. Ер тишегенә инер инең дә, тишек юҡ, аулаҡҡа ҡасаһың. Ҡайҙа инде ул шаян, шаталаҡ, дәрте бөркөп торған йәш еңгәйҙәрҙән ҡасып ҡотолоу. Улар һинән дә йылғырыраҡ, һинән дә хәллерәк, хәйләкәрерәк булып сыға. Белдермәһәләр ҙә, йәш малайҙарҙы үҙҙәренең тәненә ылыҡтырып, уларҙың тәбиғи тойғоларын уята алыуҙарынан ләззәт алғандарҙыр. Ҡәйнештәрен тотоп түштәренә ҡыҫыуҙан әллә ниндәй сихри хистәр кисергәндәрҙер, сөнки был уйынды улар ҙа рәхәтләнеп уйнай...

Шул уйҙарына мауығып ултырған егет тә ойоп бара икән, башы эйелә башлағанда ҡапыл һиҫкәнеп, тертелдәп уянып китте. Алдында ятҡан ҡыҙыҡай күҙҙәрен асып, был егет кем икән, тигән һымаҡ, аптырап текләп ҡарап ятты ла сәбәләнмәй генә тороп ултырҙы. Аяҡтарын ыҡсым ғына төшөрөп иҙәндәге туфлиҙарын кейҙе. Ҡалын сәс толомон ысҡындырып, барлап, кире соңҡаһына йыйып беркетеп ҡуйҙы. Йәтеш кенә сумкаһынан ҡулъяулыҡ алып бит-күҙен һыпырып алды, кейемен һыйпаштырып рәткә килтерҙе. Буяуҙары ла булғандыр, ләкин күмәк кеше алдында буянырға баҙнат итмәне. Ҡаршыла ултырған ағай менән апай ашыҡмай ғына устары менән бит-күҙ, ауыҙ-морон тирәһен һыпырып алдылар, бөтә ғибәҙәттәре шунан ғибәрәт булды.

Агиҙелдә тимер күпер аша сығып барғанда, юлдаштар поездан төшөргә әҙер ине. Бергә үткәргән ҡыҫҡа ғына сәфәрҙәре, танышлыҡтары, бәйләнештәре ошо ерҙә өҙөлдө, ғәмәлдән сыҡты, тип әйтергә лә була. Һәр кем үҙе менән булышты: бөгөнгө көндөң мәшәҡәттәрен иҫенә төшөрөп, үҙ уйҙарына батты, йәиһә, эргәһендәгеләрҙе бөтөнләй күрмәмешкә һалышып, тәҙрәгә төбәлде. Ни тиһәң дә, ҡараштарын башҡаларҙыҡы менән осраштырмаҫҡа тырышты. Күперҙе үтер-үтмәҫтән ҡайһы бер сабырһыҙҙар йөк моҡсайҙарын ҡосаҡлап, күтәреп, һөйрәп ишеккә йүнәлә, шулайтһалар, башҡаларҙан алдараҡ барып етәләрме икән әллә? Әллә иң

***✓ Малай яй ғына килеп әбейҙең эсенә төртөп тә, һуҡҡылап та ҡарай һәм: "Юҡ, ашатмайым, һинең эсең йомшаҡ, үҙегеҙҙә аша", - тип яуаплай. Беҙ көләбеҙ. Булыр бала бишектән.***

алдан төшкәндәргә бүләк өләшәләрме икән? Етмәһә, поезд бер-ике минутҡа ғына туҡтаған станция йә разъезд булһа, бер хәл, был һуңғы станция. Поездан төшөп өлгөрәм тип ашығыу урынһыҙ. Ана, яндырайҙар, хәҙер кеше башы аша алан-йолан ҡаранып торалар. Вагонда әллә ниндәй уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты: әҙмекүпме юл буйына һин дә мин бергә һөйләшеп, гәпләшеп, ҡайһы берәүҙәре хатта серләшеп килгән кешеләр, хәҙер бер-береһен белмәмеш тә күрмәмеш булып ҡыланалар, ситләшәләр, һөйләгәндәренән оялған кеүек, бер-береһенән тиҙерәк ҡотолорға ашығалар. Ҡыҙыҡ!

Вагондар бер-береһенә абынып, төкөшөп, шығырлап, сыйылдап туҡтаны. Эскәмйәләр араһында торғандар ҙа бер-береһенең өҫтөнә менә яҙып, алға уктадты. Тырҡ-пырҡ итеп ҡайһыныһы һыҡтанды, ҡайһыныһы һуҡранды. Ләкин күбеһе, хәҙер ваҡытлы күршеләрҙән ҡотолам тип, ҡыуанды шикелле. Улар рәтенә егет кенә инмәй ине. Ул хәҙер нимә эшләргә лә белмәй, иҫәңгерәп тик ултыра. Шул арала сиратта килгәндәрҙән береһе: "Гүзәл, әйҙә", - тигәйне, ҡыҙыҡай йөнәт кенә тороп сумкаһын иңенә элде лә, тиге иптәше үҙенең алдында бушатҡан урынға инеп, сират ыңғайына китте лә барҙы. Баласаҡ хистәренән арына алмай ултырған егет, ҡапыл һиҫкәнеп, артынан ыкталып ҡарағайны, өлгөрмәне. Хәҙер, һуң булһа ла, егет тә урынында ултырып сыҙай алманы. Бәлки, бер нәмәгә ҡарамай, бая уҡ ныҡышып ынтылыр ине, алдында тыныс ҡына ултырған ағай менән апай алдында сабырһыҙлыҡ күрһәтеүҙән ояллы. Иң һуңғылар рәтендә вагондан төшкәндә, перрон аулаҡ, иркен ине инде. Вокзал алдына сығып тирә-яғын байҡаны, автобус туҡталышындағы кешеләр араһында йөрөп сыҡты, трамвай туҡталышына барып ҡараны. Кире вокзалға килеп, ике ҡатын да йүгерә-атлай ҡарап сыҡты. Юҡ, бер ерҙә лә юҡ!

Эх, бешмәгән, эх, һин, мәмәй ауыҙ! тип эстән генә үҙен битәрләй. Ҡыйыуыраҡ булһаң, ни була? Йөрә хәҙер кисәге көнөндә эҙләп! Үрһәләнеп улай үтте, былай үтте, эҙләгәнен тапманы. Оҡшағаныраҡ көүҙә йә кейем күрһә, йөрәге сығырҙай булып ашҡынып шунда йүгерҙе, янылышҡаны таныуы йәнен әрнетте. Юҡ, ҡыҙыу мәлендә һуҡмай, баҙнатһыҙланып ултырһаң, ҡыҙған тимер ҙә һыуына, ыңғайына анһат ҡына бөгөлөп бармай. Әҙәп һаҡлап ултырыуыңды кем хәҙер баһалар? Кемгә кәрәк һинең самаһыҙ итәғәтлегең? Китер кешеләр таралышып китеп бөттө. Егет һаман өмөтләнеп йөрөнө. Юҡ, эҙләүҙәре файҙаһыҙ булды. Исмаһам, тауышын да ишетмәне бит. Ярай әле, танышы өндәшкәндән исемен аңғарып ҡалды, былай булһа, уныһын да белмәҫ ине. Хәйер, ҙур ҡалала Гүзәлдәр әҙ тиһеңме ни?

**(Дауамы. Башы 44-се һанда).**

## ГӘРӘБӘЛӘР

**Тимер НИӘТШИН**

# АҠТАМЫРҘАЙ ЕРҘӘ ҮҪЕР,

## Ҡояш булып күктә балҡыр...

### Башҡорт бәләһе

*Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп,*
*Әйҙә, йырла, башҡорт балаһы.*
*Халыҡ йырынан.*

*Кемдәр генә һине йырлатманы;*
*Йыр-моңға бай башҡорт, йәнәһе.*
*Ауыр тойолһа ла, әйтмәй булмай:*
*Берҡатлылыҡ - башҡорт бәләһе.*

*"Любезники любизар"ы менән*
*Париждарҙы алды күрәгә.*
*Енеүсегә - ҡымыҙ, ә ағыуҙы*
*Кем эсерҙе Ҡаһым түрәгә?*

*Петроградты һаҡлап ҡанын ҡойғас,*
*"Порт-Артур"ҙы уйнай ҡурайҙа.*
*Большевиктар рәхмәт урынына*
*Бабичынды тотоп турайҙар.*

*"Ирәндек"те йырлап туй үткәреп*
*Төрлө милләт ҡыҙын алаһын.*
*Балаларың туған телен белмәй,*
*Үҙ илеңдә телһеҙ ҡалаһың.*

*Намаҙ уҡыр әбей хәмер эсеп*
*"Ҡоҙаса"ны йырлап көлдөрә.*
*Егерменсе быуат аҙағында*
*Берҡатлылыҡ беҙҙе бөлдөрә.*

### Сибәркәйгә

*Оҙон керпектәрен сыландырып,*
*Биттәреңдә ҡара эҙ ҡалдырып,*
*Сибәр генә ҡатын күҙ йәш түгә, -*
*Эргәһеңдә торған ирен һүгә:*

*Әсәм биргән ғәзиз ғүмеремде*
*Нисәмә йыл һиңә бағышлайым.*
*Май сәскәһе кеүек күңелемде*
*Һин - таш эргәһеңдә һағышлайым.*

*Ел-дауылдан һаҡлар кешеме һин,*
*Көйөнтәләй умыртҡаңа ҡара...*
*Меҫкен ире сабыр, тыныс тора,*
*Ханым һөрән һала, тауҙар яра.*

*Әй, сибәркәй, ысын һөйә белһәң,*
*Ирең өсөн янып-көйә белһәң,-*
*Тормаҫ ине ирең бөршәйеп.*
*Алпамыша һымаҡ баҫыр ине,*
*Көс-гәйрәтен киреп асыр ине*
*Һәм ҡурсалар ине,*
*Һине генә түгел,*
*Ер шарын.*

### Дауахана табыны

*Сәйфетдин дуҫ, күптән күрешкән юҡ,*
*Әйҙә, бер һөйләшеп алайыҡ.*
*Беҙҙең өсөн мөһим хәл-әхүәлде*
*Ҡап уртаға йәйеп һалайыҡ.*

*Беренсенән, сәғәт таңғы биштә*
*Нинә күҙҙән йоҡо ҡаса әле?*
*Һалҡын иртә менән яңғыҙ мендәр*
*Нинә күҙҙе шулай аса әле?*

*Икенсенән, тәмләп төш һөйләргә*
*Кешеһе бар, әммә төшө юҡ.*
*Яҙ биҙәге булыр сәскәләрҙең*
*Беҙҙең төшкә инер эше юҡ.*

*Ҡыҙғаныска ҡаршы, көн менән төн*
*Беҙҙе ҡабул итмәй ҡылана.*
*Ҡышҡы ҡыҫҡа көндә ауырыһаң,*
*Ҡышҡы оҙон төнөң һыҙлана.*

*Яңғыҙлыҡтың яғаһынан алып*
*Бына тигән итеп сәй ҡуйҙым.*
*Лимон телдем, тамсы бал тамыҙҙым,*
*Һағышымды һығып һут ҡойҙом.*

*Сәйфетдин дуҫ, кәсәләргә ҡара:*
*Туҙалмайса сыңлап торалар.*
*Дуҫтар өсөн сырхау ҙа ҙур сәбәп,*
*Таң атҡанда табын ҡоралар.*

### Һаумыһығыҙ, ырыуҙаштар!

Мәләүез төбәгендә тамьян, ҡыпсаҡ, юрматы ырыуҙарына арнап стела ҡуйылды.

*Һаумыһығыҙ, ырыуҙаштар,*
*Һаумыһығыҙ, йәштәр, ҡарттар!*
*Хәлдәрегеҙ арыу-шәпме,*
*Нисек әле һеҙҙең эштәр?*

*Тыуған ерҙең тартыу көсө*
*Арта бара йылдар менән.*
*Беҙҙең яҙмыш бәйләнгән бит*
*Кендектәге ҡылдар менән.*

*Сәстәремә сал ятһа ла,*
*Имсәгенде һаман имәм.*
*Һинән генә алам тәүфиҡ,*
*Һинән генә алам иман.*

*Ят яҡтарҙың ере ташлы,*
*Тамыр йәйеү үтә ауыр.*
*Ғүмер буйы асфальт тишеп*
*Кибә йөрәк, яна бауыр.*

*Беҙҙең заман һалҡын заман,*
*Күңел өшөй йылы юҡҡа.*
*Күпме меҫкен ғазаплана*
*Алға барыр юлы юҡҡа.*

*Тамьян, ҡыпсаҡ, юрматыһы*
*Бер туғандай тойһон үҙен.*
*Замандашым, беҙгә бөгөн*
*Кәрәк өмөт, кәрәк түҙем.*

*Ел иҫте, тип тәғәрләргә*
*Ҡамғаҡ түгел минең халҡым.*
*Аҡтамырҙай ерҙә үҫер,*
*Ҡояш булып күктә балҡыр.*

### Сәйәсмән

*Аҡыл тигәнең - тулы бер батман:*
*Утта ла янмай, һыуҙа ла батмай.*

*Намыҫы наҡыҫ - бары бер мыҫҡал:*
*Харам мал йыйһа, йөрәге ҡыҫмай.*

*Теле шәрбәтле - әжәлдән дарыу:*
*Дошманы булһаң - эсерер ағыу.*

### С-гә.

*Исемдәрең һирәк икән,*
*Ишеткәнем юҡ күптән.*
*Тыуһаң да ябай әсәнән,*
*Булмышың, бугай, күктән.*

*Күктән Ергә атылғанһың*
*Йондоҙ булып ҡасандыр.*
*Төштәремдә эҙләһәм дә,*
*Өндәремә ҡасамдыр.*

*Хыял булып килеп индең*
*Сарсаған күңелемә.*
*Һис тә ышанғы килмәй шул*
*Минеке түгеленә.*

*Шағирҙарҙы тиле, тиҙәр,*
*Һөйөүсән була тиҙәр.*
*Әгәр ҙә һөйөлмәһәләр,*
*Көйөүсән була тиҙәр.*

*Тилелек ул, миндә лә бар,*
*Тик нәфсемдән һаҡланам.*
*Һиндәй гүзәл сәскәләрҙе*
*Өҙмәй генә һөкланам.*

## БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

### Эсең йомшаҡ

Фирғәт ике генә йәштә, әммә теле арыуыҡ асылған, күп һөйләй. Көн дә ҡатынҡыҙҙар ултырған ергә ҙур телем икмәк тотоп килеп етә. Шаян Мөслихә әбейе: "Кана, минә лә икмәк ашат әле", - тип мәрәкәләй. Малай яй ғына килеп әбейҙең эсенә төртөп тә, һуҡҡылап та ҡарай һәм: "Юҡ, ашатмайым, һинең эсең йомшаҡ, үҙегеҙҙә аша", - тип яуаплай. Беҙ көләбеҙ. Булыр бала бишектән - үҙ нәмәһен әллә ни өләшергә лә, таратырға ла уйламаған ир үҫә.

### "Атайым ахты эсә"

Ут күршебеҙҙең өс йәшлек ҡыҙы Айһылыу көн дә килеп инә лә, тәтелдәй ҙә башлай. "Атайым ахты эсә лә "эмм" тиеп ҡуя. Тамағы ауылта инде, атайымды йәлләп иланым, гел эҫкәҫ, ауыҙы ла, эсе лә ауылта инде", - тип һөйләй. Бала хәмерҙең (ахты - араҡы) насарлығын аңлай, ә беҙ, ололар?

### Бындай билмән ашамайым

Рауил дуҫы Ғәнигә эйәреп килә, өйҙә тағы өс малай бар. Ғәнизең әсәһе эремсек билмәне бешергән. Күмәкләп ашарға ултыралар, малайҙар билмәнде бешә генә. Тик Рауил ғына баҫа ла: "Мин бындай билмәнде ашамайым, ир кеше ит билмәне ашарға тейеш", - тимәһенме. Шунан аҙаҡ Рауилды ир кеше тип атанылар, ә эремсек билмәне күргән һайын үҙен хәтерләп көләштөк. Был малай бәләкәйҙән үк ирҙең кем икәнлеген һәм нимә ашарға тейешлеген аңғарта түгелме һуң?

### "Колхозники лапшу пили"

Морат менән Ғәзиз беренсе синыфҡа уҡырға бара. Ғәзиз былтырҙан ҡусмәй ултырып ҡалған. Ҡар яуғансы улар уҡырға йөрөй ҙә, аҙаҡ йылға буйына ысҡыналар. Ғәзиз Моратты шунда уҡыта башлай: хәрефтәрҙе ҡарға яҙып күрһәтә, һүҙҙәрҙе яҙҙыра, башҡортсанан урыҫсаға тәржемә яһата. Колхозсыларҙың бесән ваҡыты тураһында: "Колхозники лапшу пили", "Салғы менән сено рубили", - тип өйрәтә. Ун биш көндән был икәүҙе тотоп, мәктәпкә алып баралар. Ғәжәп, икеһе лә уҡый-яҙа, иҫәпләй белә. Ошо ваҡиғанан һуң Ғәзиз - хәлфә, Морат шәкерт ҡушаматы алды. Тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тиҙәр. Малайҙар уйнап та туйҙылар, уҡыуҙы ла алып барҙылар.

### Олатай эсә, атай эсте

Ғәлимйән ағай баҙарҙан ҡайтышлай улдарына һуғыла. Килене өҫтәл әҙерләй, сәйгә ултыралар. Шул мәл ике йәш ярымлыҡ Артур береһе башланған, икенсеһе башланмаған ике ярты килтереп сығара ла: "Олатай, эс, атай ҙа эсә", - тип олатаһына текәлә. Бабай бер килененә, бер шешәгә ҡарап: "Улым һыйлағас, эсмәй булмаҫ", - тип эсә. Ошонан һуң уйлап ҡуйҙым: беҙ, оло-лар, балаларҙы бәләкәйҙән үк "оло ҡунаҡсыллыҡҡа" өйрәтмәйбеҙ микән? Шул уҡ малай ҙурайғас, олатаһы, атаһы менән бергә "ҡунаҡ булмаҫмы"?

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘМӘКЕСЕ,

## һин дә алданма

**➔ Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә составына күрәҙәселәр шалфейы, Гавай раузаһы, зәңгәр лотос ингән ҡатышма һатыу осраҡтары теркәлгән. Белгестәр әйтеүенсә, тартыу өсөн ҡулланылған бындай ҡатышма матдәләре кеше һаулығы өсөн хәүеф тыуҙыра, психотроп һәм наркотик тәьҫиргә эйә.**

Шуға ла Рәсәйҙең баш дәүләт санитар табибы Геннадий Онищенко "Тарта торған ҡатышмалар һатыуҙы күҙәтеүҙе көсәйтеү тураһында" ҡарар ҡабул итте. Унда Рәсәй территорияһында составында алда һанап үтелгән үҫемлектәр булған тарта торған ҡатышмалар әйләнеше тыйылған. БР буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова белдереүенсә, республика территорияһында тарта торған ҡатышмалар менән һатыу иткән 50 юридик шәхес һәм шәхси эшҡыуар тикшерелгән, алты сауҙа объектында төрлө хоҡуҡ боҙоуҙар асыҡланған, туғыҙ административ штраф һалынған, һатыуҙан дөйөм ауырлығы 24,3 килограмм тарта торған ҡатышма алынған. Тикшереү күрһәтеүенсә, ҡайһы бер предприятиеларҙың продукцияның сифаты һәм хәүефһеҙлеге, етештерелеү датаһы, етештереүсе тураһында мәғлүмәт биреүсе документтарһыҙ эшләүе асыҡланған.

**➔ Баш ҡала округы Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин белдереүенсә, Өфө мәктәп туҡланыуы системаһын үҫтереү өсөн грант алыу мөмкинлеге биргән федераль конкурста ҡатнаша аласаҡ.**

Бындай мөмкинлек "2009-2011 йылдарға Өфө ҡала округы дөйөм белем биреү учреждениеларында туҡланыуҙы ойоштороуҙы камиллаштырыу" ҡала маҡсатлы программаһына индерелгән үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Үҙгәрештәргә ярашлы, программаны ҡала, республика бюджеттары һәм бюджеттан тыш сығанаҡтар финанслаясаҡ, 2009-2011 йылдарға был сумма 809,9 миллион һум тәшкил итә. Уларҙың 591,8 миллионын матди-техник базаны нығытыуға тотоноу ҡаралһа, 281,1 миллионы мәктәп уҡыусылары туҡланыуына китәсәк. Был программа күп балалы ғаиләлә тәрбиәләнеүселәрҙе бушлай ашатыу һәм башланғыс синыф уҡыусыларын һөт менән тәьмин итеү, мәктәп ашханаларына ремонт яһау, яңы ҡоролмалар һатып алыу, мәктәптәрҙә эсәр һыу фонтандары ҡуйыу мөмкинлектәре бирә.

**➔ Яңыраҡ Берлинда үткән нанотехнологиялар буйынса "Nanotech Europe - 2009" Халыҡ-ара конференцияһынан билдәле физик-химик, химия фәндәре докторы, профессор Михаил Доломатов етәкселегендәге Өфө делегацияһы еңеү менән ҡайтты.**

Өфө ғалимдарының эше, 50 илдән килгән делегациялар араһында Һиндостан һәм Ирандан ғына ҡалышып, өсөнсө урынды яулай. Улар яңы закон асып, матдә үҙенсәлектәре, мәҫәлән, тығыҙлыҡ йәки молекулаларҙың электрондарҙы биреү һәм ҡушыу үҙенсәлеге матдәнең төҫө менән бәйле булыуын асыҡлаған. Махсус прибор ярҙамында төҫтө үлсәп, уға баһа бирергә була, был асыш нефть табыу, медицина, асторономия һәм башҡа фәндәрҙә ҡулланыла ала. Ғалимдар хатта ҡандың төҫө ярҙамында кешенең сәләмәтме, түгелме икәнлеген бер нисә секунд эсендә асыҡлауға ирешкән.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ



# ОҘАҠ ЙӘШӘҮҘЕҢ СЕРЕ -

## интеллектуаль һәм физик хеҙмәт, имеш

**Үткән юлы беҙ һуңғы 170 йыл эсендә кешеләр оҙағыраҡ йәшәй башлауы һәм ата-бабаларыбыҙға ҡарағанда ике тапҡырға йәшерәк күренеүе һәм бының сәбәбе интеллекттың тиҙ үҫешеүенә бәйле булыуы тураһында бәйән иткәйнек. Был юлы Рәсәй медицина фәндәре академияһы академигы, профессор, Рәсәй геронтология ғилми-клиник үҙәге директоры Владимир ШАБАЛИН ирҙәрҙең ҡартлығы ҡыҙ-ҡатындарҙыҡынан нимәһе менән айырыла, йәшлек элексиры бармы һәм оҙаҡ йәшәүселәрҙең сере нимәлә, тигән һорауҙарға яуап бирә.**

### Һыуһыл ирҙәр

**- Владимир Николаевич, ирҙәр ҡартлығы ҡыҙ-ҡатындарҙыҡынан айырыламы?**

- Әлбиттә. Барыһынан бигерәк, ирҙәр иртәрәк үлә. Бының сәбәбе, әгәр шулай тип атарға мөмкин булһа, ирҙәр һыуһылыраҡтар.

**- Йәғни, улар күберәк эсәме?**

- Юҡ, әлбиттә, эш алкоголдә түгел. Ир-аттың тире туҡымаһында ҡатын-ҡыҙҙыҡына ҡарағанда һыу 20 процентҡа күберәк. Был һыу беҙҙең бөтә йәшәү процесын тәьмин иткән аҡһым молекулаларының тиҙерәк һәм һөҙөмтәлерәк хәрәкәтенә булышлыҡ итә. Ни өсөн ирҙәрҙең реакцияһы тиҙерәк, ни өсөн ул ҡатмарлы ситуациянан сығыу юлын тиҙерәк таба, ни өсөн ул шәберәк йүгерә? Сөнки уның организмында һыу күберәк. Шуға күрә лә ир-аттың йәшәйештәге биологик процестары ҡыҙыуыраҡ үткәс, уның ғүмер оҙайлығы ла 20 процентҡа кәмерәк. Ҡатын-ҡыҙ уртаса 75 йыл, ә ир-егет 60 йыл йәшәй. Әммә былар дөйөм ир затына бирелгән генетик мөмкинлектәр. Ә көслө заттың күпселек вәкилдәре ғүмерҙәрен шул уҡ алкоголь менән ҡыҫҡарта.

### Йәшлек гены юҡ

**Йәшлек гены табылғанда, кешене үлемһеҙ итергә мөмкинме?**

- Кешенең мәңге йәшлеген һәм үлемһеҙлеген тәьмин итеүсе генды эҙләү тәбиғәттә ҡартайыуҙың төп әһәмиәтен тулыһынса аңлап етмәү һөҙөмтәһе ул. Ҡартайыу йәшәү үҫешен тәьмин итә, ҡартайыуҙы туҡтатыу, тимәк, тере тәбиғәттең үҫешен туҡтатыу ул. Йәшлек гены, үлемһеҙлек кеүек төшөнсәләр бары тик фантастика ғына. Кеше геномында табылған 30 мең гендың һәр береһе нисек тә булһа ҡартайыу процесына йоғонто яһай. Сөнки ҡартайыу процесы - ул тормоштоң үҙе. Шуға ла йәшәреүҙең ниндәйҙер тышҡы йәки эске сараларын эҙләү - улар барыһы ла һәр кешенең мәңге йәш ҡалыу, үлемһеҙ булыу теләгенә эйәреү. Кешенең мөһим психик ҡапма-ҡаршылығы шунан ғибәрәт: беҙ үләсәгебеҙҙе белһәк тә, үҙебеҙҙең үлемһеҙ булыуыбыҙға ышанабыҙ. Кеше үҙенең нисек итеп был тормоштан китәсәген күҙ алдына ла килтерә алмай. Шул уҡ ваҡытта уны мин кем, нисек барлыҡҡа килгәнмен һәм ҡайҙа китәсәкмен, тигән һорауҙар ҙа борсой.

**- Ә шулай ҙа бөгөн медицина ниндәй ысулдар менән ғүмер оҙайлығын арттырырға тырыша?**

- Медицина бары тик патологик ҡартайыу менән генә көрәшә. 70 йәшкә еткәндә кешенең ғүмерен ҡыҫҡатыусы бер нисә хроник ауырыу йыйылып китә, бына шул саҡта беҙ был ауырыуҙар һөжүмен туҡтатырға йәки еңеләйтергә тырышып, уның ғүмерен оҙайтып маташабыҙ. Ә ғәҙәти физиологик ҡартайыуҙы, патологияға бирешмәһен өсөн, һаҡларға һәм тәьмин итергә кәрәк.

**- Ә йәшлек элексиры уйлап сығарыласаҡмы?**

- Бер кем дә бер ҡасан да бындай элексирҙы эшләмәйәсәк.

**- Тимәк, беҙгә мәңге йәшлек вәғәҙә итеүсе бөтә медицина препараттары ла реклама хәйләһе булып сығамы?**

- Дөп-дөрөҫ, кешелектең ялҡынлы теләге менән тупаҫ файҙаланыу ғына ул. Ҡайһы саҡта етди тикшеренеүселәр, барыһынан бигерәк авантюристар йә теге, йә был "Макропулос сараһын" тәҡдим итә. Былар шул уҡ "тылсымлы" диеталар, аҙыҡ өҫтәмәләре, хайуандарҙан һәм үҫемлектән алынған геропротекторҙар, гормональ саралар. Әммә уларҙың береһе лә ғүмерҙе оҙайта алмай.

**- Тимәк, ҡартлыҡты туҡтатыуға бер ниндәй ҙә өмөт юҡмы?**

- Элекке замандарҙан кешеләр үлемһеҙлеккә ышанған, әммә был әлегә тиклем тормошҡа ашҡаны юҡ әле. Күп быуаттар һуҙымында бығаса бер кем дә ҡартайыу процесын әкренәйтә алғаны булманы. Киев геронтология институты күрһәткестәре буйынса 1960 йылдарҙа эксперттарҙың 37 проценты XX быуат аҙағына кешенең ҡартайыу тиҙлеген геропротектор препараты ярҙамында әкренәйтеп буласаҡ, тип фаразланы. Ә бөгөн эксперттарҙың 30 проценты ғына 2040 йылға ғүмер оҙайлығын арттырыу мөмкинлегенә юл ҡуя, 70 проценты иһә быны бөтөнләй ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип иҫәпләй.

### Сифаттары ни?

**- Беҙҙә оҙаҡ йәшәүселәр, йәғни 90 йәште үтеүселәр күпме?**

- Оҙаҡ йәшәүсе - ул 90 йәште уҙған кеше. Мәскәү буйынса регистрҙа улар 18 мең тирәһе. 2002 йылда уҙған халыҡ иҫәбен алыу буйынса Рәсәйҙә 470 мең кеше булған. Йәғни, 300 кешегә бер оҙаҡ йәшәүсе тап килә. Йөҙ йәшлектәр беҙҙә 7-8 мең тирәһе, йәғни 20 меңгә бер кеше тура килә. Сит илдәр менән сағыштырғанда, беҙ Европа илдәренән ҡалышмайбыҙ, ә бына АҠШ бер аҙ алдараҡ бара.

**- Оҙаҡ йәшәүселәр бүтәндәрҙән нимәһе менән айырыла?**

- Уларҙа бер ниндәй ҙә биологик айырмалар табылмаған. Оҙаҡ йәшәүселәр һәр нәмәлә сама белеү, тыныс холоҡло, аралашыусан һәм яҡын кешеләрен яратыуы менән айырылып тора. Уларҙың төп һыҙаты - даими интеллектуаль һәм физик хеҙмәт.

**- Күбеһенсә улар ниндәй һөнәр эйәләре?**

- Һөнәрҙәр төрлө. Бөтә оҙаҡ йәшәүселәрҙең дә юғары интеллект менән айырылып тороуын ғына һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем.

**- Аҡыллы булып тыуалармы, әллә уҡып аҡыл туплайҙармы?**

- XIX быуат урталарында - аҙағындағы Рәсәй Фәндәр академияһы буйынса күрһәткестәр бар. Ул ваҡытта академиктар араһында уртаса ғүмер оҙайлығы 75-78 йәш булған. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың уртаса ғүмер оҙайлығы 35 йәште күрһәтә. Хәҙер ҙә академиктар оҙағыраҡ йәшәй. Был нимә тураһында һөйләй? Бәлки, тәбиғәт һәм генетика шулай итеп ҡушҡандыр: кем йәмғиәткә интеллектуаль яҡтан күберәк файҙа бирә ала, шул оҙағыраҡ йәшәй.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Тормош - ул миллиардлаған төрлө процестарҙан тора. Уларҙың һәр береһе кешегә ыңғай йәки кире йоғонто яһай ала. Тупаҫ тайпылыштар прогерияларға, йәғни организмдың ваҡытынан алда ҡартайыуына, йәки сирҙәргә килтерә. Кеше бит был донъянан ҡартайғанға түгел, ауырығанға китә. Донъяла бер генә кеше лә физиологик ҡартайыуҙан үлмәгән.**

*✓ Бер нисек тә ыҡҡа килмәҫтәй хәлгә еткән эскеселәрҙе лә шул тау үренә табан ҡыуырға ине лә, үҙ асылдарына тәбиғи булмыштарының юғары нөктәһенән ҡаратырға ине. Тау үрендә үкереп-үкереп илап, тәүбәгә килерҙәр ине.*

ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН ҠОТОЛОП БУЛА



## 20-се һабаҡ: "Ауырлыҡ", бер үк ваҡытта кешене ер аҫтына тартыусы йөк тә...

Үткән һанда йүгереүҙең "икенсе йөрәк" ролен үтәүе хаҡында белдек. Кеше йүгереп барған саҡта туҡтауһыҙ хәрәкәттә булған аяҡ-ҡулдары һәм башҡа тән өлөштәре ҡан әйләнеше эшмәкәрлеген тәьмин итер өсөн йөрәккә ярҙамға килә, булышлыҡ итә, тинек. Был хәлде шулай уҡ мисәп ат егеү менән дә сағыштырырға була. Йөрәк - төпкә егелгән ат, йүгереү - мисәүҙәге яндау аты. Был осраҡта йөк ауырлығы ике атҡа бүленеп һалына. Тәүҙә төпкә егелгән ат йөктө тартып бара ла, аҙаҡ мисәүҙәгеһе ярҙам итә башлай. Төп ат ылдым ғына юрта башлай ҙа, йөк ауырлығы яндау атына төшә.

Көсөргәнешһеҙ генә йүгереүҙе халыҡта өлкөлдәп елеү, һәлпәнләп йүгереү тип тә атайҙар. Йүгергән кеше бер хәлде яҡшы аңлай булыр: тын алышын йөрәк тибешенә тап килтереп йүгерә башлауы, ҡыҙып китеүе генә иң ауыры...

Ярай, һеҙ үҙ-үҙегеҙҙе һәм ялҡаулығығыҙҙы еңеп, йүгереп киттегеҙ, ти. Ике-өс саҡрым самаһы ара үткәнгә тиклем дә йүгереү ихтыяр көсө һәм ныҡышмалылыҡ талап итә әле. Бына инде дүртенсе саҡрымды ваҡларға тотонғанда тын алышы еңелләшә, аяҡтарың үҙенән-үҙе йүгерергә керешә. Ихтыяр көсө һәм ныҡышмалылыҡ артҡы планға күсә башлай. Был ваҡытта тәнең һәм йәнең һис ҡасан кисермәгән ләззәт, рәхәтлек, еңеллек һәм ирәүәнлек тоя. Был ни өсөн шулай тип уйлайһығыҙ? Тап өҫтөнә баҫтығыҙ: тап ошо ваҡытта һеҙҙең мисәүҙәге атығыҙ йөктө һөйрәй башлай, йәғни икенсе йөрәгегеҙ хәрәкәткә килә. Шуға күрә лә талымһыҙ һәм ҡурҡыу белмәҫ кешеләрҙе **ҡуш йөрәкле** тип әйтәләрҙер. Һәр хәлдә, халыҡ белмәй әйтмәҫ. Шулай уҡ ат ҡушарлап яу сабыу ират өсөн оло мәртәбә, дәрәжә билдәһе булып һаналған. "Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр" тигән мәҡәлдә лә "ат" һәм "йөрәк" һүҙҙәре йәнәшә ҡуйыла һәм уларға бер үк мәғәнә һалына.

Шулай итеп, һеҙ оло ләззәт менән йүгереп бараһығыҙ. Һис тә туҡтағығыҙ килмәй, йөрәгегеҙгә ярҙам итеүсе көстәрҙе уята алыуығыҙ һөҙөмтәһен, йәғни үҙегеҙҙең ихтыяр көсө, ныҡышмалылыҡ арҡаһында ирешелгән уңышҡа ҡыуанып-шатланып юртаһығыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, ихтыяр һәм ныҡышмалылыҡ һөҙөмтәһен рәхәтләнеп татыйһығыҙ. Файҙаһын туранан-тура күрәһегеҙ, тояһығыҙ. Ҡөҙрәт-ҡеүәтегеҙ арта барыуы һеҙҙе илһамландыра, ҡанатландыра.

Бик оҙаҡ ҡына йүгереп, хәтһеҙ генә ара үтеүгә, туҡталаһығыҙ... Һәм нимә? Эйе, тәнегеҙҙә һәм йәнегеҙҙә, һис ҡасан булмағандай, еңеллек тояһығыҙ. Ниндәйҙер ауырлыҡтан бушаныуығыҙҙы йәнегеҙ-тәнегеҙ менән һиҙәһегеҙ. Ә бына йүгергәндә юлда һибелеп-сәселеп ҡалған **ауырлыҡты** һеҙ нимә тип аңлар инегеҙ? Ысынлап та, һеҙҙән һыпырылып төшкән массаны нимә тәшкил итә? Уның йөкмәткеһе, мәғәнәһе ниндәй? Ни өсөн ләззәт менән йүгереп туҡталғандан һуң йәнегеҙ һәм тәнегеҙ осош тойғоһо кисерә лә, күңелегеҙҙә тик изге тойғолар ғына тороп ҡала? Ни өсөн бар донъя тик илаһи нурҙарҙан ғына туҡылған кеүек тә, донъяла яуызлыҡ юҡҡа сыҡҡан кеүек...

Шул-шул... Тап ошо мәлдә һеҙҙең мейегеҙҙең әүҙем өлөшө эшләүҙән туҡтай ҙа, түбәнге аңығыҙҙағы бәхетле миҙгелдәрегеҙ һынлана башлай. Иң тәүҙә сафтан-саф, күңелле бәхетле бала саҡ хәтирәләрегеҙ, тормошоғоҙҙоң иң самими мәлдәре уяна. Уяна ла һеҙҙә **үҙеңде бәхетле итеп тойоу** хисен барлыҡҡа килтерә. Ә үҙен бәхетле тойған кеше ниндәй була? Уның ҡаршыһында торған һәр бер ауырлыҡ, кәртә үҙенән-үҙе юҡҡа сыға, ул һәр саҡта ла үҙ-үҙен һәм тормошондағы барлыҡ ауырлыҡтарҙы йырып сыға алыусы **еңеүсегә** әүерелә. Ошондай бәхетле миҙгелдәрҙе көн һайын һәм ғүмер буйы кисерер өсөн нимә эшләргә кәрәк? Афарин! Ғүмер буйы йүгерергә кәрәк. Ғүмер буйы йүгергән кеше ғүмер буйы еңеүсе лә...

Йүгергән саҡта юлда һыпырылып төшөп ҡалған ауырлыҡтың йөкмәткеһенә килгәндә, минеңсә, улар - һинең барлыҡ кире сифаттарың, һиңә бәхетле йәшәргә ҡамасаулаусы холҡоң. Ошо ерҙә 21-се һанда баҫылған "Холоҡ - оло юл..." тигән яҙманы иҫкә төшөрәйек. Унда көн һайын йүгереүҙе - ғәмәл, айҙар, йылдар буйы йүгереүҙе - ҡылыҡ, ғәҙәт, ғүмер буйы йүгереүҙе холоҡ тип атағайныҡ. Хәҙер инде ошоно йүгереп туҡталғандан һуң үҙеңде бәхетле тойоу әмәленә тап килтереп ҡарайыҡ. Тимәк, көн һайын үҙен бәхетле тойған кешенең был сифаты ғәмәл, ҡылыҡ һәм ғәҙәт булыуҙан уҙып, холҡона әүерелә. Тимәк, бәхетле булыуың - холҡоң булып сыға был осраҡта. Ҡыҙыҡ бит: һин холҡоң буйынса **бәхетле кеше**...

Эсеүҙән ҡотолоу өсөн был бәхетте татыуҙың ниндәй ярҙамы бар һуң, тип һорайһығыҙ инде? Бар шул: бая юлда төшөп ҡалған ауырлыҡ менән бергә һеҙҙе эсергә мәжбүр итеүсе барлыҡ сәбәп-һылтауҙар ҙа төшөп ҡала. Был беренсенән булһа, икенсенән, һеҙ ҙур кинәнес менән йүгереүҙән туҡталғандан һуң - эсмәһәгеҙ ҙә, иҫерек кешеләй, юғары күңел күтәренкелеге кисерәһегеҙ ҙә һәм бында спиртлы эсемлектең кәрәге лә ҡалмай. Йәғни ошо юл менән иҫерткес эсемлеккә өйрәнгән организмығыҙҙы алдайһығыҙ. Ябай итеп әйткәндә, йүгереүҙән тыуған күңел рәхәтлегенә араҡыны **алмаштыраһығыҙ**! Бер-ике көн йүгермәй торһағыҙ, баяғы "үҙегеҙҙе бәхетле итеп тойоу" һыуһынының тағы ла араҡы таптыра башлауы бар. Һығымта: **бәхетле булыу танһығын йүгереп ҡандырығыҙ!** Сөнки күп һанлы тикшеренеүҙәр "кеше үҙен бер-ике сәғәткә, көнгә булһа ла бәхетле итеп тойоу өсөн дә араҡы эсә" тигәнде күптән раҫланы инде.

Хәҙер ауырлыҡ хаҡында. Кешенең ауырлығы уның буй оҙонлоғонон һуңғы ике һанына тап килергә тейеш, тиҙәр физиологтар. Әйтәйек, минең буйым 177 сантиметр икән, ауырлығым - 77 килограмм булырға тейеш. Әгәр ҙә кеше үҙ нормаһынан ауырыраҡ тарта икән, ул ауырлыҡ уны ер аҫтына тартыусы артыҡ йөк кенә. Ул йөк ни тиклем ауырыраҡ булһа, тимәк, кеше ҡәбергә лә тиҙерәк инә тигәнде аңлата. Миҫал өсөн, Америкала һәр өсөнсө кеше артыҡ ауырлыҡ сире менән яфалanһа, уларҙың икәүһе тап ошо сир арҡаһында яҡты донъя менән хушлаша. Йүгереү кешенең ауырлығын уның буйы менән тигеҙләүсе сара ғына түгел, ул - йән һәм тән ауырлығы гармонияһын булдырыусы сара ла, минеңсә.

Ышанмаһағыҙ, ҡыҙыҡ өсөн тау үренә табан йүгереп менеп ҡарағыҙ әле. Тау үренә менеп баҫҡас, тау түбәнендәге йән һәм тән торошон сағыштырығыҙ. Нимә тойорһоғоҙ һуң унда? Тау үрендә йәнегеҙ менән тәнегеҙ бергә ҡушыла, тормошоғоҙҙағы барлыҡ ауырлыҡтар, сиселмәҫ булып тойолған мәсьәләләр, йәшәйеш проблемалары үтә ваҡка, мәғәнәһеҙгә әүерелә. Бер үк ваҡытта үҙегеҙҙең барлыҡ кире сифаттарығыҙ ҙа тау үрендә мәғәнәһеҙ булып ятып ҡала. Һеҙ үҙегеҙ ҙә үҙлегегеҙҙән күпкә юғарыраҡ күтәреләһегеҙ һәм үҙ асылығыҙға тәбиғи мөмкинлектәрегеҙҙең иң юғары баҫҡысынан тороп ҡарай алаһығыҙ тау үрендә. Бына ни өсөн элек халҡыбыҙҙа тәрән ҡайғыға ҡалған кешене тау үренә табан мәжбүр итеп йүгерткәндәр икән.

Бер нисек тә ыҡҡа килмәҫтәй хәлгә еткән эскеселәрҙе лә шул тау үренә табан ҡыуырға ине лә, үҙ асылдарына тәбиғи булмыштарының юғары нөктәһенән ҡаратырға ине. Тау үрендә үкереп-үкереп илап, тәүбәгә килерҙәр ине.

Суфыйсылыҡ мәктәбендә лә ошоға оҡшаш һынау булған. Унда иһә буласаҡ суфыйҙы ҡараңғы баҙға ябып, ҡырҡ көн буйына ашатмайынса, йоҡлатмайынса, туҡтауһыҙ хәрәкәт яһатҡандар. Хәйер, был хаҡта алдағы һанда һөйләшербеҙ...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Күңел ҡушҡан эшеңде тап

Үҫмер саҡтан етди йәшкә күсеү һәр ваҡыт төрлө кисерештәрҙән тыуған стрестар менән тулы була. Шул саҡта үҙеңде элеккегә ҡарағанда иреклерәк итеп тоя башлайһың һәм шуның менән бер рәттән, үҙ өҫтөңә әлегә еңелдән булмаған яуаплылыҡ алыуыңды ла аңлайһың. Атай-әсәйең һине мәңге аҫрап ултырмаясағы һәм шуға күрә тормошта ниндәй ҙә булһа етди эш менән шөғөлләнеү кәрәклеге асыҡлана.

Хәҙер инде алдыңа артабанғы тормош йүнәлешен хәл итәсәк уҡыу йортон һәм хеҙмәт карьераһын һайлау мәсьәләһе килеп баҫа. Бәлки, һин тиҙ арала уңышҡа һәм байлыҡҡа илтеүсе абруйлы уҡыу йортона уҡырға инергә кәрәк, тип иҫәпләрһең. Йәки, был мәьсәләне атай-әсәй ҡарамағына тапшырырға кәрәк, тип уйлауың да ихтимал. Әммә ҡарар ҡабул итеүҙән баш тартыу йәки был эште бүтәндәргә тапшырыу һиндә ҙур стресс тыуҙырыуы ихтимал.

"Профессия" һүҙе "саҡырыу" тигән латин тамырынан килеп сыҡҡан. Йәғни һин һайлаған һөнәр унда үҙеңде таба алыуың, хеҙмәтең аша кешеләргә һөйөү бүләк итеү мөмкинлегенә эйә булыуың менән күңел саҡырыуы, булмыш булып тора. Ысын мәғәнәһендәге мөхәббәт - теләһә ҡайһы һөнәрҙә лә уңыш ҡаҙаныу аҫҡысы булып тора. Ул һәр кешенең бүтәндәр менән уртаҡлаша алырҙай шәхси һәләттәрен аса. Калил Гибран "Бәйғәмбәр" тигән китабында "Эш - ул билдәле булған мөхәббәт", - тип яҙа. Һәр уйлап табыуҙар һәм сәнғәт әҫәрҙәре һөйөүҙән башлана. Ағалы-ҡустылы Райттарҙың осоу идеяһына булған һөйөүе тәүге самолетты барлыҡҡа килтергән. Карьераны дөрөҫ һайлау үҙеңә һәм башҡаларға ла мөхәббәтеңде белдерергә ярҙам итә ала. Был шәхси килемгә генә эйә булыуҙан күпкә юғарыраҡ наградалар алып килеүсе бөтә тормош эше булып тороуы ихтимал.

Әммә үҙ эшеңде, йәғни ғүмерлек һөнәреңде колледждар каталогында таба аласаҡһың, йәки һин эшкә урынлашҡан компания һиңә идеаль урын әҙерләп ҡуясаҡ, тип көтөргә ярамай. Күңел ҡушҡан эш кадрҙар бүлегендә таратылмай, ул бер нәмәгә лә оҡшамаған рәүештә һәр кемебеҙҙең эске донъяһында барлыҡҡа килә. Һөнәр хеҙмәт хаҡын үҙ эсенә алған эш сәғәттәренән дә тормай, ул, моғайын, һинең был донъяға бүләк итә алырҙай һәләттәреңдең ҡиммәтле әүҙемлегелер ҙә ул. Файҙа килтерә алырҙай һәр хеҙмәт - ул үҙенә күрә изге ғәмәл.

Ағалы-ҡустылы Райттарҙың иҫ киткес хыялы булған һәм улар уны тормошҡа ашырыу өсөн ҙур тырышлыҡ һалған. Әгәр ҙә һин артҡа сигенмәйенсә, үҙеңдең күңел ҡушҡан һөнәреңә табан бараһың, хыялланырға ҡурҡмайһың һәм һәләттәреңде тулыһынса ҡулланаһың икән, үҙ эшеңдә юғары бейеклектәргә өлгәшә аласаҡһың.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*АФАРИН!*

# ҠУРАЙЫ БАРҘЫҢ - ТЫНЫ БАР,

## тыны барҙың - өнө бар...

**29 октябрҙә Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында Башҡортостан ҡурайсылар союзы Өфө ҡала округы хакимиәте менән берлектә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге II Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсын үткәрҙе. 30 октябрҙә иһә Ҡала мәҙәниәт һарайында бәйгелә еңеүселәрҙең Гала концерты булып уҙҙы. Ҡурайсылар бәйгеһен ойоштороусыларҙың, унда ҡатнашыусыларҙың, тамаша ҡылыусыларҙың һәр береһе, моғайын, үҙенең алдына шундай һорауҙар ҡуйғандыр: "Быйылғы бәйге былтырғыһынан ни яғы менән айырыла? Конкурста ҡатнашыусыларҙың оҫталығын тағы ла арттырыу, бәйгене тағы ла зауыҡлыраҡ итеү өсөн нимәләргә иғтибарҙы арттырырға кәрәк?".**

### Моңдо нотаға һалып булмай...

Былтырғы конкурста ҡатнашып, махсус призға лайыҡ булыусы, Өфөнөң Әҙеһәм Исҡужин исемендәге 9-сы һанлы музыка мәктәбе директоры Әхиәт Ғәйетбаев быйылғы бәйгелә жюри ағзаһы булараҡ ҡатнашты. Ул үҙенең бәйге хаҡындағы фекерҙәрен түбәндәгесә белдерҙе:

- Былтырғыға ҡарағанда быйылғы конкурс ойошҡаныраҡ үтте. Шуныһы мөһим: бәйгеселәр һәр йәһәттән үҫеш юлында. Мин бында бер юлы ҡурайҙа уйнау һәм йырлау шарты булған конкурстың бер нисә өҫтөнлөгөн әйтеп үтер инем. Ул да булһа: йырсы - ҡурайсының, йыр конкурстарындағы кеүек, тауыш күрһәтергә ынтылыуҙан алыҫыраҡ тороуы. Тының ниндәй булһа, тауышың да шулай бит инде. Тауыш күрһәтергә ынтылдыңмы, тональностан ситкә сығаһың да китәһең. "Ҡурайы барҙың - тыны бар, тыны барҙың - өнө бар", тиҙәр халыҡта. Шуның кеүек, бындай бәйгелә моңоң булмаһа, моңһоҙлоғоңдо тауыш мөмкинлеге менән генә ҡаплап булмай. Моң бит инде кешелә йә була ла, йә юҡ. Хет һинең әллә ниндәй сәсрәп торған тауышың булһын, донъя сәхнәләрендә операларҙы иң юғары кимәлдә башҡарып йөрө, моңо булмаған кеше башҡорт халыҡ йырҙарын башҡара алмаясаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, быйылғы бәйгелә лә тауыш күрһәтеүгә тырышыуҙар булды. "Әтәс" тәр ҙә осоп киткеләне. Ҡурайҙа уйнауҙы ла, йырлауҙы ла - икеһен дә юғары кимәлдә башҡарыу, бәлки, мөмкин дә түгелдер. Күп осраҡта уларҙың береһе һәр саҡ ҡайтышыраҡ килеп сығыусан. Шуға күрә беҙ, жюри ағзалары, асылда, халыҡсан башҡарылышҡа иғтибар итергә тырыштыҡ.

Бәйгелә һәр төрлө ҡурайсылар конкурстарында лауреат булған, Гран-приҙар яулаған ҡурайсылар ҙа һынау тотто. Улар бәйгегә үҙҙәренсә ҙур ышаныс менән килеп, фәҡәт йыр арҡаһында Гала концертҡа үтмәй тороп ҡалды. Минеңсә, был конкурстың төп әһәмиәте шунда: унда ҡатнашыусы ҡурайсы халыҡсан башҡарылыштың әһәмиәтен бар тулылығында аңларға тейештер. Тауыш күрһәтергә ынтылыу менән бындай конкурста бер нәмәгә лә ирешеп булмаясағы көн кеүек асыҡ. Был конкурста шулай уҡ профессиональ вокал күрһәтергә тырышыу бик үк батып бөтмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, моңдо нотаға һалып булмаған кеүек, моңоң булмаһа, халыҡ йырҙарын башҡарып та булмай. Мине бер нәмә аптырата: төрлө вокаль конкурстарҙа йырсы, теноры ул, баритонмы, уның тауыш таҙалығы, ноталарҙы дөрөҫ итеп ритмлы башҡарыуы ғына беренсе урынға ҡуйыла, уның моңона, тыңлаусыларға нисек тәьҫир итеүенә, йоғонтоһына бөтөнләй иғтибар бирелмәй. Ә был бәйгелә ошоноң нәҡ киреһе. Шулай уҡ конкурста моңло итеп йырлай белеп тә, ҡурайҙа уйнай алмаусылар ҙа төшөп ҡалды. Йомғаҡлап әйткәндә, Әҙеһәм Исҡужин исемендәге был конкурс һәр йәһәттән сәнғәттең халыҡсанлығына һынау булараҡ, сәнғәтебеҙҙә өр-яңы күренеш булып тора. Үҙем былтыр ҡатнашҡан кеше булараҡ, шуны әйтәм: был конкурста лауреат урындарына дәғүә итеүе бик ауыр.

Конкурста мин Камил Илембәтов башҡарыуында "Шәмшәриф", Әсҡәт Хәйернуров башҡарыуында "Ямантау" йырҙарын төүге тапҡыр тыңланым һәм ошо йәһәттән алдағы йылдарҙа ошо конкурсты үткәргәндә һирәк ишетелгән ошондай йырҙарҙы башҡарыуға айырым иғтибар биреп, конкурс үткәреү шартында бындай йырҙарҙы башҡарыусыларҙы айырым билдәләп үтергә кәрәктер, тип иҫәпләйем.



### Тулҡынландырғыс мәлдәр

Конкурс барған ике көн һуҙымында тулҡынландырғыс мәлдәр бик күп булды. Былар барыһы ла Әҙеһәм Исҡужин шәхесенә бәйле. "Польша яҙыусыһы Ежи Лец: "Үлгәндән һуң йәшәүе еңел түгел, сөнки бының өсөн бөтә ғүмереңде сарыф итергә кәрәк", - тигән. Әҙеһәм Исҡужин хаҡында иҫтәлектәр китабы эшләгәндә ошо һүҙҙәр һәр ваҡыт хәтеремдә торҙо", - тип башлап китте үҙенең сығышын конкурс сиктәрендә үткән "Әҙеһәм Исҡужин" китабының исем туйында баҫманың мөхәррире Фәниҙә Исхакова. Исем туйында шулай уҡ китапты төҙөүселәр, Әҙеһәм Исҡужиндың шәкерттәре Юлай Ғәйнетдинов менән Фәнил Ҡоҙаҡаев сығыш яһаны.

-Әҙеһәм Исҡужиндың ошо китабы өҫтөндә эшләгәндә мин әллә нисәмә тапҡыр иланым. Сөнки ундағы һәр нәмәне күңел, йөрәк аша үткәрергә тура килде. Мин уны тыуған сағымдан алып беләм, тип әйтә алам. Әсәйемдең ике туған ҡустыһы ул. Хәрби осоусы булған сағында беҙгә килеп, ҡурай уйнауҙары, йырлауҙары йөрәгемә һеңгән. Уның үҙ тормошонда күргәндәре, аяуһыҙ яҙмышҡа дусар булыуы, ниндәй һынауҙар аша үтеүе хаҡында электән белә инем. Ҡат-ҡат быларҙы кисереп илағайным. Әле килеп, тағы ла ошоларҙы яңынан кисереп, тағы ла иланым. Ә китапҡа килгәндә, уны бик йөкмәткеле, рухлы китап тип шикләнмәй әйтә алам. Был китапта кемдәр хәтирә яҙған, улар Әҙеһәм ағайҙы аңлаған һәм яҡын күргән кешеләр, рухташтары, моңдаштары улар. Китапты әҙерләүе ауыр ҙа, еңел дә булды. Халыҡ уны шул тиклем яратҡанын да тойҙоҡ. Китапҡа ҡушымта булып ингән компакт дискыны сығарыуҙа Әҙеһәм ағайҙың уҡыусыһы Әкрәм Алдаров финанс ярҙамы күрһәтте. Уға ла ҙур рәхмәтлебеҙ. Компакт дискыла Әҙеһәм ағай үҙе йырлаған "Буранбай", "Тәфтиләү", "Һыр", "Зәйнулла", "Ҡолой кантон" йырҙары, уҡыусылары Азат Айытҡолов, Юлай Ғәйнетдинов, Роберт Юлдашев уйнаған ҡурай яҙмалары тупланған. Ҡурайсыларҙы мин "Әҙеһәм ҡурайы" тигән китап сығыу менән ҡотлайым. Беҙ бына ошолай итеп үҙебеҙҙең шәхестәребеҙҙе күтәреп йәшәргә тейешбеҙ," - тине конкурстың жюри рәйесе Юлай Ғәйнетдинов.

Конкурс лауреаты Хәйбулла районы Әбеш ауылы ир-уҙаманы Камил Илембәтов бындай сараларҙан бер ваҡытта ла ситтә ҡалмай. Унан конкурс хаҡында фекерҙәрен әйтеүен һораныҡ.

-Конкурс юғары кимәлдә үтте. Ҡурайсылар шул хәтлем үҫкән. Бигерәк тә Өфөлә йәшәүсе балаларҙың көслө, матур итеп ҡурайҙа уйнауы - бик ыңғай күренеш. Конкурстың географияһы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышына табан киңәйә барыуы ла ҡыуандыра. Был йәһәттән Асҡын, Ҡариҙел, Нуриман, Дүртөйлө, Туймазы яҡтарынан балаларҙың һәм егеттәрҙең бәйгелә ҡатнашыуын һәр йәһәттән хупларға ғына кәрәк. Йырҙарҙың һүҙҙәрен бутаусылар ҙа бар. Ундайҙар, күрәһең, "мөңрәһәң, көйләһәң булды, һүҙҙәре уның мөһим түгел", тип яңылыша. Төптө хата фекер. Башҡорт йырының фәлсәфәүи асылы уның моң йөкмәткеһендә лә, шиғырында ла берҙәй үк сағыла. Конкурс шартында төбәк йырҙарын башҡарыу ҙа ҡаралған. Был юлы инде "Ҡаһым түрә", "Сәлимәкәй" йырҙары күберәк яңғыраны. Алдағы йылдарҙа һирәк башҡарылған төбәк йырҙарын да күберәк ишетке килә, - тине ул конкурсҡа үҙ баһаһын биреп.

Тулҡынландырғыс мәлдәр тигәндән, улар һәр сығышта ла булғандыр. Сәхнәгә сығып, абруйлы жюри алдында сығыш яһаусы һәр ҡатнашыусы бындай тойғоно кисермәй буламы инде? Башҡорт кешеһе өсөн үҙ-үҙеңә һынауҙың ошонан да ҙурырағы бармы икән? Былтырғы конкурста жюри ағзаһы, Әҙеһәм Исҡужиндың уҡыусыһы Зыя Хәлилов, һәр ваҡыттағыса, төрлө ҡыҙыҡтар һөйләп, халыҡты көлдөрөп йөрөгәйне. Иҫән булһа, быйыл ул мотлаҡ илар ине: улы Салауаттың "Шәүрә килен"де йырлап, конкурста 1-се урынды алыуын күреп, ғорурланып...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әҙеһәм Исҡужин исемендәге II Асыҡ ҡала конкурсында еңеүселәр түбәндәгесә билдәләнде:**

**3-сө дәрәжәле лауреаттар: Эйнар Тимеров (Өфө), Азат Хазиев (Дүртөйлө), Рәмил Дауытов (Хәйбулла), Юнир Һағынбаев (Өфө), Фәнил Кинйәғолов (Ғафури), Камил Илембәтов (Хәйбулла).**

**2-се дәрәжәле лауреаттар: Альберт Лотфуллин (Туймазы), Арыҫлан Оморҙаҡов (Әбйәлил), Йәмил Үтәбаев (Сибай), Әсҡәт Хәйернуров (Белорет).**

**1-се дәрәжәле лауреаттар: Фәнил Баязитов (Өфө), Салауат Хәлилов (Күмертау).**

**Гран-при: Илшат Солтангәрәев (Өфө), (һүрәттә).**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 ноябрҙә** 19.00 сәғәттә **"Ҡоҙаса"** музыкаль комедияһы.

**8 ноябрҙә** 19.00 сәғәттә **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы

**10 ноябрҙә** 19.00 сәғәттә **"Әй, әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** комедияһы.

**11 ноябрҙә** 16.00 сәғәттә **"Урал батыр"** драмаһы.

**12 ноябрҙә** 10.00 һәм 12.00 сәғәттә балалар өсөн **"Серле көршәк"** хикәйәте һәм 19.00 сәғәттә **"Кәкүк ояһы"** спектакле

**13 ноябрҙә** Мостай Кәрим повесы буйынса **"Ауыл адвокаттары"** спектакле премьераһы

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 ноябрҙә** киске 18.00 сәғәттә **"Алты ҡыҙға бер кейәү"** комедияһы.

**12 ноябрҙә** киске 19.00 сәғәттә Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ" әҫәре буйынса **"Донъяның ярҙары икәү"** спектакле.

**13 ноябрҙә** 11.00 сәғәттә балалар өсөн **"Кәлиф аист"** әкиәте һәм 19.00 сәғәттә **"Студенттар"** лирик комедияһы.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ноябрҙә** киске 17.00 сәғәттә Пермь өлкәһе башҡорттары менән осрашыу кисәһе үткәрелә. Программала төрлө күргәҙмәләр һәм концерт.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ БАЛЫН МАҠТАП...

## йырлаһаң да була шул



**Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы быйылғы ижад миҙгелен юғары кимәлдәге сағыу тамашалары менән башлап ебәрҙе. Яңы миҙгелде асып, ҡурайға арналған матур байрам менән һөйөндөргәйне, күптән түгел "Далан" фольклор-эстрада төркөмө баш ҡала тамашасыһына "Башҡорт балы" тигән өр-яңы концерт программаһы бүләк итте. Халыҡтың ихлас ҡабул итеүен күреп, бөгөн тап ошондай айырым тематикаға ҡоролған тамашалар отошло һәм уңышлы килеп сыға, тигән һығымтаға киленде.**

Хәҙер күп башҡарыусылар, продюсерҙар "Халыҡты ябай программа менән генә алдырып булмай, уны аптыратырлыҡ яңылыҡ уйлап табырға кәрәк", тигәндән сығып, төрлө шаушыуға ҡоролған шоу-программалар уҙғарыуға ғәҙәтләнеп китте. Миңә ҡалһа, ниндәй генә шаҡҡатыризм уйлап тапма, әгәр ул тамашасы күңеленә йоҡмай икән, бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Тамашасы күңеленә юлды унын булмышына хас сығыш менән генә табып булалыр. Әлеге концертта быға тағы ла бер тапҡыр шаһит булдыҡ. Йыр-моң ниндәй генә жанрҙа, стилдә башҡарылмаһын, хатта сит телдә яңғырағандары ла, һәммәһе лә ысын мәғәнәһендә күңелдәргә балдай яғылып торҙо. Быны тамаша үҙәгенә башҡорт донъяһы, башҡорт рухиәте һалыныуы менән аңлатып булалыр.

Тамашасы иһә, концертты ихлас ҡабул итеүҙән тыш, унда алынған тәьҫораттарын түгергә ашыҡты. Әле тәнәфес ваҡытында, әле тамаша һуңында бер-береһе менән фекер уртаҡлашты. Олпат-олпат ағайҙарҙың, гүзәл ханымдарҙың: "Халҡыбыҙҙы ҙурлаған, баһаһын күтәргән, данын арттырған концерт", "Программаның идеяһы бик үҙенсәлекле уйлап табылған", тигән фекерҙәре әле бында, әле тегендә ишетелде. Бигерәк тә хайран ҡалдырғаны -башҡорт балына арналған йырҙарҙың күплеге булғандыр.

"Бөгөн башҡорт балын бик күп илдәрҙә беләләр, ҡулланалар. Ул Башҡортостан мөғжизәһе булараҡ, матбуғат саралары аша киң яҡтыртылды. Башҡорт балы данын йырбейеү аша күрһәтеү идеяһы күптән тыуғайны һәм ижади әҙерлек эштәре алып барылғайны, бына, ниһайәт, уны халыҡ алдына сығарырға насип булды. Был программа өсөн махсус рәүештә йырҙар яҙҙырҙыҡ, Артур Туҡтағолов үҙе лә ижад итте", - тине концертты сәхнәләштереүсе Башҡорт дәүләт филармонияһы режиссеры Салауат Итбаев.

Мәғәнәүи яҡтан тәрән йөкмәткеле булған, ижади яҡтан сағыу балҡыш алған был концерт программаһының, ысынлап та, ныҡлы уйланылғанлығы күренеп тора ине. Башҡорт балына арналған концерттың төп идеяһы йырбейеү менән бер-береһенә үрелеп барып, фәһемле лә, мауыҡтырғыс та, рухлы һәм дәртле лә булыуы менән тамашасы күңелендә уйылып ҡалғандыр. Юҡҡамы ни: "Ошондай бай эстәлекле концерттар йышыраҡ булһын ине", - тигән теләк-тәҡдимдәр ҙә яңғырамай ҡалманы.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Артур ТУҠТАҒОЛОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:**

- Режиссерыбыҙ Салауат Итбаев башҡорт балына арналған концерт программаһы эшләргә тәҡдим иткәс, ҡыуанып ҡабул иттем. Беҙҙең күпселек гастролдәребеҙ сит өлкәләрҙә, күрше республикаларҙа үтә. Элек тә унда йәшәгән милләттәштәребеҙ беҙҙең рухлы йырҙарыбыҙҙы, дәртле бейеүҙәребеҙҙе йылы ямғыр кеүек күтәп алып, тыуған яҡ моңона сарсаған күңелдәрен баҫалар ине. Хәҙер иһә, уларҙы халҡыбыҙҙың милли милке булған башҡорт балы тураһындағы сығыштарыбыҙ менән һөйөндөрә, башҡорт балы данын йырҙарыбыҙ аша арттыра алаcаҡбыҙ. Миңә ҡалһа, был концерт программабыҙ тәғәйен бер теманы яҡтыртыуы менән дә тамашасы күңеленә нығыраҡ үтеп инде шикелле. Киләһе программаларыбыҙҙы төҙөгән саҡта беҙ ошоно мотлаҡ күҙ уңында тоторбоҙ, тип уйлайым.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

***Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге был концертҡа әүҙем ҡушылып, уны ысын байрамға әүерелдерҙе. Тамашасыларҙы сәк-сәк менән һыйланы, тәнәфес ваҡытында тауаҡорт, бал продукцияһынан әҙерләнгән тауарҙарҙы һатыу ойошторҙо, ә концерт һуңында артистарға сәскә гөлләмәләре тапшырҙы.***

**Әмир ИШЕМҒОЛОВ, Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры:**

- Быға тиклем башҡорт балының шифаһын, умартасылыҡтың кешенең социаль тормошонда ниндәй иҡтисади роль уйнауын (белеүебеҙсә, умартасы һәр ваҡыт етеш йәшәгән), баҫма матбуғат, телеэкрандар, радио аша ғына халыҡҡа алып барып еткерергә тырыша инек. Был концерт программаһы иһә башҡорт балының данын һәм файҙаһын халыҡ күңеленә музыка аша ла алып барып еткереү маҡсатынан сығып эшләнде һәм, әйтергә кәрәк, бик уңышлы килеп сыҡты. Кеше психологияһы төрлө була бит, телеэкрандар аша күрһәтелгән тапшырыуҙар барыһында ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырмауы ихтимал, ә бына шәхсән ошо тематикаға ҡағылышлы һүҙҙәр ишеткәндә, йырҙар тыңлағанда, бейеүҙәргә тамаша ҡылғанда ул күңелгә нығыраҡ үтеп инә ала. Ошо концерт аша тамашасы башҡорт балына арналған күпме йырҙар барлығына хайран ҡалды. Был үҙенә күрә яңы психологик алым да булып тора. Ғөмүмән, минең уйымса, артабан да ошо йүнәлештә Башҡортостаныбыҙҙың мөғжизәләренә арналған кисәләр күрһәтеүҙе дауам итергә кәрәк. Халыҡты радио, телеэкрандар аша көн дә яңғыраған йырҙар менән генә алдаштырып булмай, уларға ниндәйҙер бер мөһим темаға ҡоролған тәрән йөкмәткеле концерт программалары кәрәк. Тамашасы ниндәй генә йыр-моң кисәһенә бармаһын, ул унан күңел асыуҙан бигерәк, ниндәйҙер фәһем, тәрбиә лә алып ҡайтырға тейеш.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАКИМДАР АҠЫЛЫ...

## әйләнә-тирәһендәге кешеләргә ҡарап

Хакимдарҙың аҡылы тураһында унын әйләнә-тирәһендә тупланған кешеләргә ҡарап фекер йөрөтәләр.

**(Никколо Макиавелли).**

Олатай булыуым мине борсомай, ә бына ҡатынымдың өләсәйгә әйләнеүе ҡыйын.

**(Граучо Маркс).**

Әлбиттә, аҡсанан да мөһимерәк әйберҙәр ҙә бар донъяла, әммә ул әйберҙәрҙе бит аҡсаһыҙ алып булмай.

**(Проспер Мериме).**

Яҡшы матбуғат баҫмаһы - ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүе.

**(Артур Миллер).**

Ҡорал өсөн ун һум һалғансы, матбуғат баҫмаһы өсөн бер һум һалыу файҙалыраҡ: ҡоралдан һөҙөмтә булыуы икеле, ә бына матбуғат баҫмаһы көн-төн туҡтамай һөйләй ала.

**(Ричард Никсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Донъяуи ғилемгә һыуһаған бер йәш кеше бер аҡыл эйәһенә килә һәм һорауҙары менән мөрәжәғәт итә. Ул ун һорау бирә аҡһаҡалға һәм ун яуап ала. Тәүге һорау шулай була:**

**- Донъяла кемдәр күберәк: тереләрме, үлеләрме?**

**- Тереләр, - тип яуаплай аҡыл эйәһе, - сөнки үлеләр был донъяла йәшәмәй.**

**Икенсе һорау:**

**- Хайуандарҙы нимә аҫырай: ерме, диңгеҙме?**

**- Диңгеҙ. Сөнки ер үҙе донъя океанында бер утрау.**

**- Ниндәй хайуан иң хәйләкәре? - Өсөнсө һорау шулай яңғырай.**

**- Кеше күҙенә салынмағаны.**

**Дүртенсе һорау:**

**- Ни өсөн һеҙ яуызлыҡ менән көрәшергә кәңәш итәһегеҙ?**

**- Данға күмелеп йәшәр һәм данға күмелеп донъя ҡуйыр өсөн.**

**- Иң тәүҙә нимә булған: көнмө, төнмө?**

**- Көн бер көнгә алдараҡ булған.**

**- Ауыр яуап! - тип ҡысҡырып ебәрә шунда йәш кеше.**

**- Ауыр һорауға ауыр яуап, - ти аҡһаҡал.**

**Алтынсы һорау:**

**- Нисек һөйөү ҡаҙанырға?**

**- Иң көслө бул, иң ҡурҡыныс булма.**

**Етенсе һорау:**

**- Нимә көслөрәк: йәшәүме, үлемме?**

**- Йәшәү. Сөнки унда ғазаптар күберәк.**

**Һигеҙенсе һорау:**

**- Кеше ҡасан үлергә тейеш?**

**- Үлем йәшәүгә ҡарағанда яҡшыраҡ тойолғанда.**

**Ҡалған ике һорау тарихта һаҡланмаған..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4726